ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

11-17 апрель (алағарай)

2015

№15 (641)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Китап магазинында...

ниңә башҡортса китаптар юҡ?

3

Оптимист булып тыумайҙар...

оптимисты тәрбиәләйҙәр

6

Ерле булып ҡалабыҙмы,

әллә ерҙән яҙабыҙмы?

8-9

Аҫылташҡа әйләнһен өсөн...

мәғдәнде лә шымартырға кәрәк

11

ТВ-программа 14

Башҡорттар, иң беренсе нәүбәттә тәбиғәт балалары булараҡ, үҙҙәрендә кеше булмышының иң яҡшы һыҙаттарын сағылдыра: эскерһеҙлек, киң күңеллелек, ышаныусанлыҡ, ысын күңелдән ярҙам итергә әҙер тороу, яғымлылыҡ, ҡунаҡсыллыҡ. Был сифаттар уларҙың ҡырыҫлыҡтан, уҫаллыҡтан азат булған эскерһеҙ һәм хәйләһеҙ йөҙҙәрендә сағыла.

С. Г. Рыбаков.

ПОЗИТИВ

ҮҘЕҢДЕ ЯРАТ!

Уңышлы бул, тигән саҡырыуҙар йышыраҡ ишетелә хәҙер. Уңышлы булыуҙың сере үҙеңдә яратыуҙа, тип уйлайым. Эйе, был бик ауыр ғәмәл. Сөнки беҙҙе үҙебеҙҙе яратырға өйрәтеп үҫтермәнеләр.

Берҙән-бер көндө ҡулымдан бар эш тә килә, барыһын да булдыра алам икәнде аңланым да, үҙемдең ҡәҙеремде белергә кәрәклегенә төшөндөм. Бәй, ошондай аңлау килеп, үҙ-үҙемә ышанысым артҡайны, быға тиклем тормошҡа ашыра алмаған эштәрем дә алға китте лә барҙы. Икеләнеүем, баҙнатһыҙлығым, ҡурҡаҡлығым менән бик күп матур башланғыстарымдың юлын ҡыйып торғанмын икән дә. Бына шуны аңлағандан һуң, үҙ-үҙемә бөтөнләй икенсе күҙлектән ҡарай башланым. Ҡыйыуыраҡ булырға, алға алғанды эшләргә өйрәндем. Үҙеңде яратыу, хөрмәт итеү - ул башҡаларға ҡарата эгоист булыу тигәнде аңлатмай. Киреһенсә, ундай кешеләр ҡалғандарға иғтибарлы, йылы мөнәсәбәттә була. Сөнки үҙ-үҙең яратҡан кешенең күңеле тыныс, тормошо түңәрәк бит. Шулай итеп, үҙегеҙҙе беренсе урынға ҡуйырға һәм һәр көн үҙегеҙгә аҙ булһа ла ваҡыт бүлергә тырышығыҙ. Йәғни күңелегеҙ талап иткән эште эшләгеҙ. Шул саҡта һеҙ ысынлап та уңышлы кешегә әйләнерһегеҙ! Яҡлағыҙ, наҡлағыҙ уны!

Гөлназ ИШЕМҒОЛОВА.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Башҡорт боронғо ер билән йәшәүсе аҫаба халыҡ булараҡ билдәле. Ә бына бөгөн һинең ерең бармы, уны нисек файҙаланаһың?

Эдуард БАЙСУРИН, Мәләүез районы, Юлдаш ауылы: Пай ерем бар, әлбиттә, ерһеҙ башҡорт буламы! Үткән быуаттың 94-се йылдарында уҡ ергә документтар әҙерләп, хосусилаштырып ҡуйҙым. 8 гектар еремдә хәҙер йыл да мал үләне - күстерә сәсәм. Беҙҙә пай ерҙәрен ала алмай тороп ҡалғандар ҙа булды, шуныһы бик йәл. Үҙегеҙгә мәғлүм, яйлап, икеләнеп йөрөй торған мәсьәлә түгел ине бит. Ерле булыуҙың әле бер кемгә лә зыяны тейгәне юҡ, киреһенсә, ер - ул таяныс, иртәгәһе көнөңә ышаныс. Юҡҡа ҡан түккәнме ни уның өсөн ата-бабаларыбыҙ! Ҡатыныма, уҡытыусы булараҡ, 4 га ер тейҙе, уны ҡуртымға бирҙек, шуның иҫәбенә мал, ҡош-ҡорт аҙығы тараталар, ул да файҙа. Ә бына пенсиялағы уҡытыусыларға, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренә ер бирелмәне. Ситкә сығып китеп, әлеге ваҡытта төрлө ҡалаларҙа йәшәгән ауылдаштарыбыҙ ҙа ата-әсәһе еренән ҡолаҡ ҡаҡты, сөнки уны мираҫ рәүешендә законлаштырмай һуҙып йөрөнөләр. Әйтеп тә ҡараным, тик беҙҙең халыҡ ҡуҙғалғансы, башҡалар үҙ мәнфәғәтендә эште бөтөрөп тә ҡуйҙы. Пай ерҙәрен үҙ аллы эшкәртеп файҙалана алмаған күптәр, шул иҫәптән пенсионерҙар, уны Салауат исемендәге СПК-колхозға ҡуртымға тапшырҙы, 8 гектар ерен 25 меңгә һатып ебәреүселәр ҙә бар. Был турала ваҡытында күп яҙылды, һөйләнелде, шулай ҙа ерен һатыусылар осрап тора беҙҙә лә. Урындағы хужалыҡтарға һатһа, ни әйтерһең дә бит, тик ситтән килгән ҡалын кеҫәлеләргә генә "осормаһындар" ине арзанға. Аҡса бер ваҡытта ла етмәй, уны тотонаһың да, юҡҡа ла сыға, ә ер - мәңгелек мөлкәт ул: туйындырыусы ла, йәшәтеүсе лә беҙҙе.

(Дауамы 2-се биттә).

ШАҒИР ҺҮҘЕ



БАШҠОРТ КИТАБЫ

Хәреф уйлау, нәшриәттәр төҙөү -
Кешелектең иң ҙур табышы.
Шунан кеше юлы билдәләнгән,
Был - донъяның алға барышы.

Тәүге утты тапҡан кеше һымаҡ
Тапҡан кеше ерҙә китапты.
Кешелек тә, ошо мәлдән башлап,
Үтә алған барлыҡ этапты.

Китап менән кеше - кеше булған
Мең быуатлыҡ оҙон юлында.
Тик китаплы халыҡ - ысын халыҡ,
Китап томһа, һәр кем ҡулында.

Аҡыллы һүҙ көтөп, күпме заман
Күпме халыҡ күҙен талдырған.
Уны тапҡас, мәңге онотмаҫҡа,
Ташҡа соҡоп, яҙып ҡалдырған.

Алдарымда ҙур һорауҙар торһа,
Китап һүҙе менән аҡланам.
Китаптан бит, ҡай бер дәүләттәр ҙә
Уттан ҡурҡҡан һымаҡ һаҡлана.

Оло юлдан барған милләт уңа,
Юлға китап тотоп киткәндә.
Үҙ телендә сыҡҡан китап ҡына
Һәр милләттә милләт иткән дә...

Юлда маяҡ һымаҡ беҙҙең Китап -
Арттырыусы донъя ҡоттарын.
Ул бит юлдан яҙҙырмайса килә
Рухи ҡоллоҡтарҙан ҡотҡарып.

12+

✓ Аçабалыҡ - башҡорт өсөн тыуған ер ҙә, туйындырған, кейендергән, рухын нығытҡан, ҡайғыһын баҫҡан, шатлығын киңәйткән сығанаҡ та, үҙенсә генә йырлатҡан илһам шишмәһе лә, йәшәү рәүеше һәм батырлыҡ ғәйрәте лә.

ИҒТИБАР!

МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

1 апрелдән Башҡортостандың бөтә почта бүлексәләрендә 2015 йылдың икенсе ярты йыллығына 50665 индекслы "Киске Өфө"гә яҙылыу 539 һум 76 тин, 50673 индекслыһы (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) - 569 һум 76 тин тәшкил итәсәк.

Өфөлө йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:

• Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 420 һумға яҙылырға була.

• Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - 252 һум.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 252 һум.

• Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә **он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу" һылтанмаһы аша vipishi.ru сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

• **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Мартта гәзитебеҙҙе яҙҙырып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан кемдәрҙер Рәшит Назаровтың **"Ер һәм йыһан йыры"** йыйынтығын, Шәүрә Шәкүрованың **"Өфө вокзалы"**, **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, **"Антология поэзии Башкортостана"**, Ә. Әсфәндийәровтың **"История сел и деревень Башкортостана"**, башҡортса **"Дини календарь"**, Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуаныуы ихтимал. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

• **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!

МӨХӘРРИРИӘТ.

ӘЙТ, ТИһӘГЕҘ...

Башҡорт боронан ер билән йәшәусе аҫаба халыҡ булараҡ билдәле. Д бына бөгөн һинең ерең бармы, уны нисек файҙаланаһың?

(Башы 1-се биттә).

Ғәлим ХИСАМОВ, яҙыусы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты: Үҙен башҡорт һанаған һәр кеше, һис шикһеҙ, аҫаба ер, аҫаба хоҡуҡ тураһында ишеткәне бар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уны белгәне-белмәгәне бар. Аҫабаны белмәгәне өсөн кешене ғәйепләп тә булмай, сөнки был хаҡта бик аҙ һөйләнелде, ә яҙылғаны тағы ла аҙыраҡ булды. Аҫабалыҡтың тарихы бик бай. Башҡорттоҡо күпме булһа, уныҡы ла шул тиклем. Тамыры меңәр йыл тәрәнлегендә ята, оҙонлоғо менән киңлеге Оло Иҙелдән - Тубылғаса, Боҙло диңгеҙҙән Аралға тиклем һуҙылған. Шул ҡәҙәр арауыҡта ятҡан башҡорт ере. Әлбиттә, тулыһынса түгел. Был тарафта унан башҡа ла халыҡ күп булған, әммә береһендә лә башҡорттоҡо һымаҡ аҫаба хоҡуғы булмаған. Бүтән халыҡ кеүек, күсенә, яҡшы тормош эҙләп, күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән яҡҡа сығып та китә алыр ине (әйтәйек, VIII быуатта был тирәнән киткән мадъярҙар, XVI быуатта Уралды ташлап киткән ноғайҙар һымаҡ), әммә башҡорт үҙ еренән ҡуҙғалмаған. Уны бәйләп тотҡан иң ҡәҙерле мөлкәте - аҫаба ере. Үҙ ерендә ул хужа, тулы хоҡуҡлы кеше. Ситтәге һымаҡ ят тупһаларҙа ятып йоҡламай. Башҡорттоң аҫаба хоҡуғын бер кем дә - бай ғына түгел, батша ла тартып ала алмаған. Ә кемдер уға яҫҡына башлаһа, башҡорт суҡмарын да күтәрә, керешкә уғын да һала алған. Шуға уның һәр бер яу тарихы аҫабалыҡ, ер менән бәйле. Башҡорттарҙың ергә аҫаба хоҡуҡтары 1649 йылғы Собор йыйынтығында, Мәскәү дәүләте, артабан Рәсәй империяһы батшаларының һәм Сенаттың указдарында, 1917 йылдың 27 октябрендәге "Ер тураһындағы декрет" ҡабул ителгәнсе һаҡланып килә. "Ер тураһындағы декрет" менән Совет власы башҡа халыҡтарҙың ерле синыфын ғына язаға тарттыра, башҡорттарҙы тулыһынса милекһеҙ һәм хоҡуҡһыҙ итте. Элекке мәғлүмәттәр аҫаба башҡорттарҙың яҡшы йәшәгәнлеге тураһында һөйләй. Мәҫәлән, ҡайһы бер тархандарҙың йылҡы малы (байлыҡтың төп күрһәткесе) бер нисә меңгә еткән, шул тиклем үк һыйыр малы, һарығы булған. Батырҙарҙың малы тархандыҡынан аҙыраҡ, ә старшина, йөҙ башы, илле башы тип йөрөтөлгән хәрби етәкселәрҙең мөлкәте бер аҙ кәмерәк була. Ябай халыҡ араһынан иң ялҡау тип иҫәпләнгәндәр ҙә хатта бер-ике ат, башҡа мал-тыуар тотҡан. Аҫабалыҡ - башҡорт өсөн тыуған ер ҙә, туйындырған, кейендергән, рухын нығытҡан, ҡайғыһын баҫҡан, шатлығын киңәйткән сығанаҡ та, үҙенсә генә йырлатҡан илһам шишмәһе лә, йәшәү рәүеше һәм батырлыҡ ғәйрәте лә, балаларын үрсетер, үҙе ятып йән бирер түшәк тә. Был тураla барыбыҙ ҙа беләбеҙ, уны ҡәҙерләргә кәрәклеген һүҙһеҙ-өнһөҙ ҙә төшөнәбеҙ.

Фәрзәнә МИФТАХОВА, пенсионер: Өлкәнерәк быуын вәкилдәре, ҡалала йәшәүенә ҡарамаҫтан, ергә йәбешеп ята. Пай ерҙәре түгел инде был уларҙың, ә баҡса участкаһы. Иртә яҙҙан машиналыһы - машинала, йәйәүләһе йәмәғәт транспортында итек кейеп, арҡаларына биштәрен артмаҡлап, бәләкәй арбаларын һөйрәп, ҡаланан ситкә - баҡсаларына ағыла башлай, йәйен шунда соҡсоноп үткәрә һәм ҡара көҙгә тиклем шулай бөксәңләп, ергә башын эйеп эшләүен белә. Бик эйерһең башыңды - ер бит ул. Ауылда тыуып-үҫеп, ғүмерен ҡалала үткәргән кешене ер барыбер үҙенә тарта икән шул. Ҡайһы берәүҙәрҙең, ҡала халҡы ялҡау бит ул, тигәне менән бер ҙә килешерлек түгел шуға күрә. Һәр хәлдә, быныңөлкән быуын кешеләренә ҡағылышы юҡтыр, тип уйлайым, сөнки төп эшен ташлап, хаҡлы ялға сығыусылар эш фронтын баҡса ерендә йәйелдереп ебәрә. Минең дә 6 сотый ерем бар. Яңғыҙым тороп ҡалып, һаулыҡ яғы ла самаланып киткәс, албырғап ҡалдым. Бер үҙең эшкәртә алмаҫһың, һат та ҡуй, тиеүселәр күп булды, тик ерһеҙ тороп ҡалыуҙы күҙ алдына ла килтереп булмай. Барып эшкә тотонһаң, ҡулдарыңа ҡеүәт өҫтәлгәндәй, иртәгәнә ышанысың артҡандай була. Емертеп уңыш алып булмаһа ла, үҙеңә етерлек йәшелсә-емеште генә үҫтерергә була, һис юғы, сәскәләр ултыртып та ҡыуаныс кисерәһең, тик шаулы, томра ҡала стеналарына ғына бикләнеп ултырмаҫҡа! Эшһөйәр йәш ғаиләләрҙең дә бөтөн йәйҙәрен баҡса ерҙәрендә бил бөгөп үткәреүен күреү күңелгә ҡыуаныс өҫтәй. Сит ерҙәргә китеп, ситтәге ҡояшҡа ҡыҙынып ятҡансы, үҙ ереңдә эшләп ләззәт алыуға ни етә! Күршеләрем, мәҫәлән, үҙҙәренә ҡышҡылыҡҡа етерлек йәшелсә-емеш үҫтереп ала. Эш унда ғына ла түгел, әлбиттә: иң мөһиме, балалары ла уларға ярҙамлашып, хеҙмәт һөйөп үҫә. Күптәр матурлап тороп ҙур итеп йорт күтәрә, мунса һала - курорттарың ары торһон.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?

ҮҘЕГЕҘГӘ ҮҘЕГЕҘ ЯРҘАМ ИТЕГЕҘ!

Ришат ҒИБӘҘУЛЛИН, Учалы районы Миндәк ауыл биләмәһе башлығы: Ауыл ерендә йәшәүе ауыр, кешенең дәрте лә, рәте лә юҡ, тиҙәр. Минеңсә, бындай ҡараш бөтөнләй дөрөҫ түгел. Ауылда йәшәр өсөн бары тик тырышлыҡ, күңелде төшөрмәү генә кәрәк. Башҡорт боронданүҙ көсө менән тормош көткән, ситкә ярҙам һорап йөрөмәгән, тырыш һәм эшсән булған. Иң мөһиме, һәр эштә лә таһыл, оҫта ҡуллы беҙҙең халыҡ. Бөгөнгө заманда ла үҙ көсө менән гөрләтеп донъя көткән кешеләр күп. Йәшәйем тигән кеше ауылда ла йәшәй ала, ҡала фатирындағы кеүек уңайлыҡтарҙы ауыл өйөндә лә булдыра. Мәҫәлән, беҙҙең Баттал ауылы халҡы ситкә, ҙур ҡалаларға йәшәргә китмәй, йәштәрҙең 90-95 проценты ауылда ҡала. Улар шәхси өҫтәмә хужалыҡ

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Хөкүмәте бойорого буйынса, 27 апрелдән 27 майға тиклем республикала дөйөм ҡулланылыштағы юлдарҙа һәм ундағы яһалма ҡоролмаларҙа, шулай уҡ юл буйҙарында төҙөкләндереү, санитар-техник хәлде яҡшыртыу, тәртип урынлаштырыу буйынса айлыҡ үткәрелә. Урындағы үҙидаралыҡ органдарына Һамар-Өфө-Силәбе автомобиль магистрале идаралығы һәм "Башкиравтодор" предприятиеһы менән берлектә айлыҡҡа әҙерлек буйынса штабтар булдырырға, ремонт бригадаларын ойоштороуҙы тәьмин итергә, асфальт-бетон япмаларҙы, автомобиль юлдарын ремонтларға тәҡдим ителде.

✓Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының Башҡортостандағы төбәк штабы ағзалары "Үлемһеҙ полк" акцияһында ҡатнаша. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, Өфөлә генә 20 мең самаһы кеше еңеү сафына баҫасаҡ тип көтөлә. "Үлемһеҙ полк" акцияһы тәүге тапҡыр 2012 йылда Томск ҡалаһында үтте. 2015 йылдан ул рәсми рәүештә дөйөм Рәсәй акцияһына әүерелде. Быйыл "Үлемһеҙ полк"ты Рәсәйҙең һәм донъяның 600-ҙән ашыу ҡала һәм ауылдарында, шул иҫәптән Берлинда үткәреү планлаштырыла.

✓Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары, Башҡортостан вәкиле Лилиә Ғүмәрова Санкт-Петербургта үткән "Рәсәйҙәге мәғариф: традициялар һәм хәҙерге заман саҡырыуы" форумы эшендә ҡатнашты. Лилиә Ғүмәрова ҡатнашыусыларға мәғариф һәм мәҙәниәт өлкәһендә алып барылған закондар сығарыу эше хаҡында һөйләне. Сенатор шулай уҡ Рәсәй тарихына һәм традицияларына ихтирам тәрбиәләү буйынса әһәмиәтле бурыстар властың, һөнәри фәнни-педагогик берекмәнең, гражданлыҡ йәмғиәте институттарының берҙәм тырышлығын талап итеүен билдәләне.

✓Өфө мәктәптәре уҡыусылары, юғары һәм урта махсус уҡыу йорттары студенттары, хәрби-патриотик һәм үҫмерҙәр клубтары тәрбиәләнеүселәре Еңеү көнөнә арналған патриотик флешмобта ҡатнашты. Сара барышында ҡаланың хәрби-патриотик клубтары тәрбиәләнеүселәре сығыш яһаны, өсмөйөшлө хаттар таратты. Акцияға һуғыш ветерандары һәм тыл эшсәндәре саҡырылғайны. Йәш быуын Бөйөк Ватан һуғышы геройҙарына арнап, "Еңеү көнө" йырын башҡарҙы. Ҡатнашыусылар шулай уҡ "70" һанына теҙелде.

✓ *Ләкин ул магазиндарҙа башҡорт телендә нәшер ителгән, бәләкәй балаларға тәғәйенләнгән сағыу һүрәтле, әҫәр геройҙары матур, аңлайышлы итеп һынландырылған әкиәт китаптарының булмауы күңелде ҡырҙы.*

БАШ ЙОРТТА

КИТАП МАГАЗИНЫНДА...

ниңә башҡортса китаптар юҡ?

Тау башында балҡый бер ҡала,
Ул ҡала Өфө тип атала...
тип йырлап үҫһәм дә, әлегәсә бер тапҡыр ҙа республикабыҙҙың баш ҡалаһын күрергә насип булманы. Китаптағы һүрәттәрҙән, телевизор экрандарынан күреп кенә белгән Өфөбөҙгә быйыл, ниһайәт, аяҡ баҫырға насип итте. Һүрәт - һүрәт инде, ни тиклем генә сағыу һәм сифатлы булмаһын, Башҡортостаныбыҙҙың йөрәге булған баш ҡалабыҙҙың бар матурлығын, күркәмлеген, мөһабәтлеген, ғәйрәтлеген күрһәтә алмай. Ҡалаға инмәҫ элек үк башланған күренештәр күңелгә ятып, һөйөнөс бүләк итә. Аэропорт яғынан автомобиль юлы буйлап килгәндәрҙе ҡаршы алыусы "Өфө" һәм "Уфа" яҙыуҙары баш ҡаланы күреү хыялының тормошҡа аша башлауына ишара яһағандай, мине сәләмләп ҡаршы алды.

Ләкин аптырайһы, ғәжәпләнәһеләрем алда булған икән. Салауат проспекты буйлап елдергәндә, Октябрь проспектын уҙғанда тирә-яғымдағы панораманы күҙ ҙә алмай күҙәттем. Ул машиналарҙың күплеген күреп, һушым китте. Ә ҡырмыҫҡа кеүек мыжғып торған йәйәүлеләр араһында бөтөнләй аҙашып ҡала яҙҙым. Ҡайҙа һыйҙырып бөтәлер Өфө был тиклем халыҡты, тигән уй мейене ҡайтып киткәнсе сүкене. Ҡалала барған төҙөлөш эштәренең күплеген дә билдәләп үтмәй булмай. Бигерәк тә Өфөнөң тарихи үҙәгендәге бер-береһенең өҫтөнә ауырҙай итеп төҙөлөп ятҡан әллә нисә ҡатлы биналар хайран да ҡалдырҙы, аптыратты ла. Бәләкәй генә майҙансыҡта ла шул тиклем ҙур объекттарҙы һыйҙырыу әмәлен табыуҙарын күргәс, ҡала үҙәгендәге ерҙең ни тиклем хазина икәнлегенә асыҡ төшөнәһең.

Өфөгә килеүен килгәс, Салауат Юлаев һәйкәле торған майҙанды күрмәйенсә ҡайтыу мөмкин түгел, әлбиттә. Бихисап фотоһүрәттәрҙә күргән урында - батырыбыҙ һәйкәле янында фотоға төшөү үҙе бер байрам минең кеүек төпкөл ауылдан килеүсегә. Майҙанда бер сүп-сар әҫәре күренмәй, ҡар бөртөктәренә ергә лә төшөп етергә мөмкинлек бирмәй, йыйыштырып торалар, юлдары ла тип-тигеҙ. Шуға күрә бында күргән таҙалыҡтан һуң Черниковка биҫтәһендәге бысраҡлыҡты, автомобиль юлының да, йәйәүлеләр өсөн тротуарҙарҙың да емерелеп бөткәнлеген күреү матур тәьҫораттарҙы бер аҙ юйҙы.

Күңелгә хуш килгән күренештәрҙән шуны билдәләп үткем килә. Ҡаланың ҡайһы бер йорттарында уның элек ниндәй бина булыуы хаҡындағы мәғлүмәт менән алтаҡталар ҡуйылған. Бер-нисә быуат элек шул йортта ҡайнаған тормоштоң өнһеҙ шаһиттары әле булһа үҙҙәренең тәүге бөйөклөгөн юғалтмаған. Был бик дөрөҫ эшләнгән аҙым, сөнки тарих онотолорға тейеш түгел - берәү иғтибар итмәһә лә, икенсеһе мотлаҡ күҙ һалып үтәсәк.

Баш ҡалала китап магазиндарының күп булыуы шатландырҙы. Тимәк, китап уҡыусылар, һүҙ ҡҙерен белгәндәр күп. Ләкин ул магазиндарҙа башҡорт телендә нәшер ителгән, бәләкәй балаларға тәғәйенләнгән сағыу һүрәтле, әҫәр геройҙары матур, аңлайышлы итеп һынландырылған әкиәт китаптарының булмауы күңелде ҡырҙы. Мин ингән китап магазиндарында мәктәп уҡыусылары өсөн тәғәйенләнгән, һүрәтһеҙ китаптарҙы ғына күрҙем. Шул уҡ ваҡытта туғандаш халыҡ телендә нәшер ителгән, сабыйҙар өсөн бик тә ҡулай сағыу китаптар бихисап. Күрше төбәктә башҡорт телендәге әкиәттәр табырға мөмкинме икән? Юҡтыр ул, моғайын, тигән уйға ҡалып, ауылыма табан юл тоттом.

Зөлфәт ӘМИНЕВ.
Хәйбулла районы.

булдырып, ауыл хужалығы менән шөғөлләнәләр, иген, йәшелсә үҫтереп, күпләп мал-тыуар аҫрап, етештергән продукциялары менән яҡындағы Магнитогорск, Белорет, Учалы, Верхнеурал ҡалаларында сауҙа итәләр. Юғары уҡыу йорттарын тамамлаусы егет-ҡыҙҙар ҙа эшкә ауылға ҡайта. Баттал ҙур түгел, ни бары 111 генә йорттан тора, шулай ҙа әлеге көндә беҙҙә 112 бала иҫәпләнә. Сөнки йәш ғаиләләрҙә кәмендә өс бала үҫә. Туғыҙ йыллыҡ мәктәптә 51 бала уҡый, яңы уҡыу йылында беренсе синыфҡа 13 бала уҡырға килергә тора.

Баттал ауылы былтыр "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашты. Бындағы халыҡ күптән инде айыҡ тормош алып бара, йәштәр ҙә эсмәй, магазинда спиртлы эсемлектәр һатылмай. Эскегә урын булмағас, тормош та гөрләп бара. Шуға күрә, ауылдар бөтә, тип яфаланмайбыҙ, йәштәргә ауыл ерендә йәшәүҙең перспективаларын күрһәтергә тырышабыҙ. Хәҙер хөкүмәт тә ауыл хужалығына йөҙ борҙо. Беҙ ҙә, үҙ сиратыбыҙҙа, ауыл кешеһен борсоған мәҫәләләрҙе хәл итергә тырышып торабыҙ. Кешенең алдына ҡуйған маҡсаты булғас, ауыл ерендә лә иҫ китерлек матур итеп донъя көтә ала ул, әҙергәбеҙер, алдына бөтә нәмәне ҡайҙандыр алып килеп биреүҙәрен ҡулын һуҙып көтөп ултырмай. Шуға күрә, милләттәштәргә, бигерәк тә йәштәргә шуны әйтер инем: ауылда йәшәйһеңме, ҡалаламы - мөһим түгел, ҡайҙа ла матур тормош ҡороп йәшәүҙе маҡсат итегеҙ. Ситтән килеп бер кем дә "Һиңә аҡса, йорт, бизнес кәрәк икән, ҡайҙа ярҙам итәйем", - тип бушлай ярҙам итмәй, ундай мөғжизә тик әкиәттәрҙә генә булыуы мөмкин. Үҙ көсөгөҙ, аҡылығыҙ менән эш итергә, ҡуйған маҡсаттарығыҙға өлгәшергә өйрәнегеҙ. Сәм, дәрт, ынтылыш - һәр йәш кешегә хас сифаттар икәнен беләбеҙ, бер-берегеҙгә ҡарап, ярышып донъя көтөргә кәрәк. Сәмде көнләшеүҙән айыра белгән кеше һәр ваҡыт уңышҡа өлгәшә.

Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

ӘҘӘП БАРҘА ИМАН БАР

Беҙ, баш ҡалабыҙҙың Сипайлово биҫтәһендәге бер йорттоң бер үк подъезында йәшәүсе дүрт ҡатын-ҡыҙ, бергәләшеп концерттарға йөрөргә яратабыҙ. Сезон башланыу менән иғландар һәм репертуарҙы ҡарап, алдан үк әҙерләнә башлайбыҙ.

Шулай бик матур ғына йөрөп ята инек, үкенескә, һуңғы бер юбилей кисәһенән күңелебеҙ төшөп ҡайттыҡ. Шунан һуң бергәләп фекер алыштыҡ та, ҡулға ҡәләм алырға булдыҡ, сөнки ошоға тиклем иғтибар итмәҫкә тырышһаҡ та, артабан түҙерлек булмай башланы.

Рәйес Низаметдиновтың "Йәштәр һарайы"ндағы юбилей кисәһе ине. Һүҙ юҡ, концерт бик шәп булды. Ул шулай һәйбәт кенә тамамланыуға етеп килгәндә, сәхнәгә ярым-яланғас "кейенгән" йырсы Л. килеп сыҡты - шул боҙҙо ла инде кәйефте. Йәнәһе лә, яңы "имидж" тыуҙыра бирәү. Бер талай тамашасыға яланғас арҡаһын ҡуйып, артын һелкетеп, сәхнә түрендә торҙо. Әмәлгә ҡалғандай, артҡы рәттә юбилярҙың кисәһенә килгән Учалы ҡунаҡтары - ике хәҙрәт ултыра ине. Береһе, был ниндәй оятһыҙлыҡ, тине, икенсеһе тамаҡ ҡырып ҡына ҡуйҙы. Ә беҙ ер тишегенә инерҙәй булып оялып ултырҙыҡ. Тәүгә генә шулай ҡыланмай был йырсы. Бер шулай Конгресс холдағы концертта ла сәхнәгә шортик менән генә килеп сығып шаңҡытҡайны. Башҡаса был йырсы ҡатнашҡан концертҡа йөрөмәҫ булдыҡ...

Ярай ҙа ошоноң менән бөтһә. Юҡ, киреһенсә, ҡатын-ҡыҙ артистарыбыҙ түш-тәндәрен күрһәтеү буйынса бәйге асҡан, әйтерһең дә! Исемләп һанап сығырға була ана шундай тотанаҡһыҙҙарҙы. Гәзит уҡыусы беҙҙе дөрөҫ аңлаһын: шөкөр, мүкләнеп бөткән дини фанаттар түгел беребеҙ ҙә. Сәхнә ҡайһы бер иркенлектәрҙе аҡлай ҙа кеүек, ләкин барыбер ҙә үҙебеҙҙең иманлы, әҙәпле, итәғәтле мосолман ҡатындары икәнлекте, тамашасылар араһында ла ысын матурлыҡ, илаһи камиллыҡты яланғас тәндә генә күрмәгән тәрбиәле кешеләр барлығын иҫәпкә алһаҡ ине. Мәскәү, сит ил артистары менән әҙәпһеҙлектә, әрһеҙлектә түгел, моң, талант йәһәтенән ярышырлыҡ өлгөләргә эйәрергә кәрәк. Заманы шундай, тип әйтеүселәр ҙә табылыр, ләкин хаяһыҙлыҡ, оятһыҙлыҡ менән беҙ бер ҡасан да, бер ҡайҙа ла килешеп йәшәйәсәгебеҙ юҡ!

Әхирәттәрем исеменән
Мәрйәм ҒӘЛИЕВА.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә ун фермер баҙары барлыҡҡа киләсәк, шуларҙың өсөүһе эшләй башланы ла инде. Йәрминкәләр төп туҡланыу продукттарына хаҡтарҙың артыуын туҡтатырға ярҙам итәсәк, тип көтөлә. Фермер баҙарҙары ял көндәрендә генә түгел, аҙна буйына эшләйәсәк. Бының өсөн баш ҡалала ун майҙансыҡ бүленгән. Бөгөнгө көндә өс фермер баҙары - "Өфө - Затон" трассаһында, Эшсе хәбәрселәр урамында һәм Дим районында - һатып алыусыларҙы ҡабул итә башланы. Ҡалғандары май байрамдары алдынан асыла. Яңы форматтағы баҙарҙар санитар нормаларға ярашлы итеп йыһазландырыласаҡ. Көн һайын ауыл хужалығы етештереүселәре урын өсөн аҡса түләйәсәк. Сауҙа урынын ҡуртымға алыу хаҡы көнөнә 300 һумдан ашмаясаҡ.

✓Йыл башынан алып республикала инфляция 6,7 процент тәшкил итте, Рәсәй буйынса уртаса күрһәткес - 7,4 процент, тип хәбәр итә Башҡортостанстат. 2014 йылдың мартынан 2015 йылдың мартына тиклем республикала инфляция 15,9 процент тәшкил итте, ил буйынса - 16,9. Беренсе кварталда инфляция үҫешенең кәмеүе күҙәтелә. Әгәр ҙә ғинуарҙа төбәктең ҡулланыусылар баҙарындағы хаҡтар алдағы айға ҡарағанда 3,4 процентҡа артһа, февралдә - 2,3 процентҡа, мартта - 1 процентҡа күтәрелгән. Мартта аҙыҡ-түлек - 1,8 процентҡа, ҡулланыу тауарҙары 0,9 процентҡа ҡиммәтләнгән. Хеҙмәттәр күрһәтеүҙең алдағы айға ҡарата 0,3 процентҡа кәмеүе билдәләнгән.

✓15 апрелдән 17-нә тиклем Мәләүездә Фәйзи Ғәскәров исемендәге призға төбәк-ара халыҡ бейеүҙәре фестивале уҙғарыла. Унда үҙешмәкәр халыҡ бейеүҙәре ансамблдәре сығыш яһаясаҡ, һуңынан гала-концерт һәм еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы буласаҡ. Сараның ойоштороусылары - Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Мәләүез районы хакимиәте. Тәүге тапҡыр фестиваль 1987 йылда үткәрелә. Һуңынан өс йылға бер уҙғарыла башлай. Белешмә өсөн телефондар: (347) 289-62-00, 8-917-484-59-16.

✓Силәбе өлкәһендә Башҡортостандың Сибай концерт-театр берекмәһенең гастролдәре уҙҙы. Артистар башҡорттар күпләп йәшәгән Арғаяш, Ҡоншаҡ, Сыбаркүл райондарында ете концерт бирҙе. Концертта Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Баязит Байназаров, Рөстәм Хәсәнов, республика конкурстары лауреаты Зәлиә Нурлы, "Тархан" эстрада-фольклор төркөмө, "Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамбле солистары, Башҡортостандың халыҡ артисы Айтуған Дәүләткирәев ҡатнашты.

✓ *Ултырышта ҡатнашыусылар наркоманлыҡты һәм алкоголизмды иҫкәртеү мәсьәләләрен көйләүсе федераль документ әҙерләү кәрәк, тигән һығымтаға килде.*

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

ҠУНАҠТАР ҠАРШЫЛАРҒА ӘҘЕРБЕҘ

Өфө ШОС һәм БРИКС халыҡ-ара саммиттарына тулыһынса әҙер тиерлек, уны үткәреүгә 97 көн ҡалды, тип хәбәр итте Башҡортостан Хөкүмәте министры Руслан Мирсаяпов Өфөлә уҙған матбуғат конференцияһында.

Дөйөм алғанда, саммиттарға төрлө объекттар төҙөү өсөн 10 миллиард һум самаһы талап ителде. Мәҫәлән, Руслан Мирсаяпов һүҙҙәренсә, республика Конгресс-холды реконструкциялауға 600 миллион һум аҡса бүлде. "Өфө" аэропортының халыҡ-ара терминалын төҙөкләндереүгә лә шундай уҡ сумма бүленгән. Бынан тыш, Башҡортостан федераль ҡаҙнанан 2 миллиард һум алған. Улар аэродромды яңыртыуға һәм Ағиҙел йылғаһының ярҙарын нығытыуға тотонолған. Инвесторҙар ҡунаҡхана комплекстарын төҙөүгә 6 миллиард һумдан ашыу аҡса һалған.

Руслан Мирсаяпов халыҡ-ара сараларға әҙерлектең мөһим мәлдәрен атап үтте. Өфө аэропорты төҙөкләндерелгән, уның пассажирҙар үткәреү һәләте сәғәтенә 200-ҙән 800-гә тиклем артты. Икенсе осоу-ултырыу һыҙаты эшләй башланы, был Өфөнән донъяның теләһә ниндәй мөйөшөнә тура рейстарҙы арттырырға мөмкинлек бирә. Бөгөнгө көндә аэропорт халыҡ-ара стандарттарға тап килә һәм илдә иң яҡшыларҙың береһе булып тора.

Өфөлә ҡунаҡханалар асыла, улар майиюндә үк форумда ҡатнашыусыларҙың тәүге эшсе төркөмдәрен ҡабул итәсәк. Баш ҡалала халыҡ-ара кимәлдәге ете яңы ҡунаҡхана эшләй башлай.

Баш ҡаланы төҙөкләндереү дауам итә. Саммиттарға әҙерлек барышында 130 мең квадрат метрҙан ашыу тротуар плиткаһы, 140 мең квадрат метр асфальт һалынған, меңдән ашыу урам фонарҙары ҡуйылған, ике меңдән ашыу бейек ағас ултыртылған.

Юл инфраструктураһын үҫтереү сиктәрендә 39 участкала ремонт эштәре алып барыла.

8-10 июлдә Өфөлә форум эшенә бәйле бер ниндәй ҙә ҡыйынлыҡтар булмаясаҡ, тип белдерҙе Руслан Мирсаяпов. Салауат Юлаев исемендәге майҙанда ғына йөрөү тыйыласаҡ. Унда халыҡ-ара матбуғат үҙәген ойоштороу күҙаллана. Ҡайһы бер автобус маршруттары үҙгәрәсәк, был хаҡта алдан хәбәр ителәсәк.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

"ИҪКЕ ӨФӨ" ҺАҠЛАНАСАҠМЫ?

Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов йәмғәт эшмәкәрҙәре менән Өфөнөң мәҙәни һәм тарихи мираҫы объекттарын һаҡлау һәм тергеҙеү мәсьәләләрен тикшерҙе.

Өфөлә йәшәүсе Майя Малина республика Башлығына "Иҫке Өфө" үҙәген тергеҙеүҙе һорап мөрәжәғәт иткән. Хат авторынан тыш, фекер алышыуҙа ҡала округы хакимиәте ҡарамағындағы Мәҙәни ҡомарткыларҙы һәм архитектура һәйкәлдәрен һаҡлау буйынса йәмғәт советы ағзалары Владимир Захаров һәм Александр Лебедев, шулай уҡ Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова һәм Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ҡатнашты.

Майя Малина Аксаков урамында, мәҙәни мираҫ объекты булып торған йортта йәшәй. Хәҙерге көндә бина, йәшәүгә яраҡһыҙ, тип табылған һәм граждандарҙы авария хәлендәге торлаҡ фондынан күсереү буйынса төбәк адреслы программаһына индерелгән. "Иҫке Өфө"нөң тарихи йөҙөн киләсәк быуындар өсөн һаҡлап ҡалыу теләге Майя Малинаны хат яҙырға мәжбүр иткән.

- Ҡалабыҙҙа алып барылған "тығыҙ" төҙөлөш мине борсоуға һала, - тип һөйләне Майя Малина. - Уларҙың ҡайһыларына ҡарауы ла ҡыҙғаныс. Киләсәк быуындарға нимә тороп ҡала һуң?

Рөстәм Хәмитов "тығыҙ" төҙөлөшкә ҡарата әйтелгән тәнҡит һүҙҙәре менән ризалашты. Уның билдәләүенсә, архитектура ҡомарткылары булып һаналған йорттарҙа йәшәүселәрҙе күсереү, уларға уңайлы шарттар тыуҙырыу зарур. Ә ҡалған ҡоролмаларҙы элекке хәленә ҡайтарып, йәмғәт ойошмалары, офистар йәки учреждениеларға тапшырырға кәрәк.

Крайҙы өйрәнеүсе, "Өфөнөң архитектураһын яҡлау" йәмғәт хәрәкәте етәксеһе Владимир Захаров баш ҡалала архитектура һәйкәлдәрен үҙ эсенә алған туристик кластер булдырырға тәҡдим итте. "Октябрь революцияһы, Гоголь, Аксаков урамдарындағы "Иҫке Өфө"нө хәтерләтеп торған ҡайһы бер ҡоролмаларҙы һаҡлап ҡалыу мөһим", - тине крайҙы өйрәнеүсе. Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис университеты доценты Александр Лебедев ҡала төҙөлөшө ҡануниәтенең камил булмауы һәм мәҙәни-тарихи мираҫты һаҡлау һәм тергеҙеү өлкәһендә юғары квалификациялы кадрҙар әҙерләү мәсьәләләренә ҡағылды.

Әминә Шафиҡова менән Ирек Ялалов һуңғы йылдарҙа архитектура һәйкәлдәрен һаҡлау өлкәһендә башҡарылған эштәр һәм яҡын киләсәккә пландар хаҡында һөйләне. Республика Башлығы Өфөлә генә түгел, башҡа ҡалаларҙа (Стәрлетамаҡ, Бөрө, Белорет, Бәләбәй, Баймаҡ һәм башҡалар), райондарҙа мәҙәни һәм тарихи мираҫ объекттарын асыҡлау һәм паспортлаштырыу өлкәһендә эште әүҙемләштерергә ҡушты. Ул шулай уҡ бюджет һәм бюджеттан тыш аҡсаларҙы үҙендә туплаясаҡ Архитектура һәйкәлдәрен тергеҙеү буйынса махсуслаштырылған фонд булдырырға тәҡдим итте. Фонд тергеҙеү эштәрен тиҙләтергә мөмкинлек бирер ине. Бынан тыш, фонд аҡсалары иҫәбенә ошо тармаҡ өсөн махсус белгестәр әҙерләргә мөмкин буласаҡ.

2015 йылдың ғинуар айына ҡарата Өфө биләмәһендә 874 мәҙәни мираҫ объекттары теркәлгән. Уларға архитектура, ҡала төҙөлөшө, тарих, сәнғәт, археология һәйкәлдәре, иҫтәлекле урындар инә. Шуларҙың 307-һе Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының мәҙәни мираҫ объекттарының (тарих һәм мәҙәниәт ҡомарткыларының) берҙәм дәүләт реестрына индерелгән, ҡалған 567-һе асыҡланған мәҙәни мираҫ объекттары булып һанала.

ДЕПУТАТТАР ЭСКЕЛЕККӘ ҠАРШЫ

Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай йортонда Рәсәй Дәүләт Думаһы фракция-ара депутаттар төркөмөнөң наркоманлыҡты, алкоголизмды, ВИЧ-инфекцияны һәм башҡа социаль сирҙәрҙе комплекслы иҫкәртеү системаһын булдырыу һәм комплексы реабилитациялау мәсьәләләре буйынса 16-сы күсмә ултырышы булып үтте.

Ултырыш Рәсәй Федерацияһының Дәүләт Думаһы Рәйесе урынбаҫары рәйеслегендә үтте. Уның эшендә Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев, Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы һәм Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары, Федерация Советы ағзалары, министрлыҡ һәм ведомство етәкселәре һәм вәкилдәре, эксперттар ҡатнашты.

Закон сығарыусылар ғәмәлдәге ҡануниәттең наркоманлыҡты һәм алкоголизмды иҫкәртеү өлөшөнә анализ яһаны, ғәмәлдәге закон сығарыу нормаларын Рәсәй субъекттарында ҡулланыу практикаһы мониторингы йомғаҡтарын ҡараны. Депутаттар ил төбәктәрендә алып барылған эштең һөҙөмтәлелеген баһаланы, тип хәбәр ителәр республика парламентының матбуғат хеҙмәтенән. Ултырышта ҡатнашыусылар наркоманлыҡты һәм алкоголизмды иҫкәртеү мәсьәләләрен көйләүсе федераль документ әҙерләү кәрәк, тигән һығымтаға килде.

Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев наркоманлыҡтың һәм алкоголизмдың халыҡ араһында таралыу проблемаһы социаль бәләгә әүерелде һәм Рәсәйҙең милли хәүефһеҙлегенә ҡурҡыныс менән янай, тип билдәләне. Республика парламенты рәйесе Башҡортостандың алкоголизмды һәм наркоманлыҡты иҫкәртеүҙә хоҡуҡи көйләү тәжрибәһе, Дәүләт Йыйылышының федераль закон сығарыуҙа ҡатнашыуы тураһында һөйләне.

ҺЫУ ТАШМАҠСЫ

7 апрелдә республикала тәүлек эсендә йылғаларҙа һыу кимәленең күтәрелеүе билдәләнде. Был хаҡта республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Сәнәғәт, инновация үҫеше һәм эшҡыуарлыҡ буйынса комитеты ултырышында Башҡортостандың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Илдар Һаҙыев хәбәр итте.

Стәрлетамаҡ эргәһендә Ағиҙел йылғаһының кимәле - туғыҙ, Стәрле һәм дала йылғалары - 10, Бочкарев ауылы янында Дим йылғаһы 11 пунктҡа күтәрелгән.

- Күҙаллауҙар буйынса, быйыл ташҡын уртаса күп йыллыҡ кимәлдә булыр тип көткәйнек, әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Гидрометтың һуңғы прогноздарынан күренеүенсә, бассейн буйынса ҡар ҡатламындағы һыу запасы күп түгел - уртаса күп йыллыҡ күрһәткестәрҙән 30-60 процентҡа кәмерәк. Хәүефһеҙлектән тыш, бында республиканы һыу менән тәьмин итеү һәм һыуһаҡлағыстарҙы тултырыу мәсьәләһе килеп тыуа, - тине Илдар Һаҙыев.

Синоптиктар хәбәр итеүенсә, йылғаларҙың асылыуы ғәҙәттәгенән өс көнгә алдараҡ көтөлә, тип өҫтәне министр. Ағиҙел йылғаһы бассейнында һыу кимәле норманан 0,2-1,5 метрға түбәнерәк, дала йылғаларында нормаға ярашлы буласаҡ.

- Быйыл республиканың 29 муниципаль берәмектәрендәге 156 ауылға һыу баҫыу хәүефе янай. Күп тигәндә - 258. Йорттарҙы һыу баҫҡан осраҡта 570 ваҡытлыса йәшәү урыны әҙерләнгән, шуларҙың 50-һе - оҙайлы. 532 автобус һәм 31 йөҙөү сараһы файҙаланыуға әҙер, - тип һөйләне Илдар Һаҙыев.

Дөйөм алғанда, оператив төркөмдәрҙең эшен ойоштороу республика Хөкүмәте ҡарарына ярашлы тормошҡа ашырыла.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Май айында республика халҡын өҫтәмә ял көндәре көтә. Байрамдарға бәйле 1, 2, 3, 4 һәм 9, 10, 11 май ял көндәре булып тора. 30 апрелдәге һәм 8 майҙағы эш ваҡыты бер сәғәткә ҡыҫҡара. Рәсәйҙең Хеҙмәт кодексы статьяһы нигеҙендә төп һәм өҫтәмә түләнгән йыллыҡ отпуск биргәндә 1 һәм 9 майҙағы ял көндәре отпусктың календарь көндәре иҫәбенә индерелмәй.

✓Илнур Әминев Өфө ҡалаһы хакимиәтенең Йәштәр сәйәсәте комитеты рәйесе итеп тәғәйенләнде. Илнур Ғәбдинур улы Әминев 1988 йылда Өфөлә тыуған. Башҡорт дәүләт университетын, "Юғары иҡтисад мәктәбе" милли-тикшеренеү университетын һәм О.Е. Кутафин исемендәге Мәскәү дәүләт юридик университетын, Юғары иҡтисад мәктәбе аспирантураһын тамамлаған. Федераль һәм республика власть органдарында, Мәскәүҙең һәм Башҡортостандың ғилми ойошмаларында эшләгән.

✓Өфөләге Халыҡ мәшғүллеге үҙәгендә уҡған сәнәғәт предприятиелары өсөн вакансиялар йәрминкәһе һөҙөмтәләре буйынса 75 кеше һәм ҡаланың дөйөм мәғлүмәттәр базаһында анкеталарын ҡалдырған 38 граждан эшкә саҡырылды. Йәрминкәгә бөтәһе 436 кеше килде, уларға 21 сәнәғәт предприятиеһындағы 565 эш урыны хаҡында мәғлүмәт бирелде. Киләһе вакансиялар йәрминкәһе 16 апрелдә үткәрелә, унда күмәртәләп һәм ваҡлап һатыу, дөйөм туҡланыу, ресторан һәм ҡунаҡхана бизнесы предприятиеларының вакансиялары тәҡдим ителәсәк.

✓Тиҙҙән башҡорт режиссеры Айнур Асҡаровтың "Әсә" нәфис фильмы Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, Һамарҙа һәм Пермдә күрһәтеләсәк. Хәбәр ителеүенсә, фильм бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара форумдарҙа, кинофестивалдәрҙә ҡатнаша. Мәҫәлән, 21 апрелдән 25-нә тиклем башҡорт режиссерының ҡыҫҡа метражлы фильмы Һамарҙа "Балаларға - кино" халыҡ-ара кинофестивалендә, 18 майҙан 24-нә тиклем Чебоксар халыҡ-ара кинофестивалендә күрһәтелә. 10 майҙан 24-нә ҡәҙәр "Әсә" фильмы Анкарала Халыҡ-ара ғаилә фильмдары кинофестивале, 30 майҙан 31-нә тиклем Ульяновскиҙа "ТөбәкКино - 2015" төбәк кино төшөрөүселәренең бөтә Рәсәй форумы тамашасыларына тәҡдим ителә.

✓22 апрелдә Башҡортостан "Георгий тасмаһы" Бөтә Рәсәй акцияһына ҡушыла. Уны Волонтерҙар хәрәкәте һәм йәштәрҙең башланғыстарына ярҙам итеү үҙәгенең әүҙем ағзалары республиканың ҡала һәм райондарында бушлай тарата. Ойошма хәбәр итеүенсә, 22 апрелдә төбәктә 27 мең самаһы таҫма таратыласаҡ.

✓ *В. А. Сухомлинский исемендәге миҙал быйыл Йылайыр районы Юлдыбай ауылы урта мәктәбенең математика уҡытыусыһы Фәрит Фазыловҡа тапшырылды.*

һАЙ-һАЙ-һАЙ!

КИЛӘСӘК МӘКТӘБЕНДӘ...

юғары оҫталыҡтағы уҡытыусылар эшләйәсәк

Ошо көндәрҙә баш ҡалала "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы - 2015" республика конкурсына йомғаҡ яһалды. Республиканың иң көслө педагогтарын туплаған был ярыштың абсолют еңеүсеһе исеменә Өфө ҡалаһының 58-се лицейынан математика уҡытыусыһы Рима Ронжина лайыҡ булды.

Хәйбулла районы Аҡъяр ауылы 2-се урта белем биреү мәктәбенең рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гөлнара Мәмбәтова. Фекер алышыу барышында педагогтар бер тауыштан заманса техника, төрлө электрон белем биреү системалары асҡан мөмкинлектәрҙе файҙаланыу бала менән йәнле аралашыуҙы бер ҡасан да алмаштыра алмаясаҡ, тип билдәләне.

"Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" республика конкурсы был һөнәр эйәләре өсөн бер-береһенең эш тәжрибәһен, яңы уҡытыу алымдарын өйрәнеүҙе генә күҙ уңында тотмай, ә үҙ һөнәренә тоғро хеҙмәт итеүсе уҡытыусыларҙың эшен тейешенсә баһалау, уларҙың йәмғиәттәге абруйын күтәреүгә булышлыҡ итеүсе сара булараҡ та әһәмиәтле. Шуға ла бәйгенең еңеүселәре менән бер рәттән, унда ҡатнашыусыларҙы ла төрлө номинацияларҙа билдәләп һәм бүләкләп китеү матур бер традицияға әүерелгән. Конкурста бер нисә тапҡыр ҡатнашып, оло еңеүгә килгәндәр күп бит уҡытыусылар араһында. Улар ана шул номинацияларҙа бүләкләнеп, оло еңеүгә дәртләндерелгән дә инде. "Мин был еңеүгә оҙаҡ килдем", - тине бит конкурстың еңеүсеһе Рима Рауил ҡыҙы ла.

Әйткәндәй, ошо уҡ тантанала йыл да М.Аҡмулла исемендәге БДПУ тарафынан бирелә торған В. А. Сухомлинский исемендәге миҙал быйыл Йылайыр районы Юлдыбай ауылы урта мәктәбенең математика уҡытыусыһы Фәрит Фазыловҡа тапшырылды.

Сәриә ҒАРИПОВА.

Быйыл "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" республика конкурсында бөтәһе 105 педагог ҡатнашҡан. Улар араһында мәктәптә оҙайлы йылдар эшләп, егерме йылдан ашыу эш стажы туплаусылар менән бер рәттән, биш йыл элек хеҙмәт юлын башлап, уҡыусыларының һәм коллегаларының ихтирамын яулап өлгөргән йәштәрҙең дә булыуы һөйөндөрҙө. Баһалама ағзалары әйтеүенсә, конкурстың кимәле тәүге йылдарҙа үткәрелгәндәргә ҡарағанда һиҙелерлек күтәрелгән, уҡытыусыларҙың заман менән бергә атлауы, бер үҙгәреште лә иғтибарҙан ситтә ҡалдырмауы улар асыҡ дәрес үткәргәндә лә, оҫталыҡ дәрестәре һәм түңәрәк өҫтәл артында фекер алышҡанда ла асыҡ сағылған.

Әйткәндәй, "Киләсәк мәктәбе. Мәктәптең киләсәге" темаһына арналған түңәрәк өҫтәл барышында педагогтар белем усаҡтарында киләсәктә ниндәй үҙгәрештәр булырын ғына күҙаллап ҡалманы, бөгөн үҙҙәрен борсоған проблемалар тураһында ла фекер алышты. Киләсәк мәктәбенең иң төп ҡаҙанышы яҡшы матди-техник базаһы булыуҙа түгел, ә унда юғары профессионал педагогтар эшләүендә, тигән фекер ҙә яңғыраны. "Уҡытыусы балалар менән бер телдә һөйләшергә, улар ҡыҙыҡһынған нәмәләр менән ҡыҙыҡһынырға бурыслы. Мин үҙем "Бәйләнештә" селтәре аша хатта уҡыусыларымдың ниндәй йыр тыңлауына иғтибар итәм, улар кеүек, бөтөн яңылыҡтар уртаһында булырға тырышам. Былар барыһы ла балалар менән тығыҙ бәйләнеш булдырыу, дәресеңә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу, фекер алышыу һәм аралашыу өсөн бик мөһим", - ти бәйгенең еңеүсеһе.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

СОЦИАЛЬ ТҮЛӘҮҘӘР АЛЫУ ЕҢЕЛӘЙӘ

РФ Президенты В. Путин яңы ҡул ҡуйған законға ярашлы, һалым органдарына күсерелгән аҡсаның бер өлөшөн хәҙер декларация тултырмайынса ла кире ҡайтарырға мөмкин.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: Рәсәй халҡы белем алыу (үҙҙәре йәки балалары), медицина хеҙмәттәре йәки дарыуҙар алыуға тотонолған сығымдарын һалым органдары аша 13 процент күләмендә социаль һалым түләүе (налоговый вычет) итеп кире ҡайтара ала. Ләкин был сумма йылына 120 мең һумдан артып китергә тейеш түгел.

Әлегәсә льгота менән файҙаланыу өсөн тәүҙә йыл йомғағы буйынса декларация тултырырға, һуңынан ғына түләү алырға мөмкин ине. Хәҙер ҡағиҙәләр үҙгәрә. Декларация тултырырға ла, йыл тамамланғанын көтөргә лә кәрәкмәй. Бары тик үҙегеҙгә уңайлы ваҡытта һалым инспекцияһынан түләүҙәр алыу тураһында раҫлау ғына талап ителә. Ошо ҡағыҙҙы эш биреүсегә тапшыраһығыҙ һәм аҡса күсеүен көтәһегеҙ.

Тағы ла бер яңылыҡ коммерция ойошмаларына ҡағыла - улар хәҙер мотлаҡ түңәрәк мисәт алырға бурыслы түгел. Уны, теләк буйынса, электрон ҡултамға алмаштырыуы мөмкин. Әммә был турала фирманың уставында яҙылырға тейеш.

һОРАУ - ЯУАП

ФАТИР КЕМГӘ ТЕЙӘ?

Ҡыҙыбыҙ кейәүгә сыҡты. Беҙ йәш ғаиләгә фатир һатып алырға аҡсалата ярҙам итмәксебеҙ. Тик шулай ҙа күңел тыныс түгел: донъя хәлен белеп булмай, хәҙер йәштәр айырылышыуҙы уйын шайы ла күрмәй. Фатир фәкәт ҡыҙыбыҙҙың бүленмәй торған мөлкәте булып ҡалһын өсөн беҙгә ни эшләргә?

- Дөйөм ҡағиҙә буйынса, никахта һатып алынған фатир, уның кем исеменә яҙылыуына ҡарамайынса, дөйөм мөлкәт иҫәпләнә. Айырылышҡан хәлдә, ир менән ҡатын икеһе лә яртышар өлөшкә, йәғни торлаҡтың икенән берәр өлөшөнә дәғүә итергә хаҡлы. Судта, әлбиттә, бер яҡтың фатир өсөн күберәк аҡса һалыуын иҫбатлап, күберәк өлөшкә иҫәп тоторға ла була, ләкин быныһ өсөн кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр кәрәк буласаҡ. Мәҫәлән, ҡыҙығыҙға фатир һатып алыуға аҡсаның атаһы иҫәбенән күсерелеүе йә булмаһа, расписка булырға тейеш. Күп осраҡта бындай иҫбатлау документтарын табыуы ҡыйынлыҡ тыуҙыра. Был аңлашыла ла: ғаиләләр бер-береңә аҡса биреүҙе бер кем дә "протоколға" теркәп ултырмай. Фатир ҡыҙығыҙҙыҡы булып ҡалһын өсөн иң ышаныслы юл - никах килешеүе төҙөү. Милек һатып алыуға кемдең күпме өлөш индереүен, айырылышҡан осраҡта кемгә күпме өлөш тейеш булыуын (булмауын) йә фатирҙың кем исеменә тулыһынса тороп ҡаласағы ентеклəп яҙылырға тейеш. Тағы бер юл: әгәр фатир тулыһынса ата-әсә аҡсаһына һатып алына икән, тәүҙә уны үҙегеҙҙең исемгә яҙҙырып, аҙаҡ уны тейешле килешеү нигеҙендә ҡыҙығыҙға бүләк итеү. Бүләк ителгән фатирға ирҙең дәғүә итергә хаҡы юҡ.

Түбәндәгеләрҙе иҫтә тотоу мотлаҡ:

- Фатир никахтан алда хосусилаштырылған булһа, бүленмәй. Никахҡа тиклем кем исемендә булған, айырылышҡандан һуң да шуныҡы булып ҡала.

- Фатир никах ваҡытында хосусилаштырылған булһа, кем исеменә хосусилаштырылған, шулар араһында бүленә. Әгәр ир менән ҡатындың икеһе исемендә булһа, һәр кемгә үҙ өлөшө тейә. Шуныһ мөһим: әгәр ир йә ҡатындың береһе икенсеһе файҙаһына хосусилаштырыуҙан баш тартҡан икән, уны ризалығынан тыш иҫәптән төшөрөү ауыр мәсьәлә. Хатта фатирҙы һатып ебәргән хәлдә лә юридик яҡтан был кеше торлаҡ менән ғүмерлек файҙаланыу хоҡуғына эйә булып ҡаласаҡ.

- Никахтан алда һатып алынған икән, фатир бүленмәй, никахҡа тиклем кемдеке булған - шуныҡы булып ҡала. Мөһим иҫкәрмә: әгәр судта ир йә ҡатындың береһе никах ваҡытында был фатирҙы төҙөкләндереүгә, мәҫәлән, ҡимәтле ремонт өсөн аҡса түккәнлеген (төҙөлөш материалдарына тауар чектары, шаһиттар күрһәтмәһе һ.б.), йә булмаһа никахҡа тиклем фатир өсөн аҡса (банк иҫәбе аша) күсереүен иҫбатлай алһа, был пункт үҙ көсөн юғалта.

- Никах ваҡытында һатып алынһа, кем исемендә булыуына ҡарамаҫтан, уртаға бүленә (никах килешеүендә башҡа төрлө шарттар күрһәтелмәгән булһа).

- Бүләк йә мираҫ рәүешендә алынған булһа, кемгә бүләк ителгән йә мираҫҡа ҡалған, уның мөлкәте булып ҡала һәм бүленмәй. Быныҡ никахтан алдамы, аҙаҡмы икәне мөһим түгел.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.

Тире ауырыуҙары

❖ Ҡайһы бер тире ауырыуҙарын, мәҫәлән, тимерәү йәки экземаны лимон менән дауалап була. Ун көнлөк дауалау курсы ваҡытында лимон һутын түбәндәгесә ҡабул итергә: 1-се көн - 5, 2-се көн - 10, 3-сө көн - 15, 4-се көн - 20, 5-се көн - 25, 6-се көн - 20, 7-се көн - 20, 8-се көн - 15, 9-сы көн 10, 10-сы көн 5 лимондың һутын эсергә. Көндәлек норманы бер нисә өлөшкә бүлеп эсергә. Лимон һуты тештең эмален ашамаһын өсөн ауыҙҙы мотлаҡ сайҡатырға кәрәк.

❖ Ҡыҙыл тимерәү мәлендә көнөнә 2 тапҡыр зарарланған урынды 3 минут тирәһе ҡайнар һыуҙа тоторға. Дауалау курсы - 2 аҙна.

❖ Тирегә сыҡҡан күп кенә сабыртмалар баллы-һарымһаҡлы компрестарҙан һуң юҡҡа сыға. Тигеҙ күләмдә алынған бал менән бешереп, иҙелгән һарымһаҡты төнгөлөккә сабыртмаға һөртәләр. Иртән был урынды калийлы һабын менән йыуалар һәм яңынан компресс яһайҙар. Сабыртмаларҙың урыны бөтәшкәнсе дауам итәләр.

❖ Тимерәү, һытҡыларҙан балан һуты ярҙам итә. Балан төнәтмәһе экземанан ла ҡотҡара. Төнәтмәне түбәндәгесә әҙерләйҙәр: 1-2 ҡалаҡ баланға 1 стакан ҡайнар һыу ҡоялар һәм 4 сәғәт төнәтәләр. Көнөнә 4 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ Ҡыҙыл көртмәленең (брусника) емештәре лә, япраҡтары ла файҙалы. Ҡыҙыл көртмәле һуты тимерәү менән ҡорсаңғыны дауалай. Япраҡтары иһә ҡанһырап торған яраларҙы бөтәштерә, быныҡ өсөн япраҡты һыуға еүешләп яраға халалар һәм өҫтөнән көртмәле һутына манып алынған марля бәйләйҙәр.

❖ Гөлйемеш тә халыҡ медицинаһында әүҙем ҡулланыла. Дарыуханала һатылған гөлйемеш майы экзема, дерматит, псориаз, трофик сей яраларҙы дауалай.

❖ Экземаны дауалау өсөн дегәнәк төнәтмәһе ҡулланыла. 1 балғалаҡ дегәнәк тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡоюһың һәм 10 минут ҡайнатаһың. Көнөнә 4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Ошо уҡ төнәтмәне компресс итеп ҡулланығыҙ. Ул экзема, дерматиттан файҙалы.

❖ Алоэның яңы ғына ҡырҡып алынған япрағын икегә ярып, шешкә һалһаң, ул уның эренен һурып ала. Ике сәғәт һайын повязканы алыштырырға.

Айбикә ЯҠУПОВА.

✓ *Бөтә проблемаларҙы ла хәл итеп була, барлыҡ хәлдәрҙән дә сығыу юлы бар - ошоно бала күңеленә һеңдереү кәрәк. Уны үҙенең хаталарынан ҡурҡмаҫҡа өйрәтегеҙ. Кем бер нәмә лә эшләмәй, шул ғына хаталанмай.*

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

МАЛ ҠОТОН ҺАҠЛАЙ...

Элек-электән башҡорттар ҡорбан малы итеп һыйыр йәки үгеҙгә өҫтөнлөк биргән, быны дин дә, боронғо йолалар ҙа талап иткән. "Ҡоблан батыр" эпосында геройҙың әсәһе, улым имен ҡайтһа, игеҙ быҙауҙарҙы ҡорбанға килтерәм, тигән нәҙер әйтә.

Әлбиттә, бында һүҙ уларҙың икеһен дә ҡорбан килтереү тураһында һүҙ бармауы ла ихтимал. Сөнки борон игеҙ быҙау, игеҙ ҡолон донъяға килһә, уларҙың береһен хужалыҡта ҡалдырып, икенсеһен мохтажлыҡ кисергән берәй кешегә, муллаға биргәндәр йәки ҡорбанға килтергәндәр. Күктәргә һәм изгеләргә ҡорбан булараҡ һөт тә ҡулланылған. Һыйыр һауғанда елендәге аҙаҡҡы тамсы һөттө ергә һауалар - был ерҙең өлөшө. Яңы быҙаулаған тананың тәүге һөтөнөң бер өлөшөн бәләкәй бер һауытҡа һалып, малға именлек, ҡот теләп, аҙбарға эләләр - был инде аҙбар эйәһенең өлөшө. Ошо уҡ ышаныуҙар йәшен атыу һөҙөмтәһендә башланған янғынды һөт йәки әсе ҡатыҡ менән һүндереү кеүек йолаларҙың нигеҙендә ята булһа кәрәк. "Күк утын"а һыу һибеү ҙур гонаһ иҫәпләнгән, сөнки йәшен - Аллаһ ихтыяры буйынса барлыҡҡа килә, ул кешенең өйөнә инеп йәшерengән шайтанды ата, тигәндәр. "Аллаһ утын"а һөт ҡойоп, моғайын да, ҡорбан һөтө менән Алланың мәрхәмәтенә өлгәшергә тырышҡандарҙыр.

Баш ите ашау йолаһы, шулай уҡ "Үгеҙ йөҙөгө" уйынында ла боронғо ҡараштар ята. Баш ите ашау йолаһы яҙ үткәрелә торған иң ҙур байрамдарҙың береһе. Ул сама менән марттың аҙағында үтә. Был көндө ғаилә өтөлгән баш ите менән һыйланыу өсөн туғандарын, дуҫтарын саҡыра. Унда табынға ултырғас та мотлаҡ аят уҡыла, табында "Малың ишле булһын, малыңдың ҡото китмәһен!" тигән теләктәр әйтелә. Итте бүлеүсе һәр кешегә тигеҙ өлөш сығара: ҡолаҡтар - яҡшы ишетһен, тел - татлы һөйләшһен, күҙ - яҡшы күрһен, баш мейеһе - зиһенең салт булһын өсөн һ.б. Баш һөйәген ташларға ярамаған, уны аҙаҡтан ергә күмеп ҡуялар, юғиһә, малдың ҡото китә.

"Үгеҙ йөҙөгө" уйыны үҙәк, көньяҡ, көньяҡ-көнсығыш райондарында киң таралған. Иң тәүҙә ҡорбан үгеҙ була торған кешене һайлайҙар, бының өсөн уйынды алып барыусы ҡатнашыусыларҙың береһенең усына йөҙөк һала. Уйынсыларға арҡаһы менән ултырған кеше уның кемдә икәнлеген белергә тейеш. Ул йөҙөк кемдә икәнлеген дөрөҫ әйтһә, был кеше "үгеҙ" була, дөрөҫ әйтмәһә, йыр йырларға, бейергә тейеш була. 5 тапҡыр яңылышһа, ул үҙе "үгеҙ" итеп һайлана. Һуңынан үгеҙ һуйыу сәхнәһе башлана: уйынды алып барыусы ҡатнашыусыларҙы "үгеҙ"ҙе "һуйырға" ебәрә, әммә "үгеҙ" уларҙы үҙенә яҡын ебәрмәй. Шул саҡта уйынды алып барыусы үҙе "үгеҙ"ҙе "һуя", ҡатнашыусылар ике төркөмгә бүленеп, "ит" өсөн (ғәҙәттә, берәй көнкүреш әйбере) талаша. Уйындың аҙағында улар "үгеҙҙең итен ашай", йәғни "үгеҙ" булған кеше ҡытыҡлай, семтей. Ни өсөн уйын "Үгеҙ йөҙөк" тип атала һуң? Борон башҡорттар тиренән йөҙөк, беләҙектәр эшләп, тағып йөрөгән булһа кәрәк. Был тотем хайуанға әйләнеүҙе белдергән. Ыуыҙ ҡоймағы йолаһы шулай уҡ изге хайуандың мәрхәмәтенә лайыҡ булыуға ынтылыу, малдың ишәйеүенә ҡыуаныуҙы күрһәтергә тырышыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. Ғәйнәләрҙә шулай уҡ ыуыҙ бөкмәһе, ыуыҙ шәңгеһе бар.

Ф. Илембәтов, А. Илембәтова. "Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан. (Аҙағы).

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

ОПТИМИСТ БУЛЫП ТЫУМАЙҘАР...

оптимисты тәрбиәләйҙәр

Һәр ата-әсә үҙенең балаһын киләсәктә уңышлы итеп күргеһе килә. Ә бар йәһәттән дә уңышҡа өлгәшеүҙең бер сере, ғалимдар раҫлауынса, оптимист булыуҙа. Был һәләт кешегә тыумыштан бирелмәй, шуға күрә балала оптимислыҡ тәрбиәләү мөһим. Был бурыс, иң беренсе сиратта, ата-әсә иңенә төшә. Баланың алдағы тормошон яҡшыраҡ һәм яҡтыраҡ итеүҙә ҙур роль уйнаған оптимислыҡ һыҙаттарын тәрбиәләү нигеҙҙәрен психолог Регина ҒИЗЗӘТУЛЛИНА еткерә.

- Оптимистар - донъяға позитив мөнәсәбәт менән ҡараған кешеләр. Улар уңышһыҙлыҡты тынысыраҡ кисерә, ауырлыҡты еңелерәк үтә, киләсәккә ышаныслыраҡ ҡарай һәм һәр ваҡыт барыһының да яҡшы булырына шикләнмәй. Бындай кешеләр һирәгерәк ауырый һәм оҙағыраҡ йәшәй. Иманым камил, барлыҡ атай-әсәйҙәр ҙә балаһының төрлө сирҙәргә бирешмәйенсә, оҙон бәхетле ғүмер кисереүен теләй. Тимәк, һәр ата-әсә балаһында оптимислыҡ тәрбиәләү сараһын күрергә, ә бының өсөн, тәү сиратта, үҙҙәре позитив тулҡында йәшәргә тейеш. Бала айырыуса әсәһенең кәйефенә, күңел торошона һиҙгер була - әсә кешегә һәр ваҡыт ошоно иҫтә тоторға кәрәк. Ғаиләләге ололар тормоштан ҡәнәғәт булып, тирә-йүндәгеләр менән дуҫтарса мөнәсәбәт ҡороп, күңелле йәшәйҙәр икән, бала ла тормошто яратыусан булып үҫә. Шуға күрә, бала алдында ниндәй генә хәлдәр килеп тыумаһын, күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүҙән, ғауға ойоштороуҙан ҡасыу мөһим

Балаға донъяның матур һәм күркәм икәнлеге, уның һәр кемгә лә күп мөмкинлектәр биреүе һәм төрлө юлдар асыуы тураһында аңлатыу мөһим. Ләкин баланы ысынбарлыҡтан ҡурсалап, күңелһеҙлектәрҙән йәшерергә тырышыу ҙа хата, сөнки ҡасан да булһа ул тормош ауырлыҡтары менән күҙмә-күҙ осрашасаҡ һәм ысынбарлыҡ уны һындырырға мөмкин. Шуға күрә, уңайы сыҡҡанда, балаға тормоштағы көрсөктәрҙең ҡотолғоһоҙ булыуын һәм уларҙы еңеп сығыу өсөн үҙеңдә көс табыу мөһимлеген аңлатығыҙ. Быныҡ өсөн уға ғаиләлә үк үҙенең тәүге хаталарын эшләргә, тәүге ауырлыҡтарын үтергә юл ҡуйығыҙ. Быларҙың барыһы ла баланың шәхес булып формалашыуының айырылғыһыҙ өлөшө. Мотлаҡ рәүештә балала үҙ-үҙенә ышаныс тәрбиәләү мөһим. Бөтә проблемаларҙы ла хәл итеп була, барлыҡ хәлдәрҙән дә сығыу юлы бар - ошоно бала күңеленә һеңдереү кәрәк. Уны үҙенең хаталарынан ҡурҡмаҫҡа өйрәтегеҙ. Кем бер нәмә лә эшләмәй, шул ғына хаталанмай - ошо дөрөҫлөктө бәләкәй саҡта үк төшөнгән кеше тормошонда мөһим әһәмиәткә эйә булған аҙымдарҙы эшләүҙән ҡурҡмай, бер ниндәй ҡаршылыҡтарға ҡарамайынса, алға барыуын дауам итәсәк. Баланы хатаны төҙәткәндә һәм унан тейешле һығымталар эшләгәндә барыһы ла яҡшы буласаҡ икәненә ышандырыу ҙа тик ыңғай роль уйнай.

Һәр бала хыялланырға ярата. Бер ҡасан да баланың хыялынан көлмәгеҙ. Уның һәр хыялын йөпләп, ыңғайға көйләп торған ғаиләлә үҫкән бала иртәгәһе көнгә ышаныс менән ҡарарға, киләсәктән ҡурҡмаҫҡа өйрәнә. Бала менән аралашҡанда "булмай", "килеп сыҡмай", "һинең хәлендән килмәй" һәм башҡа кире һүҙҙәр ҡулланыуҙан тыйылыу мөһим. Киреһенсә, уның һәр башланғысын хуплап, дәртләндереп тороу яҡшы. Ата-әсәһенең үҙенә булған ышанысын тойоп үҫкән бала һәр саҡ уңышҡа өлгәшә. Баланы үҙенең алдына аныҡ маҡсат ҡуйырға һәм бер ниндәй ҡаршылыҡтарға ҡарамайынса, шуға өлгәшергә ынтылырға өйрәтеү ҙә киләсәктә үҙенең ыңғай һөҙөмтәләрен бирмәй ҡалмаясаҡ.

Оптимист тәрбиәләүҙә юмор хаҡында ла онотмағыҙ. Ул күпселек балалыҡ ҡурҡыуҙарынан ҡотҡарырға һәләтле. Шуға күрә, күберәк йылмайығыҙ, шатланығыҙ һәм балала ла ошо уҡ сифаттарҙы тәрбиәләгеҙ. Ләкин йылмайыуығыҙ ысын күңелдән булһын, йөрәктән сыҡһын, сөнки балалар алдаҡты һәм ике йөҙлөлөнеүҙе тиҙ күрә һәм тоя. Һәм иң мөһиме - баланың һәр йылмайыуын күрә һәм хуплай белегеҙ. Уның шатланып йылмайыуын уртаҡлашығыҙ, бергә йылмайығыҙ, сөнки йылмайыу - тормошҡа позитив ҡараштың бер сағылышы.

Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА...

БАЛАҢА ТӘҮФИҠ ТЕЛӘ

Төшкө ашҡа өйгә ҡайтмағас, һауа һулап булһа ла киләйем, тип, урамға сыҡтым. Ҡыштың беренсе айының тәүге көндәре ҡаты һыуыҡтар менән килһә лә, беҙ аҙ имшетеп, йылытып ебәргәндәй булды. Күңел дә күтәренке, кәйеф тә шәп. Үҙәк майҙанда халыҡ гөжләп тора: кемдер төшкө ашҡа ашыға, кемдер магазин ҡыҙыра. Минең һымаҡ һауа һуларға сыҡҡандар ҙа байтаҡ, яйлап баҫып, һауа "тәмләп" йөрөүселәр осрап-осрап ҡуя.

Матур уйҙар уйлап, эстән моңло көйҙәр көйләп китеп барам. Алдымдан ғына оло әбейҙе ҡултыҡлаған бер ҡатын атлай. Өҫтөнә кофта ғына кейгән (ярай, уныһы ҡалын ғына), ҡайып бәйләгән яулығы аҫтынан тузған сал сәстәре күренә. Эргәһендәге әбей әсәһе булһа кәрәк. Туғыҙынсы тиҫтәне ҡыуалыр. Һын-килбәтенән шулай самаларға була. Таяҡҡа таянған, башында йоҡарып бөткән дебет шәл, курткаһы ла иҫке генә, аяғында - кәлүш. Ябай кизе-мамыҡ тукыманан тегелгән күлдәгенең дә төҫө уңып бөткән. Хәйер, оло инәй-олатайҙарҙың кейем-һалымға бик иҫе китмәй инде...

Уларҙы үтеп китәйем, тип, аҙымымды шәбәйттем. Мине шәйләп ҡалған ҡатын: "Шәпме!"- тип ҡысҡырҙы. Өҫтөндәге кейеме һабын төҫө күрмәгән, бит-йөҙөнә көлһыу төҫ ингән, ҡырылмаһа ҡырҡ сырыш баҫҡан, күҙ тирәһе көрәнһыуланып бөткән ҡатындың тауышынан һалмыш икәнлеген тойоуы ауыр түгел ине. "Һаумыһығыҙ!" - оло инәйгә ихтирам йөҙөнән генә сәләм бирәм. "Ҡыҙым, һаумы..."- йөрәктәрҙе әрнетеп, һағыш та, әсенеү ҙә, үкенес тә, ҡайғыһы ла бергә һығылып сыҡҡандай булды тауышынан. "Маладис, ҡыҙым, шулай һаулыҡ һорашып йөрө! Эшең уң булһын!"- иҫерек ҡатын ауыҙынан бындай изге һүҙҙәр ишетермен тип уйламағайным, йылмайған булдым да, тиҙерәк уҙып китәйем тип, аҙымымды шәбәйттем. Улар тапҡырына етәрәк, әбей туҡтаҡҡырап, миңә боролдо. Тауышында ғына түгел, йөҙөндә лә һағыш... "Тәүфиҡ теләмәгәнмен шул балама..." Кемгә төбәлгән әбейҙең был һүҙҙәре? Яҙмышынамы? Үҙенәме? Аллаһы Тәғәләгәме?.. Дебет шәлен баҫыңҡырап ябынһа ла, бит-йөҙө сыйналған, һыҙырылған икәнен шәйләп ҡалдым. "Ҡыҙының эшелер..." Мейемде телеп үткән тәүге уй шул булды.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, олоғайған көндәрендә ҡәҙер-хөрмәт кенә күреп йәшәйһе ҡайһы бер әбей-бабайҙарҙың ҡартлыҡ көндәре үҙ балаларынан ҡыйырһытылып, хатта тукмалып үтә шул. Ата-әсәһенең, өләсәй-ҡартатаһының тапҡан-таянғанын, пенсияһын көс ҡулланып тартып алып (өҫтөндә йүнле кейем булмаһа булмай, ашарына алмаһа алмай, әммә эсергә тигәндә көсө лә, аҡсаһы ла табыла), хәмергә әйләндереп, күңел асыуға тотонған бәғзеләрҙе күрә-белә йөрәйбөҙ бит...

"Ҡыҙ баланды ҡырҡ урындан тый", тиҙәр. Был әсә, күрәнең, халҡыбыҙҙың ошо аҡылын тотмағандыр, хәҙер иһә эскелек һаҙлығына батып барған ҡыҙын "йәшел йылан" ҡоллоғонан тартып алырлыҡ көсө ҡалмағандыр. Ниндәй гонаһтары, ниндәй ғәйептәре өсөн бирелгән уға был яҙмыш һынауы? Аҡ биләүҙәргә биләп, бәхет теләп кенә үҫтергәндер бит ул да ҡыҙын! Ҡартайған көнөндә үҙенә таяныс, ярҙамсы булыр тип өмөтләнгәндер...

"Тәүфиҡ теләмәгәнмен шул балама..." Ҡартайған көнөндә ошондай үкенестән дә яманырағы булыуы мөмкинме икән?..

Айгөл АРЫҪЛАНБӘКОВА.

✓ *Дошманға Цеханув ҡалаһы эргәһендә һөжүм иткәндә пулемет дзотын һәм 20 фашисты юҡ итә. 1945 йылдың 27 февралендә ҡыйыу һуғышсыға 2-се Удар армияның №018/н приказы менән II дәрәжә Дан ордены бирелә.*

ИЛҺӨЙӘРЛЕК МӘКТӘБЕ

Интернетта Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугирҙарҙың архив документтары тураһындағы сайт асылғас, мин дә, күп кешеләр һымаҡ, туғандарым, ауылдаштарым тураһында мәғлүмәттәр эҙләй башланым. Уларҙан башҡа үҙебеҙҙең Башҡортостанда тыуып үҫкән яугирҙар тураһында уҡығандарым да бик ҡыҙыҡ тойолдо. Бына, мәҫәлән, Дан орденының тулы кавалерҙары булған яугирҙар тураһындағы мәғлүмәт менән гәзит уҡыусыларҙы ла таныштырмаҡсы булдым.

БАТЫРҘАРЫБЫҘҘЫ БЕЛӘБЕҘМЕ?

Каремов Мәхмүт, 1925 йылғы: Ҡыҙыл армияға 1941 йылдың 20 сентябрендә Баймаҡ райвоенкоматы тарафынан саҡырыла (наградлау ҡағыҙында тыуған йылы яңылыш күрһәтелгән тип уйларға кәрәктер). Ҡыҙылармеец Каремов 90-сы уҡсы дивизияһының 19-сы полкында хеҙмәт итә. Ленинград фронтында һуғыша. Дивизияның 0130/н приказы менән 1944 йылдың 6 ноябрендә III дәрәжә Дан ордены менән бүләкләнә. Пулеметчик, кесе сержант Каремов 2-се армияның 09-н приказы менән 1945 йылдың 7 февралендә II дәрәжә Дан ордены менән наградлана. Батыр яугир 1943, 1944 йылдарҙа 2 тапҡыр яралана. 1945 йылдың 18 февралендә "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнә.

1945 йылдың 28 февраленән алып 6 мартҡа тиклем барған һуғыштарҙа күрһәткән хәрби батырлыҡтары өсөн яңынан II дәрәжә Дан ордены менән бүләкләнә - 2-се Удар армияның №039н приказы 30 мартта сыҡҡан. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, батыр һалдат 1945 йылдың 29 мартында яраларынан вафат була (Эвакогоспиталь ЭГ-3485). Польшаның Прейсинг Старгард ҡалаһының больница ҡаласығында ерләнгән (ҡәбере 29). Ебәрелгән извещение ҡағыҙында Каремов Мәхмүт Баймаҡ районының Мырҙабулат ауылында тыуған тип яҙылған (конезавод №46, Һаҡмар бүлексәһе). Әсәһе - Саматова Хәмизә.

Кулангин Ғәли Әхмәҙей улы, 1923 йылғы. Ҡыҙыл армияға 1942 йылдың 22 февралендә Ейәнсура райвоенкоматы саҡыра. Кесе сержант Кулангин 273-сө уҡсы дивизияһының 812-се артиллерия полкында тоҫкаусы (наводчик орудия) булып хеҙмәт итә. Дон, Брянск, Белорусия, I Украина фронттарында һуғышта ҡатнаша. "Хәрби хеҙмәттәре өсөн" миҙалы менән 1944 йылдың 17 февралендә наградлана. "Сталинградты обороналағаны өсөн" миҙалы ала, 1944 йылдың август айындағы хәрби батырлығы өсөн 273-сө уҡсы дивизияның №114/н приказы менән 16 сентябрҙә III дәрәжә Дан ордены менән бүләкләнә. Сентябрь айында Висла йылғаһының һул ярында плацдарм өсөн һуғыштарҙа 2 немец танкыһын яндыра, дошмандың танк һәм пехота менән 8 һөжүмен ҡаға. Дошмандың взводҡа яҡын пехотаһын, 6 пулеметын юҡ итә. Был батырлығы өсөн "Ватан һуғышы" орденына тәҡдим ителә. Ләкин дивизияның №133/н приказы менән III дәрәжә Дан ордены менән 22 октябрҙә наградлана. 1945 йылдың февраль айында Бреслау ҡалаһы өсөн һуғыштарҙа тағы ла тиңһеҙ батырлығын күрһәтә. Полк командиры уны "Ҡыҙыл йондоҙ" орденына тәҡдим итә. 6-сы Армияның (I Украина фронты) №022/н приказы менән 1945 йылдың 31 мартында II дәрәжә Дан ордены менән наградлана. 25 февраль көнө яралана. Һуғыштан иҫән-һау ҡайта. Кулангин Миңлеғәле Әхмәҙей улы өс Дан ордены кавалеры, Ейәнсура районы Сәғит ауылында тыуған.

Мырҙабаев Михаил Михайлович, 1918 йылда тыуған. Ҡыҙыл Армияға 1939 йылдың 17 июлендә Көйөргәҙе район военкоматынан саҡырыла. Сержант Мырҙабаев 1892-се үҙ йөрөшлө артиллерия полкында хеҙмәт итә. СУ-76 танкының (үҙйөрөшлө орудие) механик-водителе була. Бөтә наградлау ҡағыҙҙарында ла милләте башҡорт тип яҙылған. Исем-шәрифенә килгәндә, иптәштәре, командирҙары шулай хөрмәтләп өндәшкәндәрҙер. Һуғышта 1942 йылдан ҡатнаша, 12 ноябрҙә яралана. Полктың №010/н приказы менән 1944 йылдың 11 июлендә "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнә. 47-се Армияның №0123 приказы менән 1944 йылдың 27 сентябрендә III дәрәжә Дан ордены менән наградлана. Хәрби ҡаҙаныштары өсөн 1945 йылдың 6 февралендә уны полк командиры Ҡыҙыл байраҡ орденына тәҡдим итә, тик 47-се Армияның № 051/н приказы менән 27 февралдә II дәрәжә Дан ордены менән бүләкләнә. 1945 йылдың 15 ғинуарынан 12 февраленә тиклем барған ҡаты һуғыштарҙағы ҡыйыулығы өсөн полк командиры уны "Ватан һуғышы" орденының I дәрәжәһенә тәҡдим итә. Наградлау ҡағыҙында 47-се Армияның №083/н приказы менән I дәрәжә Дан ордены менән 29 мартта наградланды тип яҙылған. Тик №083/н приказында I дәрәжә Дан ордены менән наградланыусы Алейников П. Д, Арсеньев С.Ф., Галат В.П., Мырҙабаев М.М., Садиҡов И-Т.С. исемлектән бөтөнләй төшөп ҡалғандар.

Одер йылғаһында плацдармды киңәйтеүҙә күрһәкән батырлығы өсөн 1945 йылдың 25 апрелендә 125-се уҡсы корпустың №050/н приказы менән "Ваташ һуғышы" орденена тәҡдим ителә. Дүрт орден кавалеры Мырҙабаевтың һуғыштан һуңғы тормошо билдәһеҙ.

Шаһиев Һаҙый Юлмөхәмәт улы, 1907 йылда Ҡырмыҫҡалы районында тыуған, белеме 2 класс. Һуғышҡа 1941 йылда алына. Ҡыҙылармеец Шаһиев 45 мм пушканың тоҫкаусыһы була. Ленинград фронтында 46-сы уҡсы дивизияның 340-сы полкында хеҙмәт итә. Беренсе наградаһы - "Батырлыҡ өсөн" миҙалы 1944 йылдың 17 апрелендә бирелә, ә уның бөтәһе өс "Батырлыҡ өсөн" миҙалы бар. Картильян-Ярви күле эргәһендә барған һуғыштарҙа пушкаһы менән дошмандың 4 пулемет нөктәһен юҡ итә, снаряд ташыусы автомашинаны шартлата, үҙенең винтовкаһы менән снайперҙы атып үлтерә. Ошо батырлыҡтары өсөн 1944 йылдың 14 июлендә 46-сы уҡсы дивизияның №065/н приказы менән III дәрәжә Дан ордены менән бүләкләнә. Оҫта тоҫкаусы немецтарҙың Тарту ҡалаһындағы оборонаһын емергәндә күрһәткән батырлыҡтары өсөн дивизияның №078/н приказы менән 1944 йылдың 5 октябрендә тағын III дәрәжә Дан ордены менән наградлана. Фамилияһы Шагеев тип күрһәтелгән. Дошманға Цеханув ҡалаһы эргәһендә һөжүм иткәндә пулемет дзотын һәм 20 фашисты юҡ итә. 1945 йылдың 27 февралендә ҡыйыу һуғышсыға 2-се Удар армияның №018/н приказы менән II дәрәжә Дан ордены бирелә. Батырлыҡтары өсөн Шаһиев бөтәһе өс "Батырлыҡ өсөн" миҙалы, өс Дан ордены менән наградланған. "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән өсөнсө тапҡыр 1945 йылдың 6 майында наградлана. Ике тапҡыр яралана. Һуғыштан иҫән-һау ҡайта.

Шакиров Закир Нәби улы, 1923 йылда тыуған. Ҡыҙыл Армияла 1942 йылдың 17 мартынан, Илеш райвоенкоматы саҡырта. ПТР ротаһының взвод командиры ярҙамсыһы, өлкән сержант Шакиров 232-се уҡсы полкында хеҙмәт итә. Воронеж, I Украина, II Украина фронттарында һуғышта була. Беренсе хәрби наградаһы - "Хәрби хеҙмәттәре өсөн" миҙалы менән 1944 йылдың 12 ғинуарында бүләкләнә. 232-се уҡсы дивизияның №018/н приказы менән 31 мартта III дәрәжә Дан ордены менән наградлана. 7-9 сентябрҙә (1944 й.) автоматсылар менән бергә дошмандың тылында 1481-се бейеклек өсөн барған һуғышта күрһәткән батырлығы өсөн II дәрәжә Дан ордены менән бүләкләнә. Был 40-сы Армияның 28 октябрҙә сыҡҡан 0123/н приказы. Ошо уҡ армияның 29 октябрҙә сыҡҡан 0124/н приказы менән рота комсоргы сентябрҙәге батырлығы өсөн яңынан II дәрәжә Дан ордены менән наградлана. 1944 йылдың октябрь-ноябрь айҙарында командир булараҡ күрһәткән хеҙмәттәре өсөн 232 уҡсы дивизияның №091/н приказы менән 5 декабрҙә (1944 й.) Ҡыҙыл Йондоҙ орденын ала. Батыр яугир дүрт орден менән наградланған. 1942 йылда ике тапҡыр яраланған. Өлкән сержант Шакиров 1945 йылда демобилизацияланa. Йонно ауылында тыуған.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Исемдәре телгә алынған яугирҙарҙың бөтәһе лә Дан орденының тулы кавалерҙары булып иҫәпләнергә тейештәр, сөнки Дан ордены статусында былай тип яҙылған: орден менән эҙмә-эҙлекле - III, II һәм I дәрәжә - наградланалар. Һуғыш тамамланғас, яңынан наградлау алып барылған. Был эш, аңларға кәрәк, күбеһенсә фронтовиктарҙың үҙҙәренең ғаризаһы буйынса эшләнгән. Беҙҙең һуғыштан ҡайтҡан дүрт батырыбыҙ ҙа 1985 йылда "Бөйөк Ватан һуғышы" ордены менән наградланған фронтовиктар исемлегендә юҡ. Һуғышта алған яралары ауыр булғандыр, оҙаҡ йәшәй алмағандарҙыр, тип фараз итергә ҡала. Был сетерекле һорауҙы, бәлки, республика кимәлендә күтәрергә кәрәктер? Батырҙарҙың яҡташтары был мәсьәләне күтәреп алыр, тип уйлайым. Һуң түгелдер, әйтәйек, Учалы районы яугиры Хилажев Мәүлит Хилаж улы Рәсәй оборона министры приказы менән 1994 йылда I дәрәжә Дан ордены менән яңынан наградлана. Ә беҙ һөйләгән биш батыр ҙа тулы кавалер булырға хаҡлы. Был бурысты еренә еткереү йәштәрҙе патриот итеп тәрбиәләүҙә ҙур әһәмиәткә эйә.

Хәкимйән ФӘТТӘХОВ.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ

Сергей РУДЕНКО

БАШҠОРТТАР

Исламға тиклем булған дини йолаларҙың сағылышы

Башҡортостандың ҡайһы бер урындарында күҙәтелгән ауырыуҙы кеше һүрәтләнешенә күсереү һәм ҡорбан килтереү тәжрибәһе ҡыҙыҡ. Ҡара-ҡыпсаҡтарҙа миңә шундай дауалауҙың береһен күҙәтергә тура килде. Бағыусы тукыманан ике - ир һәм ҡатын ҡурсағын - осоҡ эшләне һәм уларҙы биҙрәгә тыҡты. Өҫтөнә бер аҙ икмәк һәм бутҡа һалды. Һуңынан тере әтәсте тотоп, уны сирле эргәһенә алып килде һәм бер нисә тапҡыр ауырыуҙы уратып йөрөттө, шул уҡ ваҡытта нимәлер уҡып өшкөрҙө һәм ауырыуҙы ҡыуҙы. Был ваҡытта бағыусыға йәш егет ярҙам итте. Һуңынан имсе әтәсте һуйып, ҡурсаҡлы биҙрәгә һалды һәм алдан әҙерләп ҡуйылған атты менеп, ауылдан өс саҡырым ситкә барып, биҙрәнең эсендәге нәмәләрҙе түгеп ҡайтты. Ауылға ул икенсе юлдан инде. Ҡайһы бер урындарҙа бындай осраҡта ҡаҙ ҙа һуйғандар.

Сирҙе шәфҡәтләндереү башҡорттарҙың мал үлгәндә ҡулланған саҡтағы йолаһында асыҡ сағыла. Мунса башында һайыҫҡан образындағы ауырыуҙы күреп, башҡорт ҡатын-ҡыҙы уны мунса инергә саҡыра, уға һыу, миндек һәм башҡа кәрәк-яраҡ әҙерләй. Сир мунсала йыуына, ә мал-тыуар ҡаҙаланмай. Бер нисә йылдан һуң малдар күпләп үлә башлағас, ауыл халҡы барыһы ла мунса яғып, сирҙе йыуынып сығырға саҡыра. Шулай итеп ауылда мал һаҡланып ҡала. Шуныһы ла иғтибарға лайыҡ: сирҙе мунсаға бер ниндәй доға уҡымай ғына саҡырырға кәрәк. Юҡһа, сир ҡуҡып, мунсаға бармауы ла ихтимал. Ул ваҡытта инде малтыуар ҡырыла.

Г. В. Йосопов тарафынан башҡорттар араһында кеше ҡуҡҡанда йәки ҡото осҡанда ҡот ҡойоу йолаһы киң таралыуы билдәләнә. Имсе үҙенең ярҙамына мохтаж кешене ултыртып, уны яулыҡ менән ҡаплаған да, баш осонда һыулы сүмес тотоп тороп, уға эретелгән ҡурғаш йәки балауыҙ ҡойған. Шул уҡ ваҡытта һамаҡлаған да.

Һыуға төшөп барлыҡҡа килгән фигура буйынса кешенең нимәнән ҡуҡҡанлығы (эттән, аттан һ.б.) асыҡланған. Ә фигура өҫтөндә ниндәйҙер ҡалҡып торған урыны йөрәк тип билдәләнгән. Был инде ҡуҡыуҙы раҫлаусы дәлил булып торған. Ҡойолған фигура ҡуҡҡан кешенең муйынына тағып ҡуйылған.

Башҡорттарҙың фекере буйынса күп ауырыуҙар - аҡыл алмашыныу, йөрәк, баш, эс ауырыуҙары, фалиж һ.б. - сихырсылар йәки ендәр ебәргән боҙом һөҙөмтәһе. Боҙомдо сығарыу өсөн ауырыуҙы "ергә һалып" дауалағандар. Төн уртаһында, кеше аяғы һил булып, бөтөн тереклек йоҡоға талғас, сихырсы сей тауыҡ йомортҡаһын алып, унда бәләкәй генә тишек эшләгән һәм уға ауырыуҙың күлдәгенән алынған ҡыҙыл еп, сирек тин, бәләкәй тимер ҡаҙаҡ, йәтсә тырнағы һалған. Ауырыуҙы ошо йомортҡа менән тирәләй йөрөп сыҡҡан һәм ендәргә мөрәжәғәт итеп: "Әпсен-төпсөн, ҡайҙан килгәнһең, шунда кит, зәхмәтеңде алып кит!" - тип һамаҡлаған. Һуңынан йомортҡаны ауырыуҙың берәй күлдәгенә төрөп, соҡорға, күлгә, сүплеккә йәки ағын һыуға ташлаған.

Мал-тыуарҙы, кешеләрҙе сир-зәхмәттән һаҡлау өсөн башҡорттар сағыр уты тапҡан һәм шуның менән мал-тыуарҙы төтәҫләгән. Ут алғанда барлыҡ ут сығанаҡтарын һүндергәндәр һәм сағыр уты алынғас, барлыҡ усаҡтарҙа һәм мейестәргә ошо ут ярҙамында ҡабат ут тоҡандырғандар.

✓ *Хөкүмәт ерҙе халыҡтан һатып ала ла, Ер банкын ойоштора - ергә банк хужа була. Банк ерҙә эшләргә теләгән кешеләрҙең мөрәжәғәттәре буйынса уларға оҙайлы ҡуртымға ер, техника, орлоҡ менән тәьмин итеү өсөн кредит бирә.*

ЕРЛЕ БУЛЫП

әллә ерҙән

Бер ваҡыт Харис Йосопов исемендәге көрәш турнирында уның уҡыусыларының береһе үҙенең остазы тураһында шундай матур фекер әйткәйне: алтын баһаһын ювелир белер. Бына әле ер мәсьәләһе буйынса һөйләшергә йыйынғас, ошо аҡылды тотоп, ерҙең ысын баһаһын белеүсе профессор, ауыл хужалығы фәндәре докторы, эшмәкәрлеге һәр саҡ ергә бәйле ғалим-агроном ғына түгел, политолог, юрист һөнәрҙәренә лә эйә Ғарифулла Хәбибулла улы ЯПАРОВҡа мөрәжәғәт иттек.

▸ Бөгөн илебеҙ иҡтисади йәһәттән генә түгел, ер мөнәсәбәттәре буйынса ла көрсөккә терәлгән кеүек. Трибуна артына сығып һүҙ һөйләүселәрҙе тыңлаһаң, улар барыһын да белә кеүек, закон сығарыусыларыбыҙ ижад иткән ҡанундар ҙа етерлек һымаҡ, әммә, ғәмәлдә, ҡасандыр башланған реформаны, Крылов мәҫәлендәгесә, ян-яҡҡа тартҡылайҙар, ә йөк һаман урынында ҡала, тигән тойғо күңелдә ныҡлап тамырлана бара. Ысынбарлыҡта был мәсьәләгә ниндәй баһа бирер инегеҙ?

- Ер - беҙҙең сәңгелдәк, беҙ шунда тыуабыҙ, шунда йәшәйбеҙ, үлгәс, кире ергә ҡайтабыҙ. Әле мәрхүм булған берәүҙе лә башҡа планетаға алып барып ерләгәндәре юҡ. Әгәр сәңгелдәгебеҙҙе үҙ ҡулдарыбыҙ менән ҡырҡһаҡ, алда нимә көтәсәген уйлауы ла ҡурҡыныс - йыһан упҡынына осасаҡбыҙ. Икенсе яҡтан, Ер - тормош, йәшәйеш нигеҙе, тәбиғи ресурстарҙың һәм етештереү сараларының иң мөһиме, иң әһәмиәтлеһе һәм иң ҡиммәтлеһе. Иҡтисади базис һәм сәйәси надстройка уға бәйле. Заманында В. Ленин: "Ер мәсьәләһе - власть мәсьәләһе", тип юҡҡа әйтмәгән. Борон-борондан ергә бәйле ихтилалдар тоҡанғанлығы хаҡында тарихтан да яҡшы беләбеҙ. Ергә милекселек проблемаһы Рәсәй тарихының барлыҡ осорҙарында ла көнүҙәк булып торған һәм тора: ул XIX-XX быуаттарҙа ла, батшалар заманында ла, генеральный секретарҙар заманында ла, Рәсәйҙең яңы тарихында ла хәл ителмәне.

Дөрөҫөн әйткәндә, ергә ҡағылышлы һорауға бөгөн дә берәү ҙә аныҡ ҡына яуап бирә алмаясаҡ. Был реформаны башлаусылар, күрәһең, ерҙең нимә икәнен дә белмәгән кешеләрҙер. Һәм улар уҡ бөгөн дә нимәлер эшләргә, нимәлер үҙгәртергә, иң аяныслыһы - нисәмә йылдар һөҙөмтә бирмәгән реформаны артабан дауам итергә тырыша, трибуна артына сығып, беҙ нимә эшләргә кәрәк икәнен беләбеҙ, тип һүҙ һөйләй. Ғәмәлдә, ер реформаһы, йәғни кешеләргә пайҙар бүлеп биреү, ваучерҙар яҙмышын ҡабатланы - кеше үҙенә яҙған өлөшөн алды ла һымаҡ, әммә уны артабан нимә эшләтергә генә белмәне. Иҫегеҙҙә булһа, ваучерҙар ҙа шундай яҙмышҡа дусар булғайны - һәр кемдең ҡулында хосусилаштырыу ҡағыҙы бар, һәр кем милексе булырға хоҡуҡлы, әммә уны нимә эшләтергә белмәй. Кемдер оҫоҙ ғына хаҡҡа һатып ебәрҙе, кемдер кейем-һалымға алыштырҙы. Бөгөн ер менән дә шундай уҡ хәл. Кеше ҡайҙалыр ере бар икәнен белә, әммә унан бер файҙа ла күрмәй. Икенсе яҡтан, әгәр ерең рәсми рәүештә һинең исемеңә күсерелмәгән икән, ул бер нисек тә һинең милкең була алмай. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда 14 294 700 гектар ер фонды иҫәпләнһә, шуның ни бары 2 252 700 гектары ғына гражданстар милкендә.

Эйе, ауылдарҙа кешеләргә пай ерҙәрен бүлеп бирҙеләр, әммә улар 100-әр гектар майҙан менән межаланды. Шул дөйөм майҙандан үҙенең ерен алыр өсөн кеше күпме аҡса түгергә тейеш? Әйтәйек, пенсионер әбей ерен теркәтер өсөн бер айлыҡ пенсияһын сығарып һалды, ти, юрист яллар өсөн икенсе айҙың аҡсаһы китә, юл сығымдарына - өсөнсө айҙыҡы. Мин оҙаҡ йылдар ер проблемаһы менән шөғөлләнеү һөҙөмтәһендә шундай фекергә килдем: бөгөн Рәсәй Хөкүмәте халыҡ алдында үҙенең хаталанығын төҙәтеп, ғәйебен танып, граждандарҙан ғәфү үтенер өсөн булһа ла, пай өлөшөнә бер хаҡ ҡуйып, уны ҡабаттан һатып алырға тейеш. Йәғни ерҙе халыҡтан һатып ала ла, Ер банкын ойоштора - ергә банк хужа була. Был осраҡта инде банк ерҙә эшләргә, килем алырға теләгән кешеләрҙең мөрәжәғәттәре буйынса уларға оҙайлы ҡуртымға ер, техника, орлоҡ, ашлама менән тәьмин итеү өсөн кредит бирә. Банкты Милли банк финанслай. Шулай уҡ Ер банкын ерҙең милексеһе итеп билдәләгән ҡанун да булырға тейеш. Ул ергә хужа, әммә уны һата алмай, бары тик оҙайлы ваҡытҡа ҡуртымға ғына бирергә хоҡуҡлы була. Беҙгә ҡабаттан нимәләр уйлап сығарырға кәрәкмәй, элек булған ыңғай өлгөнө ҡабат файҙаланырға ғына кәрәк. Әйтәйек, элек Крәҫтиәндәр банкы булған. Мәҫәлән, республикабыҙҙың иркен территорияһына төрлө милләт вәкилдәре килеп ултырып, үҙҙәренең кәсепселеген үҫтерә башлаған, кемдер ер эшенә тотонған. Уларға банк ер, кредит биреп, ерегеп китергә ярҙам иткән. Шул уҡ ваҡытта финанс учреждениеһы бөгөнгө кеүек яңы эш башлаусыны бурысҡа батырырға тырышмаған, уларға оҙайлы ваҡытҡа кредит биргән һәм ул кредитты 25 йылдан һуң ғына кире ҡайтара башлағандар. Атаһы алған кредитты балаһы түләгән, һалым күләме түбән булған йәки бер нисә йылға ул да кисектерелгән. Шул ваҡыт эсендә ер хужаһы, бөгөнгөсә әйткәндә фермер, аяғына ныҡлы баҫып, хужалығын киңәйтеп өлгөргән.

Бында шуны ла билдәләп китергә кәрәк: ерҙән бер нисә йыл эсендә генә килем алыу мөмкин түгел, уның өсөн кәм тигәндә 5-10 йыл кәрәк. Бөгөн үҙ эшен асып мал үрсетеүсе йәки ер эше менән булыусыларҙы ла фермер тип атауҙары менән килешмәйем. Сөнки сит илдәрҙә фермер тип аталыусы хужалыҡтарҙың ҙур корпорациялары, мега-фермалары, ҡеүәтле производствоһы һәм ныҡлы матди-техник базаһы бар. Ә беҙҙә биш һыйыры, 15 һарығы йәки 20 гектар ере булһын, фермер тигән булабыҙ. Хатта дәүләт тә уларға субсидия бирәм тип күҙ генә буяй. Ул субсидия күп осраҡта фермерға барып та етмәй, йәиһә шуны юллап йөрөп, ярты аҡсаһын юлға түгә. Чиновниктар бахыр фермерҙың һуңғы тинен һығып алырға әҙер. Ә фермерға ерҙе һәм кредитты Ер банкы алда әйтеп кителгән шарттарҙа биреһә, ул уның һуңғы тинен тартып алырға тырышмаясаҡ, киреһенсә, нығынып, эшләп китеүен хәстәрләйәсәк.

Ни өсөн "бахыр фермер" тиеүемде лә аңлатып китәйем: бөгөн фермер булып иҫәпләнеүселәр оло фиҙаҡәрлек күрһәтә, ҡаһармандарса эшләй, әммә үҙ-үҙҙәрен бөтөрәләр, бөтөн хәлен, сәләмәтлеген, һәр тинен ергә һалалар. Ә фермер улай эшләргә тейеш түгел. Ҡатынына затлы тун, үҙенә затлы машина, балаларының уҡыуына түләй алырлыҡ килем эшләгән фермерҙарҙы күргәнегеҙ бармы? Ундайҙар бик һирәк, күпселек килем ала алмай, хужалығын үҫтерә алмай ҡаҡшай.

Уның ҡарауы, бөгөн етәкселәр ер һатыу менән шөғөлләнә һәм затлы машиналарҙа елдерә, Өфөгә яҡын райондарҙа үҙҙәренә ер алып, өсәр ҡатлы хан һарайҙары һалдыра. Беҙ үҙебеҙҙең Архангел районы яҡташтар ойошмаһы менән махсус тикшереү үткәрҙек. Элек бәләкәй ауыл булған, хәҙер бөткән Ғәйфулла ауылы урынында кемдәр генә үҙенә дача һалманы. Шул уҡ ваҡытта ошо ауылда тыуған билдәле яҡташыбыҙ, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, йырсы Фәрүәз Камалетдинов үҙенең ике улына өй һалырға ер һорағас, район хакимиәте уның үтенесен ҡәнәғәтләндермәне. Йәғни ошо ерҙә тыуған кешегә ер юҡ, ә ҡайҙандыр килгән погонлы-погонһыҙ әҙәмдәргә - рәхим ит!

▸ Колхоз-совхоздар бөтөрөлгәс, коллектив хужалыҡтарҙа ҡушҡанды ғына эшләп өйрәнгән халыҡ, ысынлап та, пай ерҙәре менән нимә эшләргә белмәй аптырап ҡалды һәм әле лә бер аныҡ фекергә килә алмай. Шул уҡ ваҡытта республика буйынса ҡайһы бер хужалыҡтар һаҡланды бит...

- Мин үҙем банкротлыҡҡа сығарылырға тейешле хужалыҡтарҙа көрсөккә ҡаршы идарасы булып эшләгән тәжрибәмдән сығып, шуны әйтә алам: хужалыҡтарҙы бөтөрөү йәки бөтөрмәү етәкселәрҙән торҙо. Мәҫәлән, заманында Учалы районының данлыҡлы "Байрамғол" совхозы, бөтөрөлөргә тейеш булған ерҙән, уның етәксеһе, район хакимиәте башлығы һәм республика етәкселеге тарафынан һаҡлап алып ҡалынды, унда мегаферма төҙөлдө һәм ул әлегәсә эшләп килә. Икенсе миҫал: Әбйәлил районының "Красная Башкирия" хужалығы ла банкротҡа әйләнергә тейеш ине. Әммә дөйөм тырышлыҡ менән уны ла һаҡлап алып ҡалдыҡ. Бөгөн Әбйәлилдә ерҙәр яйлап Силәбе байҙары ҡулына күсеп бөтөп барғанда, "Красная Башкирия" хужалығына ҡараған ерҙәрҙең бер генә сантиметры ла һатылманы. Ул ғына ла түгел, әле лә республикала ауыл хужалығы буйынса үткән барлыҡ семинарҙар ошо базала уҙғарыла. Бының менән нимә әйтергә теләйем - ерҙә хужа булырға тейеш.

▸ Бәлки, колхоз-совхоз системаһына кире ҡайтырға кәрәктер?

- Мин үҙем быға ҡырҡа ҡаршымын. Фермер хужалыҡтары үҙҙәре кооперативтарға берләшһен, бергәләп, бер-береһенә ярҙам итеп эшләһен, һис һүҙем юҡ, әммә коллектив хужалыҡтар тураһында оноторға кәрәк. Эйе, бөгөн дә, колхоз-совхоз ойошторайыҡ, тиеүселәр бар. Ләкин уйлап ҡарағыҙ: ауылда ун кеше бергәләшеп колхоз ойошторҙо икән, ти. Артабан улар нимә эшләргә тейеш? Бөтөнһөнөң ере бергә 100 гектар булһын. Был ғына майҙан менән алға китеү мөмкин түгел. Ә инде майҙанды ҙурайтыр өсөн кемдеңдер пайын алһаң, уны эшкәртер өсөн техникаһы, ергә индерергә ашламаһы, сәсергә

Ерҙән бер нисә йыл эсендә генә килем алыу мөмкин түгел, уның өсөн кәм тигәндә 5-10 йыл кәрәк. Бөгөн үҙ эшен асып мал үрсетеүсе йәки ер эше менән булыусыларҙы ла фермер тип атауҙары менән килешмәйем. Сөнки сит илдәрҙә фермер тип аталыусы хужалыҡтарҙың ҙур корпорациялары, мега-фермалары, ҡеүәтле производствоһы һәм ныҡлы матди-техник базаһы бар. Ә беҙҙә биш һыйыры, 15 һарығы йәки 20 гектар ере булһын, фермер тигән булабыҙ. Хатта дәүләт тә уларға субсидия бирәм тип күҙ генә буяй. Ул субсидия күп осраҡта фермерға барып та етмәй, йәиһә шуны юллап йөрөп, ярты аҡсаһын юлға түгә. Чиновниктар бахыр фермерҙың һуңғы тинен һығып алырға әҙер.

ҠАЛАБЫҘМЫ, ЯҘАБЫҘМЫ?

орлоғо, яғылыҡ-майлау материалдары, уңыш алғас, уны һаҡлау урыны кәрәк. Шул уҡ ваҡытта пай ерен ҡуртымға биреүсегә лә рәхмәт әйтеп кенә ҡотолоп булмай бит. Барлыҡ сығымдарҙы һанаһаң, килем ҡалмай ҙа. Хәҙер ауылдарҙа техника ла иҫкереп, туҙып бөттө инде. Колхоз-совхоздар - беҙҙең тарих, әммә уларға кире ҡайтыу ҙур хата буласаҡ. Иң ҡулайы - әйтеп үткәнемсә, Ер банкы булдырып, ерҙе ошо банк аша уға хужа була алырлыҡ кешеләргә биреү һәм уңайлы шарттарҙа кредитлау.

▸ Ер яҡшы хужа ҡулында булғанда, республиканың ауыл хужалығы продукцияһы менән үҙен-үҙе тәьмин итер ҡеүәте бармы?

- Әгәр ил ҡулланыу өсөн ситтән индергән аҙыҡ-түлек күләме 25 процент икән, был норма тип һанала. Әммә Рәсәйҙә был күләм 60 проценттан артып китте. Был осраҡта инде күптән саң ҡағырға ваҡыт. Тотош Ер шарындағы һөрөнтө ерҙәрҙең 10 процентына эйә булған Рәсәй ни бары 1,34 процент ауыл хужалығы продукцияһы етештерә. Был хәүеф сиге тип әйтергә мөмкин. Рәсәйҙә бер кешегә 1 гектар һөрөнтө ер тура килһә, Ҡытайҙа был һан - 0,09 га. Швейцарияла бер гектар һөрөнтө ер - 16,5, Бельгияла - 12,5, Бөйөк Британияла 8 кешене "туйындыра". Заманында бөйөк ғалим Д. Менделеев, Рәсәйҙә бер гектар һөрөнтө ер ике кешене туйындыра ала, тигән. Йәғни илебеҙ үҙ халҡын туйындырып ҡына ҡалырға түгел, ә шунса уҡ күләмдә экспортҡа ла сығарырлыҡ мөмкинлеккә эйә. Әммә ул йыл һайын һөрөнтө ерҙәрен юғалта бара. Академик Абалкин үҙенең вафаты алдынан васыят рәүешендә яҙған мәҡәләһендә 1963 йылда илдә һөрөнтө ерҙәр 163 миллион гектар булған, 2000 йылда ул ни бары 85,6 миллион гектарға ҡалған, тип белдерә. Шул уҡ ваҡытта муниципаль райондар һөрөлмәгән ерҙәрҙән уңыш "ала", булмаған малдарҙан ит-һөт "етештерә". Отчеттарҙы һауанан алып яҙылған һандар менән тултыралар. Ә инде ил сит илдәрҙән аҙыҡ-түлек индереүгә дүрт триллион һум аҡса сарыф итә. Әлеге Хөкүмәт Рәйесе Д. Медведев ил башлығы булған ваҡытта әйтҡәненсә, ошо сумманың бер өлөшө чиновниктар кеҫәһенә инеп ята. Бөгөн сит ил Рәсәйгә санкциялар иғлан итеп, Европанан аҙыҡ-түлек индереү күпмелер күләмдә туҡталды, әммә ил тулыһынса Төркиәгә йөҙ борҙо һәм шул уҡ триллион доллар күп, әммә ул үҙе һәм уның ғаилә ағзалары (муниципалитеттар) ғына үҙ еренә хужа түгел. Шул уҡ ваҡытта күпселек ерҙәр бөтөнләй хужаһыҙ.

Ә донъя тәжрибәһе күрһәтеүенсә, үҙе хужа булған милексе генә үҙенең милке менән һөҙөмтәле идара итә, яҡшыраҡ эшләй һәм хеҙмәтенең һөҙөмтәләре тураһында уйлай. Унан да бигерәк, үҙ ерендә, үҙ техникаһында эшләгән һәм үҙ продукцияһын үҙе үк баҙар хаҡтары менән һата алған ауыл кешеһенең күрһәткестәре һәр саҡ яҡшыраҡ була. Бында НЭП осорон, илдең 1966-1970 йылдарҙа ауыл хужалығын үҫтереүгә йөҙ борған реформа башлауын ғына миҫал итеп килтереү ҙә етә. Биш йыл эсендә илдең килеме - 145, сәнәғәт продукцияһы - 150, ауыл хужалығы продукцияһы - 123, халыҡтың аныҡ килеме 133 процентҡа арта. Йәғни биш йыл ауыл хужалығына һалынған сығымдар илдең барлыҡ социаль-иҡтисади тормошона йоғонто яһай. Был хәҡиҡәт бөгөн дә актуаль һәм бары тик ергә хужаларса ҡараш булғанда ғына ниндәйҙер үҫешкә өмөт итергә мөмкин.

▸ Ауылдарҙың ғына түгел, республиканың артабанғы үҫеше лә ергә бәйле тип әйтергә мөмкинме?

- Мин республиканың ғына түгел, илдең үҫешен ергә булған мөнәсәбәткә бәйләр инем. Мәҫәлән, электән килгән ҡағиҙә буйынса, район йәшәһен, тиһәң, йыл һайын уның территорияһында бер мәктәп төҙөп, икенсеһен нулевой циклға сығарырға кәрәк ине. Йылына ике мәктәп төҙөгәндә генә район йәшәй. Бөгөн ауылдарҙағы мәктәптәрҙе ябабыҙ икән, тимәк, үҙебеҙ ултырған ботаҡҡа үҙебеҙ балта сабабыҙ.

Икенсе яҡтан, ғүмер буйы ерҙә эшләп өйрәнгән кешеләргә колхоз-совхоздар тарҡалып, эшһеҙ тороп ҡалыу үлемгә тиң булды. Ул ғына ла түгел, кеше сараһыҙлыҡтан үҙ-үҙенә ҡул һала. Етәкселәр өсөн бер кешенең үҙенә ҡул һалыуы оло фажиғә булырға тейеш, әммә быға берәүҙең дә иҫе китмәй. Тимәк, ерһеҙ ҡалыуҙың кешенең күңел торошона йоғонтоһон да иҫәпкә алырға кәрәк.

Бындай мөнәсәбәт халыҡтың сәләмәтлегендә лә сағыла. Хеҙмәткә яраҡлы йәштәр, эш эҙләп, Себер тарафтарына юллана. Улар ғаиләһен ҡарау өсөн һаулығын ҡорбан итеп, сит-ят ерҙә тир түгергә мәжбүр. Ә бит ошо типһә тимер өҙөр ир-аттарыбыҙҙы үҙебеҙҙә лә эшләтергә мөмкин. Мәҫәлән, Баймаҡ, Хәйбулла яҡтарында улар рәхәтләнеп йылҡысылыҡ менән шөғөлләнә алыр ине. Әммә бының өсөн кешенең 10 ғына түгел, 100-200, унан да күберәк гектар ере булырға тейеш. Бөгөн ул ошо тиклем ерҙе үҙе алып, уның һалымын түләй, йылҡысылыҡ фермаларын төҙөү, малдарына бесән әҙерләү өсөн техника ала аламы? Юҡ, әлбиттә. Бында Хөкүмәт яғынан ярҙам булырға тейеш. Йәки бына Бөрйән районын алайыҡ. Унда ата-бабаларыбыҙҙың боронғо кәсебе - солоҡсолоҡто үҫтерергә мөмкин. Әйҙә, теләге булған һәм солоҡсолоҡ эшен белгән егеттәргә 100 гектар урманды ҡуртымға бир ҙә, ярҙам ит. Ул нығынһа, бюджет та тулыланыр. Юҡ, был бары тик хыял ғына, сөнки тотош Бөрйәндә бындай территория табылмаясаҡ - ундағы ерҙәрҙең күпселеге ҡурсаулыҡ зонаһы, йәғни федераль милектә. Ә бит, уйлап ҡараһаң, солоҡсолоҡ менән шөғөлләнеүсе ул урманда ут яғып, йәки байрам ойошторып йөрөмәй, бал ҡорттары ла яландарҙы тапап, ағастарға зыян килтермәй. Йәиһә Учалы, Баймаҡ райондарында һарыҡ үрсетеүҙе ҡабат тергеҙеп булмаймы ни? Беҙгә һәр райондың үҙенең үҙенсәлеген, атай-олатайҙарҙың боронғо кәсепселеген иҫәпкә алып, ошо эштәрҙе ҡабаттан башларға ғына кәрәк. Быны хәл итергә мөмкин, ләкин эш тағы ла шул ер мәсьәләһенә һәм хөкүмәт яғынан ярҙамға барып төртөлә.

▸ Бөгөн, "ерҙән яҙмайыҡ, ерҙәрҙе шәхси милеккә әйләндереп ҡалайыҡ", тип саҡырыу ташлайбыҙ, саң ҡағабыҙ, әммә шул уҡ ваҡытта ергә һалымды кадастр хаҡы буйынса түләй башлағас, был тағы ла ауыл халҡының барлы-юҡлы аҡсаһын бер файҙа килтермәгән ер өсөн талап алыу булмаймы? Эйе, ере бар, килеме юҡ, өҫтәүенә, шуның өсөн ул һалымын түләргә тейеш...

- Ысынбарлыҡта, бөгөн ауылдарҙа күпселекте пенсионерҙар тәшкил итә. Бындай күренеш Башҡортостан өсөн генә хас түгел, Рәсәй ауылдарының өҫтән бер өлөшө үлеп бөтөп бара. Мәҫәлән, Волга буйы федераль округында Удмуртия яғынан Киров өлкәһенә ингәндә юл буйында тиҫтәләрсә буш ауыл осрай. Уларҙа өйҙәрҙең тәҙрәләре һуғыш ваҡытындағы кеүек таҡта менән арҡыры ҡағылған. Ауылда йән эйәһе юҡ. Булғандарында ла тик яңғыҙ ҡатын-ҡыҙ. Магазин, клуб, мәктәп, фельдшер пункты тураһында әйтеп тә тораһы түгел. Башҡа төбәктәрҙә лә шундай хәлдәр күҙәтелә. Был - Рәсәйҙең тап уртаһында. Иң ҡурҡынысы - тирә-яҡта ҡарағура баҫҡан яландар буш ята, уларҙы урман ҡаплап бара. Шул уҡ ваҡытта муниципаль берәмектәр, ауыл биләмәләре үҙ проблемалары менән япа-яңғыҙ ҡалды. Ил буйынса муниципаль бюджеттар ни бары 40 процентҡа ғына тулылана, һөҙөмтәлә улар барыһы ла дотациялыға әйләнә бара. Әгәр ауылдарҙа кеше ҡалмай, улар үҙ ерҙәрен милек итеп теркәмәй икән, ер һалымын кем түләргә тейеш? Хатта ерен үҙ милкенә күсереүселәр ҙә күпмелер ваҡыттан һуң унан баш тарта башлаясаҡ. Шуға күрә беҙгә тиҙ арала яңы ҡанундар ҡабул итеп, Ер банкы ойоштороп, ерҙәрҙе халыҡтан кире һатып алырға һәм уны үҙен хужа итеп тойған кешеләргә бирергә кәрәк. Ә инде инвесторҙар - улар бары тик үҙ кеҫәһен ҡайғыртыусылар ғына. Улар иң уңдырышлы ерҙәрҙе ҡуртымға алып, бер нисә йыл уның елеген һурасаҡ та, һуңынан ташлап китәсәк. Бөгөн, белгестәр әйтеүенсә, республикала ер өҫтөнән 4-6 сантиметр күләмендәге гумус ҡатламы юҡҡа сыҡҡан. Ә бер сантиметр гумус ҡатламын барлыҡҡа килтереү өсөн тәбиғәткә 100-150 йыл кәрәк. Шуға күрә, ерҙе унда үҙен хужа тип тойған, ерҙе тәрбиәләй аласағына ышанған кешеләргә генә биреү зарур. Шул ваҡытта ғына ерҙәрҙе һаҡлап ҡала аласаҡбыҙ. Кире осраҡта инде, ергә ашлама индереп, туҡландырып тормайынса, ҡалған ғына ҡеүәтен һурып, майын һығып бөтөрһәк, Рәсәйҙең уртаһында таҡыр яландар ғына тороп ҡаласаҡ.

Хатта ерен үҙ милкенә күсереүселәр ҙә күпмелер ваҡыттан һуң унан баш тарта башлаясаҡ. Шуға күрә беҙгә тиҙ арала яңы ҡанундар ҡабул итеп, Ер банкы ойоштороп, ерҙәрҙе халыҡтан кире һатып алырға һәм уны үҙен хужа итеп тойған кешеләргә бирергә кәрәк. Ә инде инвесторҙар - улар бары тик үҙ кеҫәһен ҡайғыртыусылар ғына. Улар иң уңдырышлы ерҙәрҙе ҡуртымға бир ҙә, ярҙам ит. Ул нығынһа, бюджет та тулыланыр. Юҡ, был бары тик хыял ғына, сөнки тотош Бөрйәндә бындай территория табылмаясаҡ - ундағы ерҙәрҙең күпселеге ҡурсаулыҡ зонаһы, йәғни федераль милектә. Ә бит, уйлап ҡараһаң, солоҡсолоҡ менән шөғөлләнеүсе ул урманда ут яғып, йәки байрам ойошторып йөрөмәй, бал ҡорттары ла яландарҙы тапап, ағастарға зыян килтермәй. Йәиһә Учалы, Баймаҡ райондарында һарыҡ үрсетеүҙе ҡабат тергеҙеп булмаймы ни? Беҙгә һәр райондың үҙенең үҙенсәлеген, атай-олатайҙарҙың боронғо кәсепселеген иҫәпкә алып, ошо эштәрҙе ҡабаттан башларға ғына кәрәк. Быны хәл итергә мөмкин, ләкин эш тағы ла шул ер мәсьәләһенә һәм хөкүмәт яғынан ярҙамға барып төртөлә.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Шекспирҙың Гамлеты баш ватҡан кеүек, бөгөн "Ерле булып ҡалабыҙмы, әллә ерҙән яҙабыҙмы?" тигән һорау күптәргә тынғы бирмәй. Шул уҡ ваҡытта, берәү ҙә был мәсьәләне нисек хәл итеү юлдарын аныҡ ҡына белмәй. Бәлки, бөгөнгө әңгәмәсебеҙҙең фекерҙәре менән танышҡандан һуң, гәзитебеҙҙе уҡыусылар үҙҙәренең уй-ниәттәре менән уртаҡлашып, дөйөм бер йәмәғәтселек фекере тыуҙырыуға өлгәшербеҙ. Һеҙҙән хаттар көтәбеҙ.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.

✓ Хәҙер ҡайҙа барырға, тигән уй Рәшиттең башында әйләнде лә әйләнде. Билдәле, илгә ҡайтыуына уны үлем язаһы көтә, туғандарының яҙмышы ла Рәшиттә уғата ныҡ борсоно.

Уйының ошо урынына еткәс, Рәшит бабай һуғыш яланында ятып ҡалған миллионлаған совет кешеләрен иҫләне. Фәйзулла ағаһының да фронтта һәләк булыуы хаҡында әле генә Камилдың хаты аша белгәйне бит. Ағаһы өсөн, атаһыҙ ҡалған балалар, улһыҙ ҡалған әсәләр, ирһеҙ ҡалған ҡатындар, үҙе һымаҡ аяныс яҙмышлы әсирҙәр өсөн ана шул ҡәбәхәт Оттоно дөмөктөрөп булһа ла барыбер үсен алған икән Рәшит...

Һуңғы ваҡытта өй хеҙмәтсеһе йәш ҡыҙ Ванда уңайы тура килгән һайын серле итеп йылмая торған булып китте. Төҫкә-буйға матур ғына булған зәңгәр күҙле, һары сәсле нимес ҡыҙы егет алдында буй-һындарын бик сәйер итеп уйнаҡлатып, юҡҡа-барға хихылдап көлә. Уға ҡарай ҙа, сәстәрен икегә ярып, матур итеп тарап үргән, ҡарлуғас ҡанаттары кеүек ҡыйылып торған ҡашлы, бешкән муйылдай сөм ҡара күҙле, ир-егеттәргә күтәрелеп тә ҡарарға оялған Мәрхиә еңгәһе һымаҡ серле башҡорт ҡыҙҙарын иҫләй Рәшит. Беҙҙәге кеүек һылыу ҡыҙҙар бөтә Ер шарында ла юҡтыр, тип уйлай. Ә Ванданың ҡыйҡаңлауын бер ҙә оҡшатып етмәне. Уның ҡарауы, шул ҡыҙҙай уҡ зәңгәр күҙле, аҡ сәсле Митя уға йоторҙай булып текәлә ине.

Көҙ, ҡыш айҙары бында, Башҡортостандан айырмалы, әллә ни һыуыҡ түгел икән. Декабрь башы булыуға ҡарамаҫтан, ергә ҡар ятмаған. Брест урамдарындағы ҡала йәштәре кеүек салбар, ботинка, бушлат кейеп йөрөгән Рәшит һәм башҡа әсирҙәр быйылғы ҡышты Германия ерендә ҡаршы алды. Әкренләп немец телен аңлай башлаған зирәк егет бер мәл урамда ниҙер булаштырып йөрөгәндә радионан "Дойчен зольдатен", "Москоу", тигән һүҙҙәрҙе ишетеп, ни һөйләгәндәренә яҡшылап төшөнөп етмәһә лә, һағайып ҡалды. Ул арала тышҡа килеп сыҡҡан "байбисә" егеткә:

- Ишетәһеңме, Рашет, Москоу капут, - тине. Ул насар һүҙҙәрҙең мәғәнәһен егет аңланы. Ысынлап та шул һүҙҙәр дөрөҫмө, әллә уның кеүек әсирҙәр өсөн махсус тапшырыумы икән? Хәйер, Германия төпкөлөндә ятып нимә генә беләһең инде...

* * *

Рәшиттең бында килеп эләккәненә бер йыл да үтеп китте. Шул арала немец телен аңлау ғына түгел, яҡшы итеп һөйләшә лә башланы. Күберәге уны Ванда һөйләндерә.

Бер көн Рәшит Мөхәммәтйән ҡоҙаһынан отоп алған герман һуғышы бәйетен үҙ алдына һамаҡлап, урам тышында ниҙер эшләп йөрөй ине. Уны ишетеп ҡалған ҡыҙ күҙен-башын уйнаҡлатып, тағы егет янына килде.

- Рашет, нәмә йырлайһың һин беҙҙең Германия тураһында? - тине ул шаян йылмайып.

Тыуған яғын, туғандарын һағынып, уйланып, ғәҙәттәгенән тыш ҡысҡырыбыраҡ йырлай башлаған Рәшит һиҫкәнеп китте:

- Нимә? - тине ул нимессәләп.

- Йырыңдың көйө бик моңло, ләкин ҡайғылы. Һүҙҙәрең араһында "Герман" һүҙен генә аңлап ҡалдым. Йырың нимә тураһында?

- Был йыр - фатерланд тураһында, - тине егет. - Белəһеңме, Ванда, нимә ул - фатерланд?

Ҡыҙҙың йөҙө бер аҙ етдиләнде:

- Беләм, фатерланд - ул Германия.

- Юҡ, Ванда, фатерланд - ул Ватан. Ул - Германия ғына түгел. Һәр кемдең үҙенең Ватаны була. Минең Ватаным - Башҡортостан, ә Митяныҡы - Белоруссия.

- Һеҙ икегеҙ ҙә Россиянан бит, ә Башкур... - ҡыҙ әйтә алманы, теле көрмәлде, - ишеткәнем юҡ.

- Ә Уралды ишеткәнең бармы?

Бөйөк Ватан һуғышының тәүге көнөндә хәбәрһеҙ юғалған меңәрләгән ҡорбандарҙың береһе - ҡыҙылармеец Һөйөндөков Заһитулла ағайымдың яҡты иҫтәлегенә бағышлайым.

- Оураль, эйе, ишеткәнем бар, - тине ҡыҙ. - Һөйлә әле, Рашет, Оураль тураһында.

-Беләһеңме, Ванда, - тине Рәшит, таш ҡойма ситендәге эскәмйәгә барып ултырҙы, - Урал - ана шул Башҡортостан инде, Ер шарының иң гүзәл урыны, ихһеҙ-сикһеҙ урмандар, оҫоҙ-ҡырыйһыҙ далалар, көтөү-көтөү малдар, иң мөһиме - бик яҡшы күңелле ябай кешеләр...

- Гуд, гуд, - тип сәпәкәйләне ҡыҙ балаларса ҡыуанып. - Ә һин шунда ла "Герман" тип йырлайһың. Тағы берҙе йырлап күрһәт әле.

Рәшит тартынып торманы, һағышлы көйгә һалып, йырлап ебәрҙе.

Мендем турат биленә,
Киттем Герман иленә.
Герман ере - ҡара үлән,
Әллә ҡайта, әллә үлəм…

- Был йырҙы мең туғыҙ йөҙ ун дүртенсе йылда рус-герман һуғышында ҡатнашҡан башҡорт һалдаттары сығарып йырлаған, - тине Рәшит. - Ситтә оҙаҡ йөрөп, илеңде һағынып зар-интизар булмай тороп, уның ни тиклем ҡәҙерле икәне һиҙелмәй ҙә икән ул...

Плендан ҡасып сығыу тураһындағы уй Рәшиттә барыбер бөтөнләйгә һүрелеп бөтмәне. Сит ерҙәрҙә ятып ҡалғансы, үҙ иленә ҡайтып үлеү барыбер яҡшыраҡ булып тойолдо уға. Ләкин Германияның көнбайыш өлөшөндә урынлашҡан был ауылдан нисек һәм ҡайһы яҡҡа ҡасаһың. Етмәһә, немецтар Волгаға барып еткәндәр имеш, тип һөйләйҙәр...

* * *

Көндөрҙән бер көндө Барбара Көнсығыш фронтынан ҡайғылы хәбәр алды. Уның берҙән-бер улы урыҫтар менән һуғышта һәләк булған икән. Шул көндән алып ҡара күлдәк кейеп, башына ҡара косынка ябынып тергән Вандаға эйәреп килеп, Барбара ошо йылға ярында эске күлдәккә ҡәҙәре сисенеп, ҡыҙынырға рата. Ҡояшта бер талай ҡыҙынғандан һуң, кинәнеп, йылғала арығансы йөҙә лә ашыҡмай ғына өйөнә ҡайтып китә ине. Бер көндө, сираттағы төшкө ашты ашап алғас, малдарын йәйрәтеп ебәрҙе лә, Рәшит "ах" та "ух" килеп йөҙгән байбисәне ҡыҙыҡһынып күҙәтә башланы. Был юлы ғәҙәттәгенән оҙағыраҡ йөҙҙө хужабикә. Бер мәл, йылға уртаһында йөҙөп йөрөгән Барбара кинәт кенә сәсәй башланы. Ҡулдарын болғап, ярҙамға килегеҙ, тигән ишаралар яһап ҡысҡыра ла, шул ыңғайы башы һыуға күмелә, йәнә килеп сыға... Рәшит күп уйлап торманы, ботинкаларын ғына һалып ташланы ла һыуға сумды. Һаҡмар һыуында балыҡ һымаҡ йөҙөп өйрәнгән егеткә ябыҡ кәүҙәле Барбараны һөйрәп сығарыу бигүк ауыр булманы. Ҡатын апаруҡ һыу йотоп өлгөргәйне. Яр башында ятып, бер аҙ хәл алғандан һуң, Рәшиткә хәлһеҙ генә йылмайып:

- Данке шөөн, - тине. Шул ваҡиғанан һуң "байбисә"нең әсирҙәргә ҡарашы ҡабаттан йылынды...

* * *

Ҡырҡ дүртенсе йылдың баштарында ҙур ғына был ауылдың ун биш-ун алты йәшлек малайҙарын да, алтмыш йәштәге оло кешеләрен дә армияға алып, фронтҡа оҙата башланылар. "Һалдаттары етешмәй", тип фараз итте Рәшит үҙ алдына.

Тағы күпмелер ваҡыттан, Совет ғәскәрҙәре Европа илдәрен азат итә-итә Германия еренә лә яҡынлашып киләләр икән, тигән имеш-мимештәр йөрөй башланы әсирҙәр араһында. Тиҙҙән беҙҙәкеләр килеп, немецтарҙы ҡыйратып, бөтә хәрби әсирҙәрҙе азат итерҙәр һымаҡ тойола ине. Тик, әлегә, улар - һаман да әсирҙәр, һаман да "Бөйөк Германия армияһын" аҙыҡ менән тәьмин итеүҙә ҡатнашалар. Үҙенә оҡшамағандарҙы Оттоноң урынында ҡалған комендант һаман да гестапоға оҙата... Ул бахыр әсирҙәрҙең артабанғы яҙмышы - үлем лагерҙары, тиҙәр. Был турала Рәшиткә рус телен ярайһы уҡ яҡшы белгән, элек мәктәптә уҡытыусы булып эшләгән француз әсире һөйләне. "Ана шул концлагерҙар фашистарҙың бөтә донъя халыҡтары өсөн төҙөгән фани донъя тамуҡтары ул", - тине француз. Айырыуса йәһүд милләтен күрә алмағандарын әйтте. Башҡа халыҡтарҙы үҙҙәренә ҡол итеп, ә йәһүдтәрҙе Ер йөҙөнән юҡ итеү маҡсатын Гитлер үҙенең фашистарына һеңдергән, имеш. Бөтөнләй бар милләт кешеләрен бөтөрөргә... Аллаһы ләғнәте генә төшһөн инде был Гитлерға. Үҙенең концлагерға эләкмәгәненә Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итеп йөрөнө Рәшит. Донъялағы иң бәхетһеҙ кеше түгел икән шулай ҙа.

Һуңғы ваҡытта ашау яғын ҡыҫа башланылар. Эш тә икеләтә ауырайҙы, сөнки Митяны Барбара әбей ҡайҙалыр икенсе фермаға һатып ебәрҙе. Күптән түгел "сәскә атҡан" Германияға ла бөлгөнлөк килеп еткәне бик һиҙелә ине. Көнбайышҡа табан ауыл эргәһенән өҙлөкһөҙ тигәндәй немец колонналары үтә башланы. Америка ғәскәрҙәре, ахырҙа, икенсе фронт асҡан икән, тигән хәбәр ҙә килеп ишетелде. Әммә фашистар үҙ өйө өсөн айырыуса ҡаты һуғышалар, ахыры, әсирҙәрҙе азат итеүселәр әле булһа күренмәне. Ниһайәт, ҡырҡ бишенсе йыл да килеп етте. Инде дүртенсе йыл ул әсирлектә...

* * *

Көнө-төнө барған атыштарҙан өй мөгәрәбендә Барбара, Ванда менән бергә йәшеренеп ултырҙы Рәшит. Бер ни тиклем ваҡыттан, тирә-яҡта гөрһөлдәүҙәр тынғас, урамға сығып ҡарарға булды. Урам һары йондоҙло танкылар, башҡа ҡорамалдар һәм ят формалағы һалдаттар менән тулы ине. Һалдаттар араһында ғүмерендә тәүге тапҡыр ҡара тәнлеләрен дә күреп, "американдар" икәненә төшөндө.

Әсирҙәрҙең һәр береһе менән һөйләшкәндән һуң, уларҙы һуғыш бөткәс тә үҙ илдәренә тараташаҡтарын әйттеләр. Тыуған иленә ҡайтыу мөмкинлеге алыу - әсир өсөн ниндәй ҙур бәхет! Ахырҙа, Рәшит тыуып үҫкән яғына - Башҡортостанына ҡайтып китәсәк! Тиҙҙән үҙенең яҡын туғандарын күрәсәк... Шундай татлы хыялдарға бирелеп, егет әсирҙәр өсөн бүленгән айырым йортта йоҡоға талды.

Төнө буйы һаташып сыҡты ул. Төшөндә әлеге атаһын алып киткән, яғаларында сөм-күк петлицалы ҡупшы кейемле НКВДсы кескәй Камилды аяғынан аҫып ҡуйған да, Талха ағаһын ҡанға туҙҙырғансы туҡмаған. Әленән-әле ағаһының хәлһеҙләнгән тәненә йылтыр итектәре менән тибә лә тибә, ә үҙе һөйләнә: "Хыянатсы туғаныңдың язаһын һин һәм һинең улың алырға тейеш..." Шыбыр тиргә батып уянды Рәшит. Ниндәй хәтәр төш! Юҡ, уның герман пленында йөрөгәнен бер кем дә белергә тейеш түгел. Ысынлап та туғандарына зыян тейеп ҡуйыуы бар. Аллаһ һаҡлаһын! Ҡулға алынған "халыҡ дошманы" - аталары өсөн үҙҙәре ҡыйырһытылған саҡтар иҫенә төштө. Хәҙер сүп өҫтөнә сүмәлә, тигәндәй, шул "халыҡ дошманы"ның улы, өҫтәүенә - "хыянатсы"! Рәшиттең башы буталды. Ни эшләргә? Хәҙер ул бөтөнләйгә үҙе тураһында түгел, ә фәкәт туғандары өсөн ҡайғыра ине.

Тиҙҙән Германия армияһы бөтөнләйгә ҡорал һалған, тигән хәбәр ишетелде. Башта мәңге еңелмәҫлек булып күренгән көслө армияның тар-мар ителеүенә һөйөнгән әсирҙәр менән бергә Рәшит тә шатланды. Тик уларҙың торған ере - американдар зонаһына тап килде. Яҡшығамы был, насарғамы? Хәҙер ҡайҙа барырға, тигән уй Рәшиттең башында әйләнде лә әйләнде. Билдәле, илгә ҡайтыуына уны үлем язаһы көтә, туғандарының яҙмышы ла Рәшиттә уғата ныҡ борсоно. Егеттең башына бик насар бер уй килде: әгәр ҙә был донъя менән үҙ иркең менән хушлашҡанда? Уның берҙән-бер дөрөҫ юлы шул түгелме?

Оҫоҙ-ҡырыйһыҙ уйҙарының ошо еренә килеп еткәс, Рәшит бабай ҡапыл тертләп китте. "Әстәғәфируллаһ", тип өс мәртәбә әйтеп ҡуйҙы. Аллаһ һаҡлаһын, нисек ундай уй башына килде икән? Бала саҡтан дини тәрбиә алып үҫкән Рәшиттең дә шундай сиккә етер сағы булдымы? Хәйер, заманаһы шулай булғандыр инде. Ана шул яҙыҡ юлдан үҙен-үҙе нисек ҡурсалап алғанын көскә хәтерләй алды. Ислам дине ҡанундары буйынса, киләһе баҡый донъяға үҙен ғүмер буйы әҙерләргә тейеш булған Рәшит, Ер йөҙөндәге башҡа бөтә йән эйәләре кеүек, яҡты донъяны, йәшәүҙе бик ярата ине шул. Тормош нисек кенә ауыр булһа ла. Икенсенән, үҙ-үҙенә ҡул һалған кеше өсөн Аллаһы Тәғәләнең язаһы бигерәк ҡаты, тиҙәр. "Сабырлыҡ кәрәк, Рәшит, сабыр бул", тип үҙен-үҙе йыуатты. Башҡа әсирҙәргә күрһәтмәй генә, төндәрен ҡаза ҡылып булһа ла, барлыҡ фарыз намаҙҙарын ҡалдырмайынса уҡып йөрөгән мосолман һәр ваҡыт сираттағы намаҙын уҡып бөткәс "Йә, Раббым, сабырлыҡ бир", тип доға ҡылыр булды. Бәлки, Аллаһы Тәғәлә насип әйләгән булһа, берәй ҡасан икһеҙ-сикһеҙ далалары, бай тәбиғәтле урмандары, эскерһеҙ ябай халҡы йәшәгән Тыуған иленә - Башҡортостанына ҡайтып та килер...

(Дауамы бар).

✓ *Был тәңгәлдә мәктәп программаларындағы әҙәби дәреслектәрҙең, хрестоматияларҙың популярлығы самалы, уларҙың йөкмәткеһе идея-эстетик концепцияһы тапалған проза менән тултырылыуы бәкәлгә һуға, буғай.*

ЯҘЫУСЫ ТРИБУНАҺЫ

АҪЫЛТАШҠА ӘЙЛӘНҺЕН ӨСӨН...

мәғдәнде лә шымартырға кәрәк

Мәғлүм ки, проза жанры әҙәбиәттең күләмле һәм уҡымлы жанрҙарынан һанала. Башҡорт прозаһы, асылда, һуңғы бер быуат дауамында формалашты, дәүер аҙымдары менән үрҙәргә артылды, халыҡтың милли үҙаңын, нәфис һәм тарихи фекерләүен үҫтереүгә тос өлөш индерҙе һәм индереүҙе дауам итә. Илдә идеологик ҡараштар үҙгәреп, кәрәк-кәрәкмәгән ижтимағи-сәйәси реформалар үткәреп тороуға ҡарамаҫтан, Ғәйнан Хәйри, Авзал Таһиров, Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәб Биишева, Янибай Хамматов (бынан утыҙ йыл элек һуңғы ике автор әҫәрҙәре иң күп уҡылғандар иҫәбендә ине), Динис Исламов, Ғәли Ибраһимов, Шакир Янбаев, Рәшит Солтангәрәев, Динис Бүләков ише мәшһүр, йәғни патриот ҡәләмгирҙәр традициялары бөгөн нисек дауам ителә? Был һорауға өҙөп кенә яуап биреүе ярайһы уҡ ауыр.

Һуңғы ете-һигеҙ йыл эсендә Яҙыусылар берлегенең проза һәм публицистика секцияһы йәмғеһе ун туғыҙ ултырыш, ике семинар үткәрҙе. Әлбиттә, сағыштырмаса йәш авторҙарҙың ҡулъяҙмаларын анализлағанда әҙәби оҫталыҡ, йәғни новаторлыҡ, авторҙарҙың теоретик әҙерлеге, тел-стиль үҙенсәлектәре h.б. мәсьәләләргә лә иғтибар бирергә тырышабыҙ. Тиҫтәгә яҡын прозаик Яҙыусылар берлегенә ҡабул ителде, бер нисәһенә ағзалыҡҡа юллама әҙер, тағы әҙерләнәсәк.

Әлеге сығышымды нигеҙҙә йәшерәк ҡәләмдәштәргә арнарға иҫәбем. Әһәмиәтле ижад емештәрен, йәғни өмөтлө ҡәләм оҫталарын әҙләүҙе күҙ уңында тотһаҡ, иң тәүҙә Раят Вәлиев, Айгиз Баймөхәмәтов, Рәзилә Рыҫҡужина, Рәйлә Сабитова, Мәүлиҙә Әхмәтйәнова, Рәмилә Торомтаева, Әлнисә Кәримова, Сабит Фазлыев, Тәскирә Даянова, Сәлиә Ғатауллина, Сәлмән Яҡупов, Мансур Һиҙиәтов h.б. тиҫтәләгән исем-шәрифте телгә алыу фарыз. Ләниза Шакированың "Һөрәндәк" исемле хикәйәләр йыйынтығы Белорет район-ҡала хакимиәтенең, агроном Иҙрис Ноғомановтың "Һаҡмарбаш" романы Әбйәлил районының әҙәби премияһы менән бүләкләнһә, Стәрлетамаҡта йәшәүсе инженер-төҙөүсе Ишғәли Нуриәхмәтовтың "Ҡарабаш турғайы" яҙмышнамәһе массовой уҡыусы баһаһын яуланы.

Айгиз Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы хаҡында матбуғатта хуплау һүҙе күп әйтелде, етемдәр проблемаһын социаль-психологик юҫыҡта экспрессив яҡтыртҡан ыҡсым китабы, уҡыусылар аудиторияһының үтенесе буйынса, ҡабат нәшер ителде һәм йылдам таралды. Яңыраҡ ул рус теләндә лә сыҡты, әҫәр менән киностудиялар ҡыҙыҡһына башлағаны мәғлүм. Заманына күрә һөйөнөслө күренеш был.

Йәш әҙибә Рәйлә Сабитова (Ғафури районы) "Артыҡбикә" повесть-монологы менән сәсмәүер жанрында яңысараҡ художество биҙәктәре, урбанизация шауҡымы өҫтәргә һәләтле икәнен раҫлаһа, донъяны апаруҡ гиҙгән-күргән Мәүлиҙә Әхмәтйәнова (Мәсетле районы) ла үҙенсәлекле фәлсәфә һәм яңғырашлы лексика менән ижад итә. Авторҙың тематик диапазоны ярайһы киң, уға ҡоласлыраҡ әҫәрҙәргә тотонорға ваҡыттыр: көсө лә, илһамы ла, һәләте лә мулҡып тора. Әҙәби төрҙәрҙең һәр береһендә (лирика, проза, драматургия) егәрле эшләүсе, өҫтәүенә, музыкант һәм рәссам Сәлмән Яҡупов, бер йәшлектә, бер ҡартлыҡта, тигәндәй, камил хикәйәләр тупланмаһы менән үҙенең ижади көсөн раҫланы.

Быға тиклем әҙәби мөхиттә исеме артыҡ танылмаған тарих уҡытыусыһы (әйткәндәй, Сибай филиалын тамамлаған) Сабит Фазлыевтың (Ейәнсура районы) "Ҡара этап" тигән роман-хроникаһы ун ике йыл дауамында яҙылған. Әҫәрҙе (мең битлек) тикшереүҙә тиҫтәнән ашыу яҙыусы ҡатнашты, байтаҡ конструктив кәңәштәр бирелде, бигерәк тә композиция, тел-стиль, геройҙар теҙмәһе йәһәтенән кәңәштәр күп яуҙы. Былтыр "Ағиҙел" журналы уҡыусыларыбыҙға был күләмле әҫәрҙең күп кенә өлөшөн тәҡдим итте. Беҙҙең ҡарамаҡҡа, совет дәүләтенең НЭП осоронан һуң репрессив алымдар менән колхозлаштырыу, артабан сәнәғәтте нығытыу сәйәсәте, фронт һәм тыл берҙәмлеге, Себерҙәге ҡот осҡос лагерь шарттарында ла яҡташтарыбыҙҙың патриотлығы, эшһөйәрлеге, тормоштан төңөлмәүе, кешене кәмһеткес режим хаҡындағы уйландырғыс, хатта ки тетрәндергес әҫәр буйынса һүҙҙе оҙаҡ сурытырға була. Тик шуныһы: романдың үҙен мотлаҡ уҡыу кәрәк, өҫтәүенә, документаллеккә ҡоролған "Ҡара этап"та күп кенә замандаштарыбыҙ үҙҙәренең ауылы, йә районы, шулай уҡ нәҫел-нәсәптәре хаҡында мәғлүмәттәргә юлығыуы бик тә ихтимал. Авторҙы, урыҫса әйтмешләй, самородок тип тә атағы килә. Әммә аҫылташҡа әйләнһен өсөн мәғдәнде лә юнырға, шымартырға кәрәк. Былтыр Ейәнсура районының Үтәғол ауылында роман геройҙары менән шатлыҡ хистәренә һәм күҙ йәштәренә тулы кисә уҙғарҙыҡ; иң мөһиме, әҫәрҙең китап рәүешендә баҫылыуын күмәк халыҡ һораны. Әҙәби мөхиттә һирәк була торған хәл бит был!

Өс йыл элек Балтас райүҙәгендә башҡорт һәм татар телле берлектәге секцияларҙың күсмә ултырышын практик ижад процесы рәүешендә үткәргәйнек, хәҙер ошо ғәмәли эштең һөҙөмтәһе күренә: Яңауыл төбәгенең йәш авторҙары ярайһы уңыш менән ваҡытлы матбуғатта сығыш яһай башланы. Ҡаҙан ҡалаһында үткән семинарҙа ла нәҡ беҙҙең яҙыусылар һынатманы, күршеләрҙең йәш ижадсыларына фәһемле кәңәштәр бирелде. Башҡорт һәм татар прозаһы туғанлыҡ сериялдарында сыҡҡан баҫмалар иҫәбенә байыны. Төркиә илендә лә китаптарыбыҙ донъя күрә, шөкөр. Бындай эш алымдарын киләсәктә лә ҡулланыу мөмкин, тимәксемен.

Һуңғы осорҙа халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусин, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары Таңсулпан Ғарипова, Ғәлим Хисамов, Рәсәй Әҙәби премияһы лауреаты Әмир Әминев, әҙәбиәт һөйөүселәргә күптән таныш Гөлнур Яҡупова, Мәүлит Ямалетдин, Мирас Иҙелбаев, Хәйҙәр Тапаҡов, Рәлис Уразғолов, Флүр Ғәлимов, Спартак Ильясов яңы китаптары, Нияз Алсынбаев, Гөлсирә Ғиззәтуллина, Зөлфирә Ҡаҙаҡбаева, Лира Яҡшыбаева h.б. дәүләт заказы һәм үҙнәшер баҫмалары менән һөйөндөрҙө, үрҙә һаналған китаптарҙың байтағы маҡтаулы наградаларға лайыҡ булды. Публицистика өлкәһендә әллә ни балҡыш һиҙелмәгән кеүек, шулай ҙа Баныу Ҡаһарманова, Илдар Аҡъюлов, Нурия Килмөхәмәтоваларҙың ҡулъяҙмаларын ыңғай баһаланыҡ. Яҡын арала тағы ике авторҙың ҡулъяҙмаһын тикшереү ойоштороласаҡ.

Ҡыҫҡаһы, һандар ҙа һәлмәк, сифат та арыу һымаҡ. Әммә йәш прозаиктар менән эште көсәйтеү бик тә зарур. Был талап төбәк яҙыусылар ойошмалары - Учалы, Сибай, Яңауыл, Күмертау, Стәрлетамаҡтағы проза секцияларына айырыуса ҡағыла. Юғиһә, "Китап" нәшриәтенең "Йәштәр тауышы" серияһына өмөтлө ҡәләмдәрҙе тәҡдим итеү йылдан-йыл ауырлаша. Быйылға, мәҫәлән, йәштәр прозаһынан бер китап та планға инмәне. Үкенесле. Ярай әле республикала "Әҙәби нағыш" ҡанат йәйә, һирәк-һаяҡ өмөтлө ҡәләмдәргә юлығабыҙ. Ә улар - төрлө милләттән.

Ни өсөн прозаға йәштәр дәррәү ылыҡмай? Йәмғиәттә яҙыусының абруйы кәмеүендәме, баҫма тираждарҙың әҙлегендә, гонорарҙың ныҡыҫлығында ғынамы хикмәт? Минеңсә, төп бәлә - күп йәштәрҙең башҡорт әҙәби телен башҡа телдәргә ҡарағанда юҫыҡ белмәүендә, йәнә уҡыусыларыбыҙҙың да башҡортсаһы йомшарыуҙа. Был тәңгәлдә мәктәп программаларындағы әҙәби дәреслектәрҙең, хрестоматияларҙың популярлығы самалы, уларҙың йөкмәткеһе идея-эстетик концепцияһы тапалған, художество кимәле яғынан аҡһаған проза менән тултырылыуы бәкәлгә һуға, буғай. Яҙыусылар союзының ошо темаға махсус ултырыш уҙғарыуы, "Киске Өфө" гәзитенең ошо мәсьәләне ҡуҙғатыуы нәҡ үрҙәге фекергә ҡеүәт.

> ***Ни өсөн прозаға йәштәр дәррәү ылыҡмай? Йәмғиәттә яҙыусының абруйы кәмеүендәме, баҫма тираждарҙың әҙлегендә, гонорарҙың ныҡыҫлығында ғынамы хикмәт? Минеңсә, төп бәлә - күп йәштәрҙең башҡорт әҙәби телен башҡа телдәргә ҡарағанда юҫыҡ белмәүендә, йәнә уҡыусыларыбыҙҙың да башҡортсаһы йомшарыуҙа. Был тәңгәлдә мәктәп программаларындағы әҙәби дәреслектәрҙең, хрестоматияларҙың популярлығы самалы, уларҙың йөкмәткеһе идея-эстетик концепцияһы тапалған, художество кимәле яғынан аҡһаған проза менән тултырылыуы бәкәлгә һуға, буғай. Яҙыусылар союзының ошо темаға махсус ултырыш уҙғарыуы, "Киске Өфө" гәзитенең ошо мәсьәләне ҡуҙғатыуы нәҡ үрҙәге фекергә ҡеүәт.***

Әҙәбиәт йылының төп маҡсаты - яҙыусыларҙы һәйбәт әҫәрҙәр яҙырға илһамландырыу, ә китап һөйөүселәрҙе Рәсәй һәм Башҡортостан әҙәбиәтен күберәк уҡырға йәлеп итеү. Йәшеренбатырын түгел, һуңғы егерме йыл эсендә уҡыусылар яҡынса дүрт-биш тапҡырға, китап етештереү ҙә шунса нисбәткә аҙайҙы: уларҙың да ярайһы проценты коммерция әҙәбиәтен тәшкил итә. Был беҙҙе һис тә биҙәмәй, иң аянлыслыһы - рухиәтебеҙҙе, илһөйәрлегебеҙҙе, телһөйәрлегебеҙҙе ҡаҡшата.

Прозабыҙ алдында торған бурыстар ифрат ҡоласлы һәм яуаплы. Беренсе нәүбәттә - тасуирлау оҫталығын күтәреү, социаль-психологик яңғырашлы, художество дөрөҫлөгө менән тормош дөрөҫлөгө араһында артыҡ айырма күҙәтелмәгән проза яҙыу, тематика диапазонын киңәйтеү, образдар, характерҙар галереяһын ишәйтеү. Минеңсә, һөнәренә, йәшенә, фирҡәһенә ҡарамай, һәр осор кешеһе әҙәби герой сифатында һынланырға хаҡлы. Ә яҙыусының теге йәки был фирҡәлә тороуы-тормауы мөһим түгел. Икенсенән, тәржемә юлы менән ғәзиз Рәсәй, Евразия, хатта ки океандар ашаһындағы китап уҡыусыларҙың күңел ишектәрен ныҡышмалыраҡ ҡаҡһаҡ ине. Ошо булыр ине әҙәби патриотлыҡ! Шуны ла онотмайыҡ: беҙҙең, башҡорттарҙың һүҙ сәнғәтендә, борон-борондан әҙәпәхлаҡ, саф һәм сәләмәт асыл тәрбиәләү изге маҡсатыбыҙ булған, булыр, булаcаҡ.

Сабир ШӘРИПОВ,
БР Яҙыусылар берлегенең проза һәм публицистика секцияһы рәйесе.

✓ *Ул саҙаҡа мәсеттә иҫәпләнһә, Хәйриә тупланмаһы (фонд) итеп ойошторолһа, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине лә бит. Бөгөн, күптәрбеҙҙең ауыҙын асһа, үпкәһе күренгән сағында, 3-5 меңде алып, кеҫәгә һалыу сауаплымы?*

ИНТЕРНЕТТАН

АСЫУҒА ҠАРШЫ... дарыу бармы?

■ Калифорния университеты ғалимдары кешене асыуҙан һаҡлай торған дарыу уйлап тапҡан. Уларҙың фекеренсә, күп енәйәтселәр енәйәт эшләгәндә нәфрәт тойғоһо киserә. Берәүҙәрҙә был психик тайпылыштар менән бәйле булһа, икенселәр ҡыҙыу холоҡло һәм тиҙ ярһып барыусан. Бына тап ошо икенсе төркөмдәге кешеләр өсөн тәғәйенләнә лә инде был дарыу. Америка ғалимдары Паркинсон ауырыуын дауалай торған дарыуҙы ентекле өйрәнгәндән һуң, уларҙың баш мейеһенә үҙенсәлекле тәьҫир итеп, кешелә мәрхәмәтлек тойғолары уятыуға һәләтле икәнен асыҡлаған. Ғалимдар был дарыу ярҙамында ҡатмарлы психик ауырыуҙарҙы ла дауалап буласағына ышана.

■ Оҙаҡ йоҡлау депрессияға, шәкәр диабетына һәм йөрәк сирҙәренә алып килә. Тәүлегенә 8 сәғәттән күберәк йоҡлаған өлкәндәр сәләмәтлегенә ҙур зыян килтерә тип иҫәпләй ғалимдар. Тәүлегенә 6 сәғәт йоҡлаусыларҙың ғүмере күпкә оҙайлыраҡ була, шуға ла йоҡоға бүленгән ваҡыт ошонан артмаҫҡа тейеш. Һынауҙар күрһәтеүенсә, йоҡларға яратыу шәкәр диабеты, депрессия, шулай уҡ йөрәк сирҙәрен булдыра.

■ Маракуйя - бик үҙенсәлекле тәмгә эйә емеш. Диетологтар билдәләүенсә, уның составындағы А һәм С витамины яман шештән һаҡлай. Был витаминдар күҙәнәктәргә зыян килтереүсе ирекле радикалдарҙы юҡҡа сығарыусы көслө антиоксиданттар булып иҫәпләнә. Калий күп булғанлыҡтан, ул ҡан баҫымын төшөрә. Күҙҙәрҙең сәләмәтлеге өсөн дә файҙалы был емеш. Иң мөһиме, ул гемоглобинды күтәреү һәләтенә эйә.

■ Күрәгә менән өрөк файҙалы матдәләргә бик бай. Киптерелгән абрикостарҙың йөрәк мускулына яҡшы йоғонто яһауын аңлатырға була, уның составында калий күп. Күрәгәлә фосфор, тимер, кальций, каротин, В5 витамины бар, шуға ла ул яман шеш ауырыуҙарын булдырмай. Инжир шулай уҡ яман шештән һаҡлай, уны бронхит мәлендә ҡулланалар. Ҡара емеш ашҡаҙан-эсәк тракты эшмәкәрлегенә йоғонто яһай, ревматизм, бөйөр, бауыр ауырыуҙары яфалағанда тап ошо емеш ярҙамға килер. Ҡара емештәге А витамины күреү һәләтен яҡшырта.

■ Британияның "Класадо" фармацевтик компанияһы ҡыҙыҡлы тикшеренеүҙәр үткәргән. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың 53 проценты үҙҙәренә иғтибар йүнәлтеү өсөн ирҙәр ауырыуҙары тураһында арттырып һөйләй, тип уйлай. Ирегеттәрҙең 80 проценты иһә үҙҙәренең ауырыуҙарының етдилегенә ышана. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ирҙәрҙә йәлләү тойғоһо көслөрәк. Ауырыған саҡта ҡатын-ҡыҙҙарҙы бер аҙ йәлләһәң һәм ризыҡ әҙерләп ашатһаң, шул етә. Ә ир-егеттәр уларҙы кәрәкле дарыуҙар менән тәьмин итеүҙе, көнөнә өс тапҡыр яҡшы итеп ашатыуҙы көтә. Уларҙың 29 проценты ғына ауырыған саҡта яңғыҙ ҡалырға ярата.

■ Ғалимдар билдәләүенсә, тәбиғи рәүештә уяныу будильникка ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Бының өсөн бер үк ваҡытта йоҡларға ятып, бер үк ваҡытта торорға ғына кәрәк. Ә ҡапыл уяныу организм өсөн оло стресс. Будильникты һүндереп, тағы йоҡлап китеү шулай уҡ насар, сөнки йоҡлап китергә ярҙам итеүсе гормондар уянырға ярҙам итеүселәре менән буталып бөтә, ә бынан кеше үҙен тағы ла насарыраҡ тоясаҡ.

ШАҢДАУ



Саҙаҡа тураһында элек-электән бик күп сығанаҡтарҙа сығыштар яһалһа ла, сығыш яһаусыларҙың саҙаҡаның мәғәнәһен, маҡсатын, тәбиғәтен аңламауынан, шул арҡала уртаҡ фекергә килә алмауынанмы, киң мәғлүмәт саралары аша төрлө фекерҙәр белдереү дауам итә. Һәр кешенең үҙ фекере, әлбиттә. "Саҙаҡа", "хәйер" төшөнсәләрен дөйөмләштереп ҡарау дөрөҫ булмаҫтыр, тип уйлауҙан, был ике төшөнсәне берәмләп, ентекләп ҡарарға тәҡдим итәм.

САҘАҠА - БУРЫСМЫ, ӘЛЛӘ КҮҢЕЛ ТАЛАБЫМЫ?

Беҙ, олораҡ быуын, "Ямғыр - ер йәшәртә, фатиха - ир йәшәртә", тигән аҡылды һеңдереп үҫтек. Мин, әлбиттә, дин ҡушҡан ғәмәлдәрҙең барыһын да үтәгән диндар кеше лә түгелмен. Әммә бәләкәйҙән намаҙ уҡығандар менән аралашырға, мәрхүмдәргә арналған аяттарҙа ҡатнашырға насип булды. Әле лә улар араһындамын. Динебеҙ, тип, ихлас ғәмәлдәр ҡылыусыларға һәр ваҡыт ыңғай ҡарашта булдым. Ундайҙарҙың эш-мәкәрлеген бөгөн дә хуплайым. Сөнки дин - тәрбиә сығанағы булыуы менән йәмғиәт өсөн үтә лә ҡиммәтле мәктәп. Хәйер, бынһы - айырым һөйләшеү өлкәһе.

Матбуғат биттәрендә, төрлө нәшриәттәрҙә әсбаптар рәүешендә баҫылған Ислам диненә ҡағылышлы сығыштарҙы байтаҡ йылдар туплай килдем. Һатып алған дини китаптарым да хәҙер байтаҡ йыйылды. Китапханамда Сәғүд Ғәрәбстанында, Сүриәлә нәшер ителгән "Ҡөрьән" китаптары, рус телендә "Ғәрәпсә-русса һүҙлек", Ирвингтың "Мөхәммәттең тормошо", Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә башҡорт теленә тәржемә ителеп баҫылған "Ҡөрьән" китабы, башҡа ҡулланмалар, гәзит-журналдарҙа донъя күргән мәҡәләләр ҙә дүрт ҡалын папканы тәшкил итә. Шунлыҡтан, был үтә лә етди темаға һүҙ башлар алдынан етерлек таянысым бар, тимәксемен.

Мосолмандарҙа саҙаҡа биреү тураһында "Краткий научно-атеистический словарь" (Издательство "Наука", М., 1969) һүҙлегендә лә, "Настольная книга атеиста" (Издательство политической литературы, М., 1985) китабында ла матур аңлатма бирелә, сүрәләрҙән, аяттарҙан өҙөктәр килтерелә. Үрҙә килтерелгән сығанаҡтарҙы өйрәнгәндән һуң, "Киске Өфө" гәзитенең быйылғы 2-се һанында донъя күргән "Бәйгәмбәребеҙ тыйған ғәмәлдәр былар" тип аталған мәҡәләһендә Баязит Сабитовтың саҙаҡа тураһында ҡәтғи әйткәне менән һис килешә алмайым. "Ҡөрьән"дең бер "Әл-Бәҡара" сүрәһендә генә лә саҙаҡа бернисә аятта телгә алына бит. Атап әйткәндә, 43-сө, 83-сө аяттарҙа "Зәкәт түләгеҙ", тиелһә, 85-сеһендә "фидиә" тураһында әйтелә, 271-се сүрәлә саҙаҡа биреү маҡтала, 280-се сүрәлә "Саҙаҡа итеү - яҡшы", 276-сы сүрәлә "Саҙаҡа - үҫтерә", 254-селә "Саҙаҡаны битәрләмә", тиелә. Быларҙан тыш, "Әл-Фәтх" сүрәһе (38-се аят) хатта "Һаранлыҡ ҡылма!" тип иҫкәртә.

Артабан Л.Климовичтың "Ислам" (Издательство "Наука", М., 1965) китабына, йә булмаһа, Ғариф Ғөбәйҙең "Ҡөрьән серләре" (Татарстан китап нәшрияты, Ҡазан, 1967) баҫмаһына күҙ һалайыҡ. Уларҙа ла беҙҙе ҡыҙыҡһындырған тема ҡуҙғатыла. Әйткәндәй, Ғ. Ғөбәй үҙ китабында "Ҡөрьән"де бик үк үҙ итмәй, тәнҡитләп яҙған. Әгәр ул ошо көндәрҙә - тере, ә китабы Ислам дине әһелдәренә мәғлүм булһа, үҙ адресына бик ҡаты тәнҡит һүҙҙәре ишетер, хатта, Мөхәммәт бәйгәмбәрҙең карикатураһын баҫтырған Париж журналистары яҙмышына дусар булыр ине, билләһи.

Ғөмүмән, саҙаҡа, хәйер беҙгә ят түгел. Дин тотоу тыйылған осорҙа ла беҙ ул юлдан тайпылманыҡ. Кәләш алғанда - батаһын (ижабын) уҡыттыҡ, сабый тыуһа, исем ҡуштырҙыҡ, вафат булғандарға аяттар бағышлаттыҡ, уларҙы иҫкә алыуға бағышланған төрлө йыйындар үткәрҙек. Ул йыйындарҙа, билдәле, хәйерен дә тараттыҡ. Әле лә бындай йыйындар үтә. Саҙаҡаның төрҙәрен - нәфел (үҙ ихтыярыңа ҡарап үтәлә), ғөсөл, фитыр саҙаҡалары, шулай уҡ зәкәт тураһында ла беләбеҙ. Быларға тағы беҙҙең яҡта гүр хәйере, фидиә өҫтәлә. Әммә барыбер хәйер тирәләй ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡ бара һымаҡ. Һуңғы осор "Киске Өфө"лә баҫылған бер нисә авторҙың - Рәхимә Мусина (№37, 2014), Зәлифә Шакирова (№45, 2014), Баязит Сабитов (№2, 2015), Рәшит Замалетдиновтарҙың (№2, 2015) яҙмалары тураһында һүҙ алып барам.

Минеңсә, мәрхүмдәр рухына бағышланған аяттар ваҡытында хәйер таратыу мәрхүмдәрҙең өлөшөн таратыу, уларҙың рухына тыныслыҡ теләү ул. Эйе, хәҙер хәйер күләме юғарыраҡ. Шөкөр, уны кеҫәнән сығарыр мөмкинлек тә бар. Бай булмаған хәлдә лә, үҙ хәленсә хәйер бирә ала халыҡ. Хәйер тараҡан саҡта үҙ хәленә ҡарап таратыу дөрөҫ булыр, тигән теләгемде еткергем килә. Хәйер һораусылар, теләнселәр күбәйгән заманда, һәр кемдең күңелен күрәйем, тип, кеҫә һайыҡтырыу урынлы ла түгелдер.

Ә хәҙер уҡыусы иғтибарын үҙ ғүремдәге хәйер-саҙаҡа менән бәйле осраҡтар менән таныштырмаҡсымын. Уҙған быуаттың 50-се йылдар башында үҙ ғүремдә тәүге тапҡыр Өфөгә аяҡ баҫтым. Тимер юл вокзалынан үҙәккә трамвайҙа килдем. Ленин скверы буйлап йәйәү атлаған сағымда ни күрәм - был сквер һораныусылар менән тулған. Ҡаршыма осраған бер хәйер һораусыға тинлектәремде тоттора-тоттора килә торғас, аҡсам аҙайғандан-аҙая бара икәнлеген дә төшөндәм. "Мин таратам да ул, ә миңә аҡса бирeүсе юҡ та баһа", тип уйлап алдым.

Икенсе миҫал. 60-сы йылдар башы. Иртән эшкә китеп барғанда көн дә бер мосолман апайҙың түбәтәйен алдына ҡуйып, хәйер йыйып ултырыуын күреп үтәм. Үткән һайын үҙ өлөшөмдө лә сығарам апайға. Бер көн эштән кире әйләнгәнемдә Пушкин урамында акация ҡыуаҡтары араһында теге апайҙың иҫереп, "себен һырытып" ятыуын күреп, ғәрләндем һәм артабан ул апайҙан фатиха көтмәҫкә кәрәк, тигән фекергә килдем.

Тағы. Шул йылдары Өфөнөң К. Маркс урамындағы Үҙәк универмаг алдында тома һуҡыр йәш ҡатындың һәр саҡ ҡулын һуҙып торғанын күптәр иҫләйҙер. Ишетеүемсә, ул ҡатын тураһында гәзиткә лә яҙғандар. Баҡтиһән, ул ҡатындың өр-яңы "Москвич" автомобиле булған икән (ул осорҙа машиналы булыу бөгөн самолетлы булыуға бәрәбәр). Ул апайҙы ла, теге ҡатынды ла бынан ары күрмәнем. Совет власы өсөн улар мәсхәрә ине. Һау кешеләрҙе көслəп булһа ла эш менән тәьмин иттеләр, ә эшкә яраҡһыҙҙар һәм ололар үлмәҫлек булһа ла пособие, пенсия алды. Бөгөн хәйер һораусылар үтә күбәйҙе. Хәйер һорау хәҙер кәсепкә лә әйләнеп китте. Моғайын, был күренеш һәр ил өсөн дә хурлыҡ иҫәпләнәлер. Петр Беренсе батша ла 1691 йылғы указы менән хәйер кәсепселәрен ҡамсы менән һуҡтырған, ә хәйер биреүселәргә ул осор өсөн үтә ҙур иҫәпләнгән 5 һум суммаһында штраф һалдыртҡан бит.

Ниндәйҙер маҡсат менән байлығын йәлләмәй, халыҡ менән уртаҡлашыусыларҙы меценат тип атап, Савва Морозов, Третьяков кеүектәрҙе маҡтап, ауыҙ һыуыбыҙ ҡорой. Был кешеләр - үткән заман кешеләре. Ҡана һуң улар ишеләр бөгөн дә булһа. Юҡһа, бөгөнгө бай рәсәйҙәр үҙ аҡсаһын сит илдәргә тыға бит. Ә үҙебеҙ сит илдәр инвестицияһына "мохтажбыҙ". Әлбиттә, урындағы эшҡыуарҙар ара-тирә уҙғарылған йыйынкисәләр ойоштороуға матди ярҙам итә, бағыусы дәрәжәһен ала, беҙҙе ҡыуандыра. Ләкин уларҙың да хәле мөшкөл бит бөгөн. Хәҙер хәйриә акциялары киң таралыу яулай. Ауырыу балаларҙы һауыҡтырыуға тәғәйенләнгәндәре бар, Көнсығыш Украина, Ҡырым халҡына ярҙам да йыш ойошторола. Быларҙы ла шул уҡ хәйер, шул уҡ саҙаҡа, тип атарға мөмкиндер, моғайын.

Саҙаҡа, алда яҙғанымса, төрлө-төрлө була. Хәлле кешегә саҙаҡа биреү урынлы түгелдер, моғайын. Шул уҡ ваҡытта саҙаҡаны мулыраҡ эләктереү яғын ҡайғыртҡандар ҙа бар. Мәҫәлән, гүр саҙаҡаһы йолаһы беҙҙең тирәлә генә "тыуған", тиеүе менән Б. Сабитов хаҡлылыр. Гүр саҙаҡаһы, фидиә, "Ҡөрьән" сығыу "баһа"һы тере мал (өлкән нарыҡ) хаҡына тиң, шулай уҡ 3-5 мең аҡсалата алыу ҙа ҡалыпҡа һалынған.

Һүҙ юҡ. Саҙаҡалар бирелһен: ул - мәрхүм өлөшө, ул - мәрхүм рухы тыныслығы. Ул саҙаҡа мәсеттә иҫәпләнһә, Хәйриә тупланмаһы (фонд) итеп ойошторолһа, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине лә бит. Уйлаһаң, хәҙер мәсетһеҙ ауыл да юҡ, буғай. Мәсетте тәрбиәләп тоторға, йылытырға, яҡтыртырға ла кәрәк бит. Саҙаҡаны һибә ҡылыу йолаһы ла бар. Бөгөн, күптәрбеҙҙең ауыҙын асһа, үпкәһе күренгән сағында, 3-5 меңде алып, кеҫәгә һалыу сауаплымы?

Алда әйттем инде: беҙҙә дини ғәмәлдәр үткәреү "такса"һы юғары. Унан тыш, йыйындар ҙа бик ҙур әҙерлек менән үтә. Бала саҡтан иҫтә: хәйергә бирелгән тәңкәләр көмөш тинле үрмес, сулпыға тағылыр ине. Иҫтәлек, һаҡлағыс итеп. Бөгөн дә ғәрәп илдәрендәге сөнниҙәрҙә аяттар сығыуға өҫтөнлөк бирелә. Ә хәйер-саҙаҡа беҙҙәге кеүек таратылмай, мохтаждарға бирелә. Б.Сабитов, бәлки, шуны күҙ уңында тоталыр?

ЙОМҒАҠЛАП...

Мөфтөйөбөҙ Нурмөхәмәт хәҙрәт, ҡайһы бер осраҡта саҙаҡа дөрөҫ тә бирелмәй, тип яҙҙы ("Киске Өфө", №47, 2013). Дин әһелдәре беҙҙең яҙғандар менән танышыр, Рәшит Замалетдинов кеүек ("Киске Өфө", №2, 2015) "Наҙанлыҡтан киләме был?" тип, бөтәбеҙҙе аптырашта ҡалдырмаҫ, тип ышанам.

Йәмних ҠАШҠАРОВ.
Баймаҡ районы
Әбделкәрим ауылы.

✓ *Үҙенең эргәһенә һәр ваҡыт, киҫәтеүһеҙ инергә рөхсәт итә. Беҙ Унан һорайбыҙ, һөйләшәбеҙ. Намаҙлыҡты йәйеп, "Аллаһу әкбәр" тиеү менән беҙ Уның янында булабыҙ һәм теләгәнебеҙҙе һорайбыҙ.*

ЭТИКЕТ

ҠЫЛЫҠТАРЫҢА - ТӨҘӘТМӘ,

йәғни йәмғиәттә үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре

• Ниндәйҙер бинаға ингән саҡта эстә "тығын" барлыҡҡа килмәһен өсөн, тәү сиратта, унан сығыусыларҙы үткәрергә кәрәк. Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙҙы һәм ололарҙы ла алдан үткәреү мәҙәниәтлек билдәһе.

• Өҫтәл артында ла матур ҡағиҙәләр тураһында оноторға ярамай. Мәҫәлән, тырнаныу, иҫнәү, тештәрҙе соҡоу, тырнаҡ менән булышыу, үҙ-үҙеңде тәртипкә килтереү насар күренеш. Шулай уҡ бергә табында ултырғандарҙан айырылып, оҙаҡҡа һәм йыш ҡайҙалыр юғалып тороу ҙа йәмһеҙ. Әгәр ниндәйҙер мөһим сәбәп буйынса сығырға тура килһә, ул хаҡта бергә килеүселәргә ҡыҫҡаса аңлатып биреү кәрәк. Кафе, ашхана һәм ресторанда кешенең ашауын ҡарап ултырыу әҙәпһеҙлек һанала. Бындай урындарҙа ҡысҡырып һөйләшеү, көслө тауышҡа ҡуйып музыка тыңлау һәм башҡа төрлө үҙеңә иғтибар йәлеп итеү ҙә йәмһеҙ күренеш.

• Тымау тейҙереп сирләүсе кеше араһында мөмкин тиклем әҙерәк булырға тырышыу мөһим, сөнки, бирҙән, башҡаларға ла ауырыуҙы йоҡтороу хәүефе ҙур булһа, икенсенән, йүтәлләү менән тирә-яҡтағыларға ҡамасауларға мөмкин. Әйткәндәй, кеше араһында йүткереүҙе, сөскөрөүҙе мөмкин тиклем әҙәйтергә тырышырға кәрәк. Кеҫәлә һәр саҡ таҙа ҡулъяулыҡ булыуын ҡайғыртыу мөһим. Шуныһы ла бар - эргәгеҙҙәге кешеләрҙең сөскөрөүен ишетмәгәнгә һалышыу иң дөрөҫө булыр.

• Үҙегеҙгә таныш булмаған кешегә, шул иҫәптән ата-әсәһе янында балаларға ла, шелтә эшләүҙән тыйылыу кәрәк. Әҙ таныш булған кеше менән әңгәмә барышында уның менән арауыҡты боҙоу насар күренеш. Бындай осраҡта иң ҡулай дистанция - ҡул һуҙымындағы арауыҡ. Шулай уҡ һәйбәт белмәгән кешеләрҙе ҡосаҡлау, сикәләренән үбеү, яурындарынан ҡаҡҡылау этикет ҡағиҙәләренә тура килмәй. Бындай хәрәкәттәрҙе яҡын кешеләргә ҡарата ғына ҡулланырға мөмкин.

• Кинотеатр, театр һәм концертҡа барғанда билетта күрһәтелгән урынға ултырыусыларға йөҙ менән боролоп үтеү ҡаралған. Бындай осраҡта иң беренсе ир-ат үтә. Концерт һәм спектакль барышында, кино ҡарағанда телефондан һөйләшеү, ҡыштырлап ашау һәм эсеү, буласаҡ ваҡиғаларҙы ҡысҡырып алдан фаразларға тырышыуҙан тыйылыу мөһим, сөнки был башҡаларға ҡамасаулай. Йәмәғәт урындарында, тәбиғи, тәбиғәт миҙгеленә һәм урынына ҡарата кейем һайлау зарур.

• Бер ҡасан да ҡунаҡҡа алдан иҫкәртмәйенсә бармағыҙ. Тиҙ генә инеп сығырға кәрәк булғанда ла алдан шылтыратыу дөрөҫ булыр.

• Йәмәғәт урындарында кеҫә телефонын өҫтәлгә һалып ҡуйыу һәм минут һайын уға күҙ ташлау насар тон һанала. Бындай ҡылыҡты эргәндәгеләр уларға ҡарата ихтирам күрһәтмәү, алып барылған әңгәмә һәр ваҡыт телефонына төбәлеп ултырыусыға ҡыҙыҡ түгел, тип ҡабул итеүе мөмкин.

Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.
(Дауамы бар).

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ

ДИНҺЕҘ МЕНӘН ДИНДАР БӘХӘСЕ

Уйлап сығарылған ҡаршылыҡтар

Дуҫым яңы һорауҙар бирә башланы:

- Һин, Ҡөрьәндә ҡаршылыҡтар юҡ, тиһең, ә "Теләгән иман тотһон, теләмәгән - тотмаһын" тигән һүҙҙәр, һинеңсә, нимә? Икенсе бер аят уға ҡапма-ҡаршы: "Әгәр Алла теләмәһә, һеҙ теләмәйәсәкһегеҙ", - ти. Унан һуң Ҡөрьән гонаһлылар бирер яуап тураһында әйтә: "Уларҙың шаһитлығы теркәлер һәм уларҙан һорау алыныр" йәки: "Был бит - һиңә һәм халҡыңа иҫкәртеү, һәм һеҙҙән һорау алынасаҡ". Ә икенсе урында: "Гонаһлыларҙан гонаһтары өсөн яуап алынмаҫ", - ти. Һуңынан "Гонаһлылар билдәләре буйынса танылыр" тип, ундайҙарҙың йөҙҙәренә ҡарап таныласағы хаҡында әйтә...

Мин уға шулай тип яуап бирҙем:

- Һин килтергән миҫалдар ҡаршылыҡ түгел. Әйҙә, "Теләгән иман тотһон, теләмәгән - тотмаһын" тигән аят тураһында фекерләшәйек. Был аят ҡолға ирекле булыуын һәм уның үҙ юлын һайлай алыуын күрһәтә. Тик иректе беҙ Алланан көсләп тартып ала алмайбыҙ. Ул уны беҙгә Үҙ ирке менән бирҙе. Алланың был әмерен аңлатып, икенсе бер аят килде: "Алла теләмәгәнде һеҙ теләй алмайһығыҙ, теләмәйһегеҙ". Йәғни кешенең ирке Алла ихтыярында һәм Уның ихтыярына ҡаршы була алмай. Тимәк, кеше үҙенә гонаһлы йәки гонаһһыҙ юл һайлай ала, әммә бер ҡасан да Алла ихтыярына ҡаршы килә алмай. Бөтә гонаһтар, ғөмүмән, бөтә нәмә Алла ихтыярында. Был бик ҡатмарлы мәсьәлә. Алла кешегә кеше үҙе теләгәнде бирә. Мәғәнәһе - көсләү юҡ, ике йөҙлөлөк юҡ, ҡаршылыҡ юҡ. Ә яуап биреү тураһындағы аяттарҙың төрлөләгө - уларҙың төрлө төркөм гонаһлыларға ҡарата булыуынан. Ҡайһы берәүҙәренән шаһитнамәләр талап ителәсәк. Гонаһ билдәһе биттәренә сыҡҡандарҙы аяҡтарынан тотоп тамуҡҡа атып бәреҙәр. Гонаһтарынан баш тартыусылар ҙа булыр, улар өсөн аяҡ-ҡулдары шаһитлыҡ ҡылыр. Ҡайһы берәүҙәр үҙен-үҙе язалар, ҡайғыға батыр, ундайҙарға быһау һалынмаҫ.

- Ҡөрьәндең "Ен һәм кешеләрҙе Миңә табынһындар өсөн яраттым мин!" тигән аятын нисек аңлайһың? Алла беҙҙең табыныуыбыҙға мохтажмы ни?

- Юҡ, Алла табыныуыбыҙға мохтаж түгел, беҙ Уға табыныуға мохтажбыҙ. Яратҡан ҡатын-ҡыҙҙың артынан мәжбүри йөрөйһөңмө ни? Һине ул илертә, һоҡландыра, фекерҙәрең, уй-хистәрең мәңге уға бирелгән. Аллаға табыныу ҙа ошо хискә, ошо мөхәббәткә оҡшаш, сөнки Алла иң мөһабәттәрҙең мөһабәте. Әгәр һин Уның шөһрәтен, гүзәллеген, ҡөҙрәтен белеп алһаң, Уға табыныр һәм бынан оло ҡәнәғәтлек табыр инең.

Аллаға аңлы рәүештә генә табыналар. Алланы танып белеү - белемдең иң юғары нөктәһе, белемгә табан илткән юлдың аҙағы. Ул кеше тыуған миҙгелдән башлана. Бала иң беренсе белгән нәмә - әсәһенең күкрәге, уның тәүге рәхәте. Һуңынан ул әсәһен таный башлай, атаһын, туғандарын, йәмғиәттә. Унан инде йәмғиәттән файҙалана башлай. Быныһы икенсе, ҙур "күкрәк". Ул уға рәхәтлек, байлыҡ бирә. Үҙен һәм йәмғиәттә танығас, ул ерҙең әйләнә-тирәһен өйрәнә башлай, йыһанға оса, айға аяҡ баҫа, билдәһеҙлекте белергә тырыша, шул рәүешле ғаләмде танып-белеүҙә рәхәтлек таба. Тормошта ҡыйынлыҡтар күп, сәскәләр йыйыусы һәр кем сәнскегә ҡаҙала. Сикһеҙлектең осона етергә теләүселәр ҡыйынлыҡтар аша уҙмайынса тороп, уға өлгәшә алмай. Әммә үҙенең Раббыһын танып белеү ҡолдоң күҙенән пәрҙәне аса.

Аллаһы Тәғәлә һеҙҙең табыныуығыҙҙан ҡәнәғәт. Беҙ Уға мәжбүри табынмайбыҙ, беҙ Уның бөйөклөгөн һәм шөһрәтен аңлағанға күрә табынабыҙ. Уға табыныуҙа кәмселек юҡ, улай ғына ла түгел, беҙ Уға табыныуҙа азатлыҡ һәм мәртәбә, ҡоллоҡтан һәм фани тормоштан азат булыуҙы күрәбеҙ. Алла беҙҙе һәр төрлө язанан ҡотҡара ала, ә Алла ҡаршыһында биреләһе яуаптан ҡотҡарасаҡ зат тыумаған һәм тыумаҫ та. Был - ысын хәҡиҡәт.

Алланан ҡурҡыу - ул батырлыҡ. Уға табыныу - ирекле булыу. Үҙеңде Алла ҡаршыһында түбән һанау - намыҫлылыҡ. Уны һәр яҡтан камил белеү - табыныу. Алла беҙҙе Үҙ байлыҡтарынан бүләкләү өсөн яратҡан, ә беҙҙән нимәлер алыу өсөн түгел. Ул - Ишетеүсе, Күреүсе - беҙгә ҡолаҡтар биргән. Ул һәр нәмәне Белеүсе - беҙгә, белемебеҙҙе күбәйтеү өсөн аң биргән. Ул беҙгә Үҙ ҡөҙрәтенән хис-тойғолар биргән. Алла былай ти: "Минең ҡолом, Миңә буйһон. Мин һине илаһилаштырырмын, һин нимәгә "Бул!" тиһәң, шул бар булыр".

Алла ҡоло булыу беҙ белгән ҡоллоҡ төшөнсәһе түгел, ә бының ҡапма-ҡаршыһы. Беҙҙең аңлауҙа ҡоллоҡ - хужаның беҙҙе эшләтеп, үҙенә файҙа алыуы. Ә Аллаға ҡол булыу - Раббыбыҙҙың беҙгә үҙ йомартлыҡтарынан сикләмәйенсә нығмәттәрен биреүе, бүләкләүе.

Алла беҙҙең табыныуға мохтаж түгел. Беҙ Уға табыныуға мохтаж, Уның йомартлығына мохтаж, Уның нығмәттәренә мохтаж. Алла бик йомарт, ул сикләүҙәрҙе белмәй. Ул беҙгә Үҙенең эргәһенә һәр ваҡыт, киҫәтеүһеҙ инергә рөхсәт итә. Беҙ Унан һорайбыҙ, һөйләшәбеҙ. Намаҙлыҡты йәйеп, "Аллаһу әкбәр" тиеү менән беҙ Уның янында булабыҙ һәм теләгәнебеҙҙе һорайбыҙ. Ошо үрҙә әйтелгәндәрҙе аңлап, мәғәнәһенә төшөнөп ҡараһаң, ғәжәпләнеү һәм һоҡланыуҙан башҡа хис тыумаҫ.

"Динһеҙ менән бәхәс" китабынан.
(Дауамы бар).

УҢЫШ ҠАҘАН

НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

Йыһан ҡанундары

Ысын именлеккә эйә булыу өсөн ошо ҡанундар буйынса йәшәргә кәрәк

Фекер алышыу өлкәһе булып Йыһан ҡанундары торасаҡ һәм улар, нисек кенә тип аталмаһындар, эшләйҙәр һәм үҙҙәренең барлығын раҫлайҙар. Әгәр ошо ҡанундарға яраШлы эшмәкәрлек алып барһағыҙ, үҙегеҙ күҙаллаған һөҙөмтәләргә өлгәшерһегеҙ. Уңышлы булыуҙың ете Йыһан ҡануны бар.

1. Бушлыҡ ҡануны. Йылға ярындағы ҡомлоҡтан үтеп китһәгеҙ, артығыҙҙан эҙ ҡала, әммә бер нисә минуттан һуң ел һәм тулҡын уларҙы юҡҡа сығара. Тәбиғәт бушлыҡты яратмай, сөнки тәүҙән үк Йыһан асылы булып изгелек тора, шуға ла бушлыҡ һәр саҡ изгелек менән тула. Шуға күрә тормошоңа уңыш килтереүҙең иң яҡшы юлы - унда бушлыҡ булдырыу.

Кире хис-тойғолар менән урап алынһағыҙ, тормошоғоҙҙа ыңғай кисерештәргә урын табылмай. Ыңғай көйләнеш алыу өсөн тормошоғоҙҙағы кире нәмәләрҙе ебәреп, уларҙан ҡотолорға кәрәк. Был принцип тормошоғоҙҙоң барлыҡ өлкәләрендә лә уңыш яулауға килтерәсәк. Әгәр яңы аяҡ, өҫ кейеме алырға теләһәгеҙ - иҫкеләренән ҡотолоғоҙ, уларҙы мохтаждарға бирегеҙ. Ҙурыраҡ мөхәббәт һәм йылылыҡ теләйһегеҙме? Әлеге ваҡытта булған мөнәсәбәттәрҙән ҡотолоғоҙ. Ошоно уҡ сәләмәтлеккә ҡарата ла ҡулланырға мөмкин. Минең тормошомдоң тәүге 30 йылында сәләмәтлек буйынса ла, финанс яғынан да, шәхси тормошта ла проблемаларым күп булды. Һөҙөмтәлә алйот, ауырыу һәм ярлы инем, әммә сәбәбе нимәлә икәнен генә аңлай алманым.

Һуңынан ғына тормошома был кире күренештәрҙе үҙемдең ҡорбан аңы менән фекерләп, үҙем тартып килтергәнемде аңланым. Мин ҡорбан статусына шул тиклем ныҡ йәбешкәйнем, шуға күрә аңымда үҙемде еңеүсе итеп күргән образ бөтөнләй булманы ла. Ошо образдан ҡотолоу менән яңы мөмкинлектәр асылды. Ғүмер буйы оҙатып килгән сәләмәтлегемдәге проблемалар мөғжизәле рәүештә юҡҡа сыҡты.

Был ҡанунды ҡулланыу өсөн ниндәйҙер кимәлдә инаныу булырға тейеш: әлеге ваҡытта нимәгә эйәһегеҙ, унан ҡотолорға тейешһегеҙ. Әгәр Ғаләм нигеҙендә изгелек ята икәненә ышанһағыҙ, үҙегеҙ лайыҡ булған һөҙөмтәгә өлгәшеүе еңелерәк буласаҡ. Үҙегеҙ яратмаған эштән, ҡаршылыҡлы мөнәсәбәттәрҙән йәки кире инаныуҙарҙан ҡотолоуҙан ҡурҡмаясаҡһығыҙ, сөнки уларҙы юғары баһалыраҡ нимәлер алмаштырыуын беләһегеҙ. Һеҙ изгелек менән уратып алынғанһығыҙ, мохтаҙлыҡ бары тик аңығыҙҙа йәшәй. Аңығыҙҙы уңышҡа көйләгеҙ, унда бушлыҡ булдырығыҙ һәм уңыш ошо буш урынды аласаҡ.

2. Әйләнмә ҡануны. Уңышты, үҫеште йылғаның тиҙ ағышы кеүек күҙ алдына килтерегеҙ: һыу бер ваҡытта ла туҡтап тормай, гел алға аға. Ә хәҙер ошо йылғаны бәләкәй генә плотина быуып тора, тип күҙаллағыҙ. Уның алдында һыу туҡтап ҡала. Уңыш менән идара итеүсе әйләнмә ҡануны ла шулай эшләй. Һаранлыҡ һәм даими рәүештә аҡса йыйыу торғонлоҡҡа килтерә. Әгәр нимәнелер әйләнешкә индерәһегеҙ икән, унан энергетик блокаданы алып, уңыш йылғаһының ирекле ағышын тәьмин итәһегеҙ.

Рэнди ГЕЙДЖ.



13 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (12+).
14.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00, 03.55 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Однажды в Ростове". 9-я и 10-я серии. Криминальный сериал (16+).
23.15 "Вечерний Ургант" (16+).
23.50 "Познер" (16+).
00.50 Ночные новости.
01.05 "Время покажет" (16+).
01.55 "Наедине со всеми" (16+).
02.50, 03.05 "Модный приговор".
04.05 "Контрольная закупка".

РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00, 02.55 "Эволюция будущего".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Цвет черемухи". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Склифосовский". Драматический сериал. 9-10-я серии (16+).
22.50 "Штурм Берлина. В логове зверя" (12+).
24.00 "Севастополь. Русская Троя" (12+).
01.05 "Закон и порядок-20" (16+).
02.55 "Эволюция будущего".
04.00 "Комната смеха".

"ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
21.00 "Ҡурай ынйылары". Музыкаль проект (12+)
23.00 "Моңом булып кил". Гөлдәр Ишҡыуатова (12+)

БСТ

07.00 "Гимн Республики Башкортостан" (16+).
07.05 "Сәләм!" (12+).
10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).
10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).
10.45 "Зеркальце" (0+).
11.00 "Замандаш" (6+).
11.15 "Орнамент" (0+).
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 22.00 Новости (0+).
11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).
13.00 "Бәхетнамә" (0+).
13.30, 14.30, 18.30 Новости (на башк. яз.) (0+).
13.45 "Мелодии души" (12+).
14.15 "Учу башкирский язык" (0+).
15.00 "Семәр" (0+).
15.15 "Йырлы көрәҙ" (0+).
15.45 "Фанташ" (0+).
16.00 "Башкорттар" (12+).
16.45 "Дорога к храму" (0+).
17.15 "Криминальный спектр" (16+).
17.45 "Помни меня" (12+).
18.15 "Деловой Башкортостан" (12+).
18.55 "Үткән ғүмер" (12+).
19.25 Хоккей. Финал плей-офф чемпионата ВХЛ. "Ижсталь" (Ижевск) - "Торос" (Нефтекамск). Прямая трансляция.
22.30 "Уфимское "Времечко" (12+).
23.00 "Няньяка по вызову" (16+).

15 АПРЕЛЯ СРЕДА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Однажды в Ростове". Сериал (16+).
14.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет". Продолжение (16+).
16.00, 03.55 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Однажды в Ростове". 11-я и 12-я серии (16+).
23.15 "Вечерний Ургант" (16+).
23.50 Ночные новости.
00.05 "Владимир Маяковский. Последний апрель" (16+).
01.10 "Время покажет" (16+).
02.00 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Модный приговор".
04.00 "Мужское/Женское" (16+).

РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз" (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Цвет черемухи". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Склифосовский". Сериал. 11-я и 12-я серии (12+).
22.50 "Шифры нашего тела. Неизвестные органы". Фильм 2-й (12+).
23.50 "Запрещенная история" (12+).
01.45 "Закон и порядок-20" (16+).
03.35 "Дети индиго" (12+).
04.35 "Комната смеха".

"ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
21.00 "Ҡурай ынйылары". Музыкаль проект (12+)
23.00 "Моңом булып кил". Гөлдәр Ишҡыуатова (12+)

БСТ

07.00 "Гимн Республики Башкортостан" (16+).
07.05 "Сәләм!" (12+).
10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).
10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).
10.45 "Зеркальце" (0+).
11.00 "Замандаш" (6+).
11.15 "Орнамент" (0+).
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 22.00 Новости (0+).
11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).
13.00 "Бәхетнамә" (0+).
13.30, 14.30, 18.30 Новости (на башк. яз.) (0+).
13.45 "Мелодии души" (12+).
14.15 "Учу башкирский язык" (0+).
15.00 "Семәр" (0+).
15.15 "Йырлы көрәҙ" (0+).
15.45 "Фанташ" (0+).
16.00 "Башкорттар" (12+).
16.45 "Дорога к храму" (0+).
17.15 "Криминальный спектр" (16+).
17.45 "Помни меня" (12+).
18.15 "Деловой Башкортостан" (12+).
18.55 "Үткән ғүмер" (12+).
19.25 Хоккей. Финал плей-офф чемпионата ВХЛ. "Ижсталь" (Ижевск) - "Торос" (Нефтекамск). Прямая трансляция.
22.30 "Уфимское "Времечко" (12+).
23.00 "Няньяка по вызову" (16+).

14 АПРЕЛЯ ВТОРНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Женский журнал".
12.30 "Однажды в Ростове". Сериал (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет". Продолжение (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Однажды в Ростове". 13-я и 14-я серии (16+).
23.20 "Вечерний Ургант" (16+).
23.55 Ночные новости.
00.10 "Структура момента" (16+).
01.10 "Наедине со всеми" (16+).
02.05 "Время покажет" (16+).
02.55, 03.05 "Модный приговор".
03.00 Новости.

РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00, 03.05 "Шифры нашего тела. Неизвестные органы". Фильм 2-й (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Цвет черемухи". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Склифосовский". 13-я и 14-я серии (16+).
22.50 "Специальный корреспондент" (16+).
00.30 "Кузькина мать. Итоги". "Бомба для победителей" (12+).
01.35 "Закон и порядок-20" (16+).
03.20 "Шифры нашего тела. Неизвестные органы". Фильм 2 (12+).
04.15 "Комната смеха".

"ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
19.00 "Башҡорт йыры". Хит-парад (12+)
20.00 "Котлаузар" (6+)
23.00 "20-се быуат йырҙары". Концерт (6+)

БСТ

07.00 "Гимн Республики Башкортостан" (16+).
07.05 "Сәләм!" (12+).
10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).
10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).
10.45 "Борсак" (0+).
11.00 "Замандаш" (6+).
11.15, 18.15 "Орнамент" (0+).
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.) (0+).
11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).
13.00 "Бәхетнамә" (0+).
13.30, 14.3, 22.300 Новости (на башк. яз.) (0+).
13.45 "Мелодии души" (12+).
14.15 "Учу башкирский язык" (0+).
15.00 "Шатлык йыры" (0+).
15.15 "Шәп арба" (0+).
15.45 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).
16.00 "Тәмле" (12+).
16.45 "Здоровое решение" (12+).
17.15 "История признания" (6+).
17.45 "Сыны Отчизны" (12+).
18.30 "Вепрь". Сериал (12+).
19.30 "Телецентр" (0+).
20.15 "Сәнгелдәк" (0+).
20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.) (0+).
21.00 "Автограф" (12+).
22.00 "Историческая среда" (12+).
23.00 "Эмос и Эндрю". Худ. фильм (16+).

16 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 02.35, 03.05 "Модный приговор".
12.00 Новости (16+).
12.25 "Однажды в Ростове". Сериал (16+).
14.00 Прямая линия с Владимиром Путиным.
17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Время покажет" (16+).
18.05, 00.40 "Наедине со всеми" (16+).
18.55 "Давай поженимся!" (16+).
20.00 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
22.00 "Однажды в Ростове". 15-я и 16-я серии (16+).
23.45 "Целитель Лука" (12+).
01.35 "Россия от края до края".
03.00 Новости.
03.40 "Мужское/Женское" (16+).
04.25 "Контрольная закупка".

РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00, 13.00 "Вести".
14.00 Прямая линия с Владимиром Путиным.
17.00 "Вести".
19.30 "Вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
22.00 "Склифосовский". 15-я и 16-я серии (12+).
23.50 "Удиви меня" Худ. фильм (12+).
01.20 "Вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
03.00 "Кузькина мать. Итоги". "Бомба для победителей" (12+).
04.00 "Комната смеха".

"ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
19.00 "Башҡорт йыры". Хит-парад (12+)
20.00 "Котлаузар" (6+)
23.00 "20-се быуат йырҙары". Концерт (6+)

БСТ

07.00 "Гимн Республики Башкортостан" (16+).
07.05 "Сәләм!" (12+).
10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).
10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).
10.45 "Борсак" (0+).
11.00 "Замандаш" (6+).
11.15, 18.15 "Орнамент" (0+).
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.) (0+).
11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).
13.00 "Бәхетнамә" (0+).
13.30, 14.3, 22.300 Новости (на башк. яз.) (0+).
13.45 "Мелодии души" (12+).
14.15 "Учу башкирский язык" (0+).
15.00 "Шатлык йыры" (0+).
15.15 "Шәп арба" (0+).
15.45 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).
16.00 "Тәмле" (12+).
16.45 "Здоровое решение" (12+).
17.15 "История признания" (6+).
17.45 "Сыны Отчизны" (12+).
18.30 "Вепрь". Сериал (12+).
19.30 "Телецентр" (0+).
20.15 "Сәнгелдәк" (0+).
20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.) (0+).
21.00 "Автограф" (12+).
22.00 "Историческая среда" (12+).
23.00 "Эмос и Эндрю". Худ. фильм (16+).

17 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Однажды в Ростове". Сериал (16+).
14.10, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.25 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
23.30 "Голос. Дети". Финал.
00.55 "Коллекция "Первого канала". "Матадор" (16+).
03.00 "Парни не плачут". Биографическая драма (16+).
05.05 "Контрольная закупка".

РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.10, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
08.55 "Мусульмане".
09.10 "От всей души" (12+).
10.05 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Цвет черемухи". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести - ПФО".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир".
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Моя любовь". Мелодрама (16+).
23.00 "Главная сцена". Музыкальный конкурс (16+).
03.25 "Чертово колесо". Мелодрама (16+).
03.40 "Горячая десятка" (12+).
04.35 "Вести. Дежурная часть".

"ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (0+)
19.00 "Байығ-2015". 1 тур (12+)
20.00 "Котлаузар" (6+)
23.00 "Кис ултырып". Әлиә Нурғәлиева (12+)

БСТ

07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).
07.05 "Сәләм!" (12+).
10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).
10.30 "Гора новостей" (0+).
10.45 "Сулпылар" (0+).
11.00, 18.30 "Замандаш" (6+).
11.15 "Орнамент" (0+).
11.30, 12.30, 17.30, 21.30 Новости (0+).
11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).
13.00 "Бәхетнамә" (0+).
13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).
13.45 "Мелодии души" (12+).
14.15 "Учу башкирский язык" (0+).
14.55 Футбол. Молодежное первенство РФПЛ. "Уфа" (Уфа) - "Локомотив" (Москва). Прямая трансляция.
17.00 "Весело живем" (12+).
17.15 "Криминальный спектр" (12+).
17.45 "Позывной "Барс" (0+).
18.00 "Йома" (0+).
18.55 Хоккей. Финал плей-офф чемпионата ВХЛ. "Торос" (Нефтекамск) - "Ижсталь" (Ижевск). Прямая трансляция.
22.00 "Аль-Фатиха" (6+).
23.00 "Яркая звезда". Худ. фильм (12+).

18 АПРЕЛЯ СУББОТА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Страна 03". Сериал (16+).
06.00 Новости.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Голос. Дети". На самой высокой ноте".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.05 "На 10 лет моложе" (16+).
13.50 "Барахолка" (12+).
14.40 "Безымянная звезда". Худ. фильм (12+).
17.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Угадай мелодию" (12+).
19.00 Коллекция "Первого канала".
21.00 "Время".
21.20 "Голос. Дети". Финал.
23.40 "Что? Где? Когда?"
00.50 "Реальные парни". Криминальная драма (16+).
02.30 "Нотариус". Худ. фильм
04.50 "Модный приговор".

РОССИЯ 1

04.50 "Двойной обгон". Худ. фильм (12+).
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.25 "Военная программа" Александра Сладкова.
08.50 "Планета собак".
09.25 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Звездные войны Владимира Челомея".
12.40, 14.40 "Слепой расчет". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
17.20 "Танцы со звездами". Сезон-2015.
20.00 "Вести в субботу".
20.25 "Семья маньяка Беляева". Детективный сериал. 4 серии (12+).
00.35 "Судьба Марии". Мелодрама (16+).
02.35 "Сайд-степ". Худ. фильм (16+).
04.45 "Комната смеха".

"ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
17.00 "Сүллектең аҡ ҡояшы". Фильм (6+)
19.00 "Башҡорт йыры". Хит-парад (12+)
(В.2, Баш.йыры 14.03.15)
23.00 Миңзифа Искужина. Концерт (6+)

БСТ

07.00 Гимн Республики Башкортостан (12+).
07.05, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).
07.15 "Доброе утро!"
08.10 "Барби и волшебный Пегас" (0+).
09.30 "Здоровое решение" (12+).
10.00 "КЛИО" (6+).
10.45 "Большой чемодан" (6+).
11.30 "Аль-Фатиха" (6+).
12.00 "Следопыт" (12+).
12.30, 21.30, 06.30 Новости.
12.45 "Наука 102" (6+).
13.15 "Орнамент" (0+).
13.30 "Автограф" (12+).
14.00 "Дарю песню" (12+).
16.00 "Баик-2015" (12+).
16.55 Хоккей. Финал плей-офф чемпионата ВХЛ. "Торос" (Нефтекамск) - "Ижсталь" (Ижевск). Прямая трансляция (0+).
19.30 "Хазина" (0+).
20.00 "Башкорттар" (12+).
20.30 "Башкорт йыры" (12+).
21.00 "Бизнес-сфера" (12+).
22.00 "Женское лицо Победы" (12+).
23.00 "Башкорт йыры" представляет…" (6+).
24.00 "Нокаут". Худ. фильм (16+).
01.35 "Кто-то теряет, кто-то находит" (12+).
03.45 "Розовая пантера" (12+).
05.55 "Мелодии души" (12+).

19 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Страна Оз". Сериал (16+).
08.10 "Армейский магазин" (16+).
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки с Дм. Крыловым" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Горько!" (16+).
13.15 "Теория заговора" (16+).
14.20 "Алла Пугачева - моя бабушка" (12+).
15.25 Коллекция "Первого канала".
17.45 Вечерние новости (с субтитрами).
18.00 "Точь-в-точь" (16+).
21.00 "Воскресное Время".
22.30 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига (16+).
00.30 "Проблески надежды". Мелодрама (16+).
02.35 "Модный приговор".
03.35 "Мужское/Женское" (16+).

РОССИЯ 1

05.20 "Без срока давности". Худ. фильм (12+).
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.25, 02.35 "Россия. Гений места" (12+).
12.25, 14.30 "Недотрога". Сериал (12+).
14.00 "Вести".
16.55 "Один в один". Шоу перевоплощений (16+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.35 "Альпинист". Драма (12+).
03.30 "Планета собак".
04.05 "Комната смеха".

"ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
20.00 "Котлаузар" (6+)
23.00 "Кис ултырып". Гүзәл Аҫылбаева (12+)

БСТ

07.00 Гимн Республики Башкортостан (12+).
07.05 Новости (на башк. яз.) (12+).
07.15 "Доброе утро!"
08.00 "Йома" (0+).
08.30 "Барби и Рапунцель" (0+).
10.00 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).
10.15 "Перекличка" (6+).
10.30 "Гора новостей" (0+).
10.45 "Фанташ" (0+).
11.00 "Ал да гуль" (0+).
11.15 "Байтус" (6+).
11.30 "Сулпылар" (0+).
11.45 "Алтын тирмә" (0+).
12.30 Новости недели (на башк. яз.) (0+).
13.00 "Тәмле" (12+).
13.30 "Үткән ғүмер" (12+).
14.00 "Дарю песню" (12+).
16.00 "Дорога к храму" (0+).
16.30 "Вестник "Газпром трансгаз Уфа" (12+).
16.45 Гала-концерт II Международного конкурса-фестиваля "Зов Урала" (12+).
18.15 "Дарман" (12+).
19.00 "История признания" (6+).
19.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).
19.30 "Историческая среда" (12+).
20.00 "Мир настоящих мужчин" (12+).
20.15 "Вопрос+Ответ=Портрет" (0+).
21.00 "Любимое дело" (12+).
21.30 Новости недели.
22.15 "Специальный репортаж" (12+).
22.30 "Баик-2015" (6+).
23.30 "Вечер.com" (12+).
00.15 "Свидание с джазом" (12+).
00.45 "Май". Худ. фильм (12+).

ИҒТИБАР!

Унашей дочки Самиры (2,5 года) - рак сетчатки глаза, ретинобластома, 5-я стадия. В России органосохраняющее лечение невозможно. В Швейцарии есть клиника, в которой работает известный профессор Франсис Мунье. Мы отправили профессору результаты наших обследований, и он сообщил нам, что имеются высокие шансы на сохранение глаза и возможно даже зрения. Клиника готова принять нас в ближайшее время, но для начала лечения необходим депозит в размере 50000 франков.

Если вы хотите помочь нам материально:

- **Карта Сбербанка**: 4276 0600 1636 2561

Банковские реквизиты: Банк получателя: Сбербанк, доп. офис №8598/0176, Кор/счёт банка: 30101810300000000601, БИК банка: 048073601, Счёт получателя: 40817810306001622286, Ф.И.О. получателя: Гильманов Азат Фагимович.

- **Карта банка Уралсиб:** 4406 6650 0647 8285
- **Яндекс Кошелек:** 410012997867317
- **QiWi:** +79279425666
- **WebMoney:** R208716321769

Подробная информация в нашей группе:
https://vk.com/samira_sos
Спасибо!

✓ *Эшлекле кешеләр һымаҡ фекер йөрөтөгөҙ. Уйлы кешеләр һымаҡ ҡарар ҡабул итегеҙ.*

(Анри Бергсон).

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

Яҙ миҙгелдәрендә кешеләр йыш ҡына витамин етешмәүҙән яфалана. Оҙайлы ҡыш айҙарынан һуң сәләмәтлеген нығытып, организмдары талап иткән файҙалы витаминдарҙы туплап алырға теләгән һәр кемгә тәбиғәт үҙ ярҙамын тәҡдим итә. Был юлы һеҙгә, хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ, тәбиғәт аптекаһының шифалы сығанаҡтарының береһе - ҡайын һуты тураһында ентекләберәк һөйләмәксебеҙ.

ҠАЙЫН ҺУТЫ

Ҡайын һутын көндәр йылынып, ҡар ирей башлағандан алып ағастар бөрөлөнгәнгә тиклем йыйырға була. Һут иң шәп аҡҡан ваҡыт иртәнге ундан киске алтыға тиклем. Ғәҙәттә бер ҡайындан 2-3 литр һут алырға мөмкин. Ҡайын һуты бик шифалы булыуын белеп, күберәк йыйырға теләгән осраҡта ла үтә һаҡһыҙ рәүештә бер ағасты күп тишкеләргә ярамай. Әгәр ҙә олононоң диаметры 20-25 см булһа - бер, 25-35 см - ике, 35-40 см - өс, 40 сантиметрҙан артыҡ булған осраҡта дүрт тишек яһарға мөмкин.

Ҡайын һутының составында эфирлы майҙар, витаминдар, сапонин матдәләре, бетулол, тиҫтәләгән органик кислоталар бар. Ҡайын һутын 2-3 аҙна дауамында даими рәүештә көнөнә өс тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда эсеү организмдың яҙ осоронда миктәүе, авитаминоз, хәтер юғалтыу, хәлһеҙлек һәм күңел төшөнкөлөгөнән арынырға ярҙам итә. Фитотерапия күҙлегенән ҡарағанда, ҡайын һуты организмда матдәләр алмашыныуын яйға һалырға булышлыҡ итеүсе иң шәп әмәл. Ябай һыуҙан артыҡ айырмаһы юҡ кеүек булһа ла, ул ашҡазанға ла ыңғай йоғонто яһай. Төрлө микроэлементтарға бай ҡайын һутын шулай уҡ тире, ҡан ауырыуҙары, быуындар һыҙлауы, тамаҡ шешеүе, бронхит, үпкә шешеүе һәм башҡа төр тын юлы ауырыуҙарын дауалауҙан тәҡдим итәләр. Һут бөйөр һәм һейҙек ҡыуығында барлыҡҡа килгән ташты ҡыуа, ҡанды таҙарта, йоғошло ауырыуҙар менән яфаланған осраҡта организмдан зыянлы матдәләрҙе йыуып сығара. Ашҡаҙан сей яраһы, бауыр, бөйән, үт ҡыуығы ауырыуҙарын, түбән әселек, радикулит, ревматизм, быуын шеше, туберкулез, зәңге, баш ауыртыуын, венерик ауырыуҙарҙы дауалау өсөн эсергә мөмкин. Экзема, һытҡы сыҡҡанда тирене таҙартыу һәм дымландырыу йәһәтенән дә ярҙам итә. Тағы ла сәстәрҙәге ҡауаҡты бөтөрөү, уларға тәбиғи йомшаҡлыҡ биреү өсөн ҡайын һыуы менән йыуырға кәңәш ителә. Ҡаты тымау тейгәндә яңы ғына йыйылған ҡайын һутын һәр көн иртәнсәк бер стакан, йүтәлләгәндә йә һыуыҡ тейгәндә һөт ҡушып йылытып, аҙ ғына он йәки крахмал бутап эсергә кәрәк. Шулай ҙа, ҡайын алҡаһы һеркәләренән аллергия булған кешеләргә, күкрәк һөтө имеүсе балаларға ҡайын һуты кәңәш ителмәй.

Әгәр ҙә һеҙ нутты йыйып алғандан һуң бер аҙ һаҡлап эсергә теләһәгеҙ, быяла һауытҡа тултырып, һыуытҡысҡа ҡуйырға кәрәк. Әммә 2-3 көндән артыҡ һаҡламау хәйерле, юғиһә, әсегән нуттың файҙаһынан зыяны күберәк булыр. Тағы ла ҡайын һутын быяла банкыларға ябырға мөмкин. Быныңөсөн уны эмалле һауытта 80 градусҡа тиклем эҫетеп, быяла банкыларға ҡойоп, тимер ҡапҡас менән нығлап ябырға. Шунан 15-20 минут тирәһе 85 градуслыҡ эҫе һыуҙа топ алырға һәм бүлмә температураһында һыуытырға. Һауыттарға ошо рәүешле ябылған ҡайын һуты бер-нисә ай шифаһын юғалтмай.

Ҡайын һыуынан кеүәҫтә эшләп эсергә була. Иң ябай ысулы шундай: яңы йыйылған ҡайын нутын 1,5 литрлыҡ пластик шешәгә ҡойоп, эсенә 5-10 бөртөк йөҙөм төшөрөп, ҡапҡасын ҡаты итеп бороп ябабыҙ һәм йәйгә тиклем мөгәрәпкә төшөрәбеҙ. Кеүәҫ тиҙ арала әҙер булһын, тиһәгеҙ, ҡайын нутын 35 градусҡа тиклем йылытып, 1 литрға 15-20 грамм сүпрә һәм 3 йөҙөм бөртөгө һалырға кәрәк. Лимон ҡабығы өҫтәп ебәрергә лә мөмкин. Тәмле кеүәҫ 5-7 көн эсендә әҙер буласаҡ.

Сәләмәтлекте, иммунитетты нығытыу өсөн 300 грамм ҡыҙыл көртмәленең нутын һығып, бер аҙ бал ҡушып, 2 литр ҡайын һыуы менән бутап эсергә тәҡдим ителә. Ҡыҙыл көртмәле урынына үҙегеҙгә оҡшаған бүтән төр еләкемештәр һутын һалырға мөмкин.

Ҡайын һуты нигеҙендә эшләнгән маска биткә бик файҙалы икән. 1 ҡалаҡ ҡаймаҡты 2 ҡалаҡ ҡайын һуты һәм 1 балғалаҡ бал менән ҡушып бутарға. Масканы биткә һөртөп, 15 минут тирәһе тоторға һәм һалҡынса һыу менән йыуып төшөрөргә кәрәк. Биткә һытҡы, экзема сыҡҡан осраҡта ҡайын һутын мамыҡҡа манып битте һөртөү килешә.

НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1436 һижри йыл.

Апрель (Йомадиәл ахыр)	Иртәнге намаҙ	Ҡояш ҡалҡа	Өйлә намаҙы	Икенде намаҙы	Ауыҙ асыу, аҡшам	Йәстү намаҙы
13 (24) дүшәмбе	4:51	6:21	13:30	18:42	20:12	21:42
14 (25) шишәмбе	4:49	6:19	13:30	18:44	20:14	21:44
15 (26) шаршамбы	4:46	6:16	13:30	18:46	20:16	21:46
16 (27) кесе йома	4:44	6:14	13:30	18:48	20:18	21:48
17 (28) йома	4:42	6:12	13:30	18:50	20:20	21:50
18 (29) шәмбе	4:39	6:09	13:30	18:52	20:22	21:52
19 (30) йәкшәмбе	4:37	6:07	13:30	18:54	20:24	21:54

"Башҡортса дини календарь"ҙән алынды.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

11 апрель "Бәхет хаҡы" (Х. Мөҙәрисова), муз. мелодрама
11 апрель "Әлифбанан бер себеш" (А. Кивиряхк), монодрама
12 апрель "Ҡаһым түрә" (Б. Бикбай, Х. Иргәлин), драма
16 апрель "Ҡара йөҙҙәр" (М. Ғафури)
17 апрель "Ғафү ит мине!" (И. Герман), мелодрама

М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

14, 15 апрель "Яуҙы еңгән мөхәббәт" (М. Кәрим), лирик комедия. Башлана 15.00, 19.00
16 апрель "Йәнкиҫәккәйем" (Т. Миңнуллин), муз. комедия

Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

11 апрель "Ә таңдар бында тыныс..." (Б. Васильев), драма

Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

13 апрель "Рәмил Хажиевҡа - илле, йырҙары ла елле", концерт
17 апрель Башҡортостандың атҡаҙанған артисы **Рәмизә Мөхәмәтшинаның** юбилей кисәһе

БАҠСА

СӘСЕҮ ТӘРТИБЕ

Кишер - баҡсасылар араһында иң билдәле культура. Был йәшелсә бик файҙалы, ул В, РР, С, Е, К витаминдарына бай, кишерҙәге каротин кеше организмында А витаминына әүерелә. Кишерҙәге бета-каротин үпкәләр эшмәкәрлеген, күреү һәләтен яҡшырта, теш ҡаҙналарын нығыта. Кишер сәсеүҙең бер ауырлығы ла юҡ, уны бар баҡсасылар ҙа бер төрлө сәсәлер, моғайын. Шулай ҙа түбәндәге кәңәштәрҙе лә ҡулланып ҡарағыҙ.

• Кишерҙе ер йылынғас сәсәләр. Түтәл әҙер булғас, унда ҡоро орлоҡтарҙы сәсеп сығалар. Әммә был осраҡта кишер оҙаҡ шытасаҡ, тупраҡтағы дымдың етмәүе лә бар. Шуға ла, ғәҙәттә, кишер тәүге ямғырҙан һуң ғына сыға башлай. Әгәр ҙә орлоҡтарҙы еүешләп йәки шыттырып сәсһәгеҙ, түтәлгә шунда уҡ һыу һибергә кәрәк. Һыу һибеүҙе артабан да дауам итергә тура килер, сөнки тупраҡтың дымын тотмаһаң, шыттырылған орлоҡтар һәләк була.

• Баҡсала ҡар иреп, һыуҙар йыйыла башлағас та, кишер орлоғон еүешләп, туҡыма тоҡсайға налып, көрәк тәрәнлегендә соҡор ҡаҙып, шунда күмеп, өҫтөнә ҡар ташлап ҡуяһың. 10-12 көндән орлоҡтар шыта башлай. Уларҙы алып, ҡоро йылға ҡомо менән ҡатыштырып, түтәлгә һибеп сығаһың. Тупраҡты тығыҙландырыу өсөн өҫтөнә устар менән баҫҡылайһың һәм полиэтилен менән ябаһың. 5-6 көндән кишерегеҙ баш төртөп тә сығыр.

• Кишер орлоҡтарын редис орлоғо менән ҡушып болғатаһың, әҙерәк йылға ҡомо өҫтәйһең. Шуны түтәлгә сәсеп сығаһың. Был осраҡта кишер түтәлен һирәкләп сығырға кәрәкмәй, редис тиҙ өлгөргәнлектән, уны йыйып ала торасаҡһығыҙ, үҫеп килгән кишерҙәргә урын да иркенәйә. Редис урынына шпинат, салат ҡулланырға була.

• Магазиндарҙа ҡоро гидрогель менән ҡапланған орлоҡтар һатыла. Уларҙы сәсеү бик уңайлы, бураҙнаға берәмләп кенә төшөрәһең, яңылыш төшөп киткән осраҡта ла сағыу төҫтәге орлоҡтарҙы тиҙ генә йыйып алырға була. Был орлоҡтарҙа үҫентегә тәүге мәлдә кәрәк булған бөтөн матдәләр бар.

РЕДИС ДЫМ ЯРАТА...

Редис - иртә өлгөрөүсе йәшелсәләрҙең береһе. Эре, тәмле, һутлы редис үҫтереүҙең тәүге шарты - дөрөҫ сорт һайлау.

Ябай сорттарға ҡарағанда, гибридтар тиҙерәк өлгөрә, уларҙың уңышы ла яҡшы була. Бындай орлоҡтарҙың ҡабына F1 тигән билдә ҡуйыла. Шулай ҙа редистың башҡа сорттары ла насар түгел. Иртә уңыш алыу өсөн "Французский завтрак", "Заря", "Данар F1", "Кардинал F1" кеүек сорттарҙы һайлағыҙ. Улар сәскәндән һуң 16-23-сө көндө үк ашарға яраҡлы була. "Любава", "Хелро", "Кармен", "Меркадо" сорттары ла иртә өлгөрә. "Кармен" сорты татлы тәме менән дә айырылып тора, уны теплицаға сәсергә лә була.

Асыҡ һауала "Данко", "Маяк", "Белый клык", "Октава" сорттары яҡшы үҫә. "Октава" сорты аҡ төҫтә, тәмле лә, майланып тора, уны өҫтәлде биҙәү өсөн ҡулланырға мөмкин. Был сорттар һаҡлауға ла уңайлы.

Һуңыраҡ уңыш өсөн ике сортты ҡулланырға була: "Удача" сорты 18 см-ға еткән боҙбармаҡ рәүешендә, ә "Осенний гигант" сорты эре, аҡ төҫтәге уңышы менән ҡыуандыра. Был редистар баҙҙа ике айға тиклем һаҡлағанда ла, тәмен дә, һутын да юғалтмай.

Редис эре булһын өсөн уны йыш сәсергә ярамай. Аралары 5-6 см-ҙан кәм булмаһын. Был йәшелсә дым ярата, тупраҡ яҡынса 8-10 см тәрәнлектә еүеш булырға тейеш, юғиһә, редис әсе буласаҡ.

✓ *Арҡа һөйәк - атайҙар, тип танытылған,*
Ҡабырғанан ҡатын заты яралтылған.

Кәкерәймәҫ үҙ яйына ҡабырға ла,
Арҡа һөйәк тейешенсә тура булһа.

ӘЙТЕШ

МУЙЫН ТҮГЕЛ, БАШ БУЛЫР САҠ ЕТКӘН...

"Киске Өфө"лә бер юлы ике сәсәндең әйтешен ойоштороу тураһында хәбәр итеп тә өлгөрҙөк, майҙанға иң тәүҙә Айытҡужа килеп етте һәм Өшөрәне әйтешкә саҡырҙы. Шиғри әйтештең башы 14-се һанда баҫылғайны, дауам итәбеҙ:

Айытҡужаның Өшөрәгә әйткәне:
Яуабыңа минең һүҙем - аҡыллыһың,
Сәпкә тейә атҡан уғың, һин хаҡлыһың.
Һиҙемләйем, һин һис кенә лә түгел ябай.
Яуап биргән саҡта көрәк булыу абай.
Шулай ҙа уйҙарымды әйтеп үтәм,
Өндәшмәйсә тауыш-тыныһыҙ
үтеп китмәм.
Ир-егетте бигүк артыҡ яманлама,
Бисәләрҙе ил тотҡаһы тип һанама.
Эркет һыуы болғағандан ҡымыҙ булмай,
Һыйыр һыйырға артылып, быуаҙ булмай.
Аҡса табып ирҙәр ҡырҙан ялға ҡайта,
Тапҡан малы бисәһенең ҡулына ята.
Ял итә лә, вахта, тиеп, тағы китә,
Бисәләре ойоштора банкет-кисә.
Аулаҡ өйҙә әхирәттәр типтерәләр,
Байтаҡ ҡына аҡсаны ла бөтөрәләр.
Белеп-күреп йөрөйөм мин ундайҙарҙы.
Ят бауырға ҡойроҡтарын болғауҙарын.
Һәүетемсә төптән генә уйлағанда,
Яңғыҙ һыйыр бар көтөүҙе буяғандай.
Был донъяла ирмен тигән ирҙәр ҙә бар,
Хан ҡыҙында беҙ күрмәгән керҙәр ҙә бар.
Әйткәндәр бит, ирҙе ир иткән дә ҡатын,
Күптәренең йөрәктәре иргә ҡаты,
Аҡса өсөн күңелдәре һаҙға батты.
Алашалар юл бирмәйҙәр сәмле тайға,
Уйлайҙармы: беҙҙән алда осор Айға.
Улар түрҙә, ил күгендә ҡыһыр болот,
Яумайҙар ҙа, китмәйҙәр ҙә елгә туҙып.

Өшөрәнең Айытҡужаға әйткәне:
Бисә-сәсә ваҡ-төйәккә гел көймәй ул,
Тел теймәҫкә тик торғандан
тел теймәй ул.
Ҡатын-ҡыҙҙы юҡҡа ғына, гөл, тимәйҙәр,
Наҙын һөйһәң, ҡәҙерҙәрен бел, тимәйҙәр.
Гөлгә кәрәк ваҡытында һыуҙар һибеү,
Оҙаҡ түгел ҡоролоҡта ҡыулап кибеү.
Йортоң баҡса булһын тиһәң -
һуҡма аҡса,
Үҙе юҡтың күҙе лә юҡ, ҡыйбат такса.
Баҡса ҡиммәт алһыуланған емеш менән,
Көҙҙәрендә ҡыуандырған уңыш менән,
Аҡса ғына бәхет булып ҡунырмы һуң,
Атай күрмәй үҫкән бала уңырмы һуң?
Уйлай белһәң - өй эсендә эш бөткәнме,
Олатайҙар мал табам тип эт көткәнме?
Бәрәкәтһеҙ ситтә йөрөп ятмағыҙҙар,
Китеп бөтмәҫ шул сағында ятҡа ҡыҙҙар.
Оятыраҡ телгә алыу үгеҙҙәрҙе,
Ҡыҙтәкәләр баҫып бара бит беҙҙәрҙе,
Аҡһаҡалдар ниңә шуны күҙәтмәйҙәр,
Ваҡытында шул афәтте төҙәтмәйҙәр!
Заң боҙмаһаҡ, быуаҙ булыр тана-тыуса,
Кем ғәйебе - аҡ улыңдан ҡара тыуһа?
Белеп-күреп йөрөгәстен - тыя белең,
Таҙартмаһаң ваҡытында - серер күлең.
Арҡа һөйәк - атайҙар, тип танытылған,
Ҡабырғанан ҡатын заты яралтылған.
Кәкерәймәҫ үҙ яйына ҡабырға ла,
Арҡа һөйәк тейешенсә тура булһа.

Айытҡужаның Өшөрәгә әйткәне:
Гөлдәрҙең дә мәк исемле сағыуы бар.
Матурҙарҙың башҡа етер ағыуы бар.
Совет иле бабайҙарҙан тартып алды
Тәрбиәне -
Кеше көнлө комсомолдың иңенә һалды.
Ауылдарҙа ағинәйҙәр ҡоро бар ҙа,
Таҡмаҡ әйтеп сәй эсәләр, ҡайҙа файҙа?
Һайланмаған депутаттар ил түрендә -
Кәпәстәрен уйлағанға ни күренә?
Ни әйтер, тип улар ҡарай Мәскәү яғын,
Ҡайһылары ҡайғырталар кеҫә яғын.
Миллионды урлаусыға тик условный,
Ике ҡуян аулаусыға катушка - полный.
Районда ашағандар Өфөгә ҡаса,
Әйҙүк, тиеп ҡала уға ҡолас аса...
Яҙғаныңды уҡыным да уйға баттым,
Ҙур суртандың тештәренә килеп ҡаптым.
Уйлауымса һин түгелһеңдер талибә.
Иң кәмендә ҙур белемле мөғәллимә.
Тыйнаҡлығың әйтеп тора, мөслимәһең,
Минең менән сағыштырһаҡ,
көслө лә һин.
Әйҙә әле ныҡлап ҡына танышайыҡ,
Әсе-әсе һүҙҙәр әйтеп талашмайыҡ.
Был донъяла күптәр бар ул минең ише,
Ике тапҡыр алиментщик булған кеше.
Эшләгәнем осеменатор - колхоздыҡы,
Һыйыр малы өсөн түгел - тауыҡтыҡы.
Хаҡлы ялға сығырға ла байтаҡ әле,
Ололарға сағыштырһам, байтал әле.
Таныштырып үтһең ине үҙең менән,
Тартынмаһаң ҡыҫҡа ғына һүҙең менән.

Өшөрәнең Айытҡужаға әйткәне:
Һүҙ башлайым әле бөгөн ҡойроҡ яҡтан,
Затым һорап, Айытҡужа ҡороҡ атҡан.
Мин бер инәй, бинсе ашап өйҙә ятам,
Интернетта ваҡыт-ваҡыт хәбәр һатам.
Ир бисәһе, әсәймен дә, өләсәймен,
Бер һеләүһен була алам, бер бесәймен.
Теш күрһәтеп ала алам яуыз ятҡа -
Тормош шулай әйләндерә төрлө затҡа.
Бауырҙашым, һис теләк юҡ талашырға,
Экран аша аҡырайып ҡарашырға,
Һинең менән бүлешерҙәй юҡ та малым,
Һинең заттан беҙгә килгән юҡ та ҡалым.
Башҡорт хәле ҡайҙа ла бер - ала-сола,
Һирәк толпар, күберәген аҡһаҡ ҡола.
Беҙ үҙебеҙ була алһаҡ ныҡлы силәк,
Ҡапҡасыбыҙ булыр шәптән, түгел иләк.
Ағинәйҙәр башлаһындар әйҙә сәйҙән,
Бәлки, шулай ҡотолорбоҙ хәрәм мәйҙән,
Шаҡшы гәҙәт -
ҡыҫтап-ҡыҫтап ағыу һоноу,
Эсмәгәнгә яман әйтеп осоп ҡуныу.
Ағинәйҙәр эшкинмәй тип ятмағыҙсы,
Аҡһаҡалдар ни эш ҡыра, нимә ҡурсый?
Ир-егеткә ҡытлыҡ тиеп ҡотормағыҙ,
Өйләндермәй,
ҡыу ҡалдырып ултырмағыҙ.
Үҙ өйөндә һәр береһе үҙе түрә
Депутат та, хөкүмәт тә - Хоҙай күрә,
Сабыйына хәләл һөтөн бирһен әсә,
Хәләл ризыҡ менән тулһын туҫтаҡ-кәсә.
Урлашҡандың һәммәһенең гонаһы бер,
Дөйәһе ни, энәһе ни - утлы күмер,
Йәһәннәмгә утын йыя үҙе өсөн
Мал тапҡандар, һалмайынса хәләл көсөн.
Урлап-талап Өфө яҡҡа китеү менән,
Ҡотолалмаҫ Хаҡ Тәғәлә хөкөмөнән.
Балы-майы булһын хәләл, үҙебеҙҙән,
Иман нуры юғалмаһын йөҙөбөҙҙән.

Айытҡужаның Өшөрәгә әйткәне:
Тартай таба теленән,
Барыһы ла үҙемдән.
Ҡыҙыҡһындым да баҫтым,
Үҙем ҡапҡанға ҡаптым.
Һин, минеңсә, ғалимә,
Һинең янда мин нимә?
Һин бөркөт, мин бүҙәнә,
Ҡарағайға бүтәгә,
Мин сыбыҡ, һин әрҙәнә.
Дим буйында тыуҙыңмы,
Сәс толомон йыуҙыңмы?
Алла биргән зиһен менән
Ҙур ғалимә булдыңмы?
Афарин, тием, инәй,
Йә апай, йәки еңгә.
Көс етмәҫ менән алышып,
Ауыр йөк алдым иңгә.
Үҙем арыҡҡынамын,
Халыҡса ырыҡтамын.
Йәш тә түгел - әлегә ҡыр(ы)ҡтамын.

Өшөрәнең Айытҡужаға әйткәне:
Йәле, ҡустым, улай бик тиҙ билең бирмә,
Ҡул еленән йығылырмы әллә тирмән,
Оло күреп, ахыры, миңә һырт бирегең,
Барып етмәй борола бит ҡырҡ сиреүең.
Нишләйһең һуң -
ҡындан алып уҡ атылған,
Уҡҡынайың килеп тейҙе ҡыҙ-ҡатынға,
Мин дә башҡорт -
өйрәнгәнмен бил бирмәҫкә,
Ирҙәр бөтһә, илбаҫарға ил бирмәҫкә.
Телең үткер, күҙең оҫкор - аҙарынма,
Хәлем етмәй ҡуйыр тиеп ағарынма,
Өҙөлһә лә, эстән ялға эсәгеңде,
Булмағыҙсы, ир-егеттәр, бисә көнлө!
Үҙ-үҙеңде бахыр тимә, әйтмә аслан,
Башҡорт ире йөгөнһә лә - заты арыҫлан,
Үҙең түгел, дошманың да әйтер: Батыр,
Еңеп булмаҫ быны тиер, боҫоп ятыр.
Дим буйынан түгел дә мин, мин - Өшөрә,
Өшөрәләр ҡыйыу була, эш бешерә,
Тик шулай ҙа уйлай белә ирҙең хаҡын,
Үҙең түгел, уйлауымса, арыҡ атың.
Батырға ла өс көн йоҡлап алыу кәрәк,
Ҡайһы саҡта ялтанып та ҡалыу кәрәк,
Оят булыр, бер әбейгә, еңдең, тиһәң,
Минән алда яу атына мендең, тиһәң...

ШУЛАЙ ИТЕП...

Аңлағанһығыҙҙыр, әле гәзитебеҙҙә ике сәсәндең әйтеше бара. Кеҫә телефоны аша СМС менән Айытҡужа сәсән Өшөрә сәсәниәне әйтешкә саҡырҙы һәм уларҙың әйтешенең оҙайлығы бирелгән һорауҙарының һәм яуаптарының ҡыҙыҡлы булыуына бәйле буласаҡ. Ике сәсәнгә йәнәш рәүештә тағы ике сәсән әйтеш ҡора ала. Әйтеш +7-937-835-34-74 телефонына СМС-хәбәр булараҡ та, "Киске Өфө"нөң электрон почтаһы аша ла: kiskeufa@ufacom.ru. ҡабул ителә. Яңы ҡушылыусылар үҙҙәренең әйтешкә саҡырыуын "Бәйләнештә" сайтында "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы" төркөмөнә лә һала ала.

АҠЫЛ-ҠАҘНА

Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

БЕРӘҮҘӘР ТҮРӘ...

берәүҙәр түрә янында көн күрә

Айыу балаһын итәккә һалһаң да илекмәҫ, бүре балаһын бүреккә һалһаң да берекмәҫ.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

Ҡатын-ҡыҙҙың ни теләгәнен белер өсөн... ир-егет уға өйләнергә тейеш.

(Шолом-Алейхем).

Эшлекле кешеләр һымаҡ фекер йөрөтөгөҙ. Уйлы кешеләр һымаҡ ҡарар ҡабул итегеҙ.

(Анри Бергсон).

Үҙ-үҙенә һылтанған кешенән дә һөйкөмһөҙөрәк әҙәм юҡтыр.

(Гибер).

Белем - былай ҙа яҡшы нәмә, ләкин ул оло көскә әйләнһә һәм төрлө яҡшы эштәр ҡылыуға булышлыҡ итһә, тағы ла мең тапҡырға яҡшыраҡ.

(Франсуа Гизо).

Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ауыл мәктәбендә бик хөрмәтле уҡытыусы ир эшләгән. Ул балаларҙы бик ныҡ яратҡан, бар ваҡытын улар менән үткәргән, төрлө ҡыҙыҡлы саралар ойоштorған. Уның тағы бер ҡыҙыҡ ҡына ғәҙәте булған: бар балаларға бүләктәр өләшергә яратҡан. Әммә уның магазиндан һатып алған йә үҙ ҡулдары менән эшләгән бүләктәренең барыһы ла тиҙ ватылыусан, нескә генә булған. Балалар уҡытыусы биргән бүләктәр менән нисек кенә һаҡ ҡыланырға тырышмаһын, улар ватыла торған. Ҡайһы бер балалар ҡыйралған уйынсығына ҡарап, күҙ йәштәре түккән. Әммә уҡытыусы күпмелер ваҡыттан уларға уйынсыҡтың барыбер тиҙ ватыла торған яңыһын бүләк иткән.

Бер саҡ бер нисә ата-әсә уҡытыусыға шулай тип мөрәжәғәт иткән:

- Хөрмәтле уҡытыусы, һеҙ шул тиклем ҙур йөрәкле, изге кеше, беҙҙең балаларҙы яратаһығыҙ. Ләкин ни өсөн һеҙ уларға шундай тиҙ генә боҙола йә ватыла торған бүләктәр алып бирәһегеҙ? Улар ул уйынсыҡтарҙы һаҡларға, ипләп кенән уйнарға тырыша, әммә барыбер ватылыуҙан ҡотола алмай. Шунан улар илай, беҙ уларҙы көскә тыныслandырабыҙ. Һеҙҙең бүләктәр шул тиклем матур, тик улар ыуалыусан, ватылыусан булғас, уйнауға яраҡһыҙ бит...

Уҡытыусы уларға шулай яуаплаған:

- Бына был балалар мәктәпте тамамлар, үҙаллы тормош юлына аяҡ баҫыр. Кемдер уларға үҙ Йөрәген бүләк итер. Йөрәк бит был уйынсыҡтарға ҡарағанда ла нескәрәк. Минең бүләктәрем балаларҙы бына шундай нескә, әммә ҡиммәтле бүләктәр менән мөғәмәлә итергә өйрәтмәҫме икән, тигән ниәттән ине минең был ҡылығым..."

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
kiskeufa@ufacom.ru
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 10 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5010
Заказ 1629